# ПОСЛУШАЙ, КАК ВСЁ С НАМИ ГОВОРИТ

# ТЫҢЛА ӘЛЕ, УЛАР БЕҘҘЕҢ МЕНӘН ҺӨЙЛӘШӘ

Фарук Кангер



ООО "САЛЯМ"

# ПОСЛУШАЙ, КАК ВСЁ С НАМИ ГОВОРИТ

# ТЫҢЛА ӘЛЕ, УЛАР БЕҘҘЕҢ МЕНӘН ҺӨЙЛӘШӘ

Фарук Кангер

2018 / 1440

6+

# ПОСЛУШАЙ, КАК ВСЁ С НАМИ ГОВОРИТ

# ТЫҢЛА ӘЛЕ, УЛАР БЕҘҘЕҢ МЕНӘН ҺӨЙЛӘШӘ

Фарук Кангер


| | |
|---|---|
| **Перевод с оригинала:** | Herşey Bizimle Ne Güzel Konuşuyor |
| **Автор:** | Фарук Кангер |
| **Перевод с турецкого:** | Каират Эргазиев |
| **Редактор:** | Татьяна Хабибуллина |
| **Рус теленән тәржемәсе** | Әҙибә Ғәҙел |
| **Редактор** | Айҙар Ғәййәр |
| **Верстка и дизайн:** | Ильхан Башташ |
| **ISBN :** | 978-5-6041415-0-2 |
| **Адрес:** | Магазин мусульманской литературы и атрибутики - ООО "САЛЯМ"<br>450106, г. Уфа, ул. Степана Кувыкина, 23 |
| **Тел:** | +7 (347) 254-18-76 |
| **Э-почта:** | salammagazin@mail.ru |
| **Отпечатано:** | ООО "Агентство печати "Приволжье"<br>603157, г. Нижний Новгород,<br>ул. Березовская, 103<br>www.apprivolzhye.ru<br>e-mail: apprivolzhye@bk.ru |

# Содержание

Предисловие ....................................................................................... 5
Как прекрасно разговаривает с нами земля ........................................... 9
Как прекрасно разговаривает с нами атмосфера ................................... 19
Как прекрасно разговаривает с нами вода ............................................. 31
Как прекрасно разговаривает с нами Солнце ......................................... 39
Как прекрасно разговаривает с нами Коран ........................................... 49
Как прекрасно разговаривают с нами невидимые создания .................. 65
Как прекрасно разговаривают с нами рыбы ........................................... 77
Как прекрасно разговаривают с нами птицы ......................................... 89
Как прекрасно разговаривают с нами деревья ....................................... 99
Как прекрасно разговаривают с нами собаки… ...................................... 109
Как прекрасно разговаривают с нами подземные обитатели ................ 121
Как прекрасно разговаривает с нами человек (1) ................................... 131
Как прекрасно разговаривает с нами человек (2) ................................... 143

# Йөкмәткеһе

Инеш һүҙ ............................................................................................... 7
Ер беҙҙең менән ни ҡәҙәр гүзәл һөйләшә ................................................ 14
Атмосфера беҙҙең менән ни ҡәҙәр гүзәл һөйләшә .................................... 25
Һыу беҙҙең менән ни ҡәҙәр гүзәл һөйләшә ............................................... 35
Ҡояш беҙҙең менән ни ҡәҙәр гүзәл һөйләшә ............................................. 44
Ҡөрьән беҙҙең менән ни ҡәҙәр гүзәл һөйләшә .......................................... 57
Күҙгә күренмәгән заттар беҙҙең менән ни ҡәҙәр гүзәл һөйләшә… ........... 71
Балыҡтар беҙҙең менән ни ҡәҙәр гүзәл һөйләшә ..................................... 83
Ҡоштар беҙҙең менән ни ҡәҙәр гүзәл һөйләшә ......................................... 94
Ағастар беҙҙең менән ни ҡәҙәр гүзәл һөйләшә .......................................... 104
Эттәр беҙҙең менән ни ҡәҙәр гүзәл һөйләшә ............................................. 115
Ер аҫтын төйәк итеүселәр беҙҙең менән ни ҡәҙәр гүзәл һөйләшә… ......... 126
Кеше беҙҙең менән ни ҡәҙәр гүзәл һөйләшә (1) ....................................... 137
Кеше беҙҙең менән ни ҡәҙәр гүзәл һөйләшә (2) ....................................... 150



Как появилась жизнь на земле? Кто создал Землю, Солнце, Луну, звезды? Кто все живые существа обеспечивает всем необходимым? В этой книге, рассчитанной на детей и подростков, найдутся ответы на эти и многие другие вопросы. Из нее вы почерпнете много интересных сведений о тайнах небесных тел, жизни земных обитателей и самого человека. Надеемся, что она поможет вам по-новому взглянуть на окружающий мир и сделать много удивительных открытий.

**Фарук Кангер**

Ерҙә тормош нисек барлыҡҡа килгән? Кем Ерҙе, Ҡояшты, Айҙы, йондоҙҙарҙы барлыҡҡа килтергән? Барса тере йән эйәләрен бөтә кәрәкле нәмәләр менән кем тәьмин итә? Балаларға һәм үҫмерҙәргә тәғәйенләнгән был китапта күк есемдәре, ерҙә төйәкләнгән бөтә барлыҡ һәм кешегә ҡағылышлы бик күп серҙәр асылған, мәғлүмәттәр һәм факттар бирелгән. Ул балаларыбыҙға тирә-яҡ мөхиткә яңы күҙ менән бағырға, ҡыҙыҡһындырған һорауҙарына яуап табырға мөмкинлек бирер, тип өмөтләнәбеҙ.

**Фаруҡ Кангер**

# Предисловие

Миллиарды лет назад Всемогущий Господь создал среди бескрайней Вселенной один мир, наполненный неповторимой и удивительной красотой. Потом Он создал там человека, который является самым Его любимым творением, самым прекрасным произведением искусства.

Этот мир настолько идеально создан Творцом, настолько комфортно обустроен, что люди пребывают в нем в состоянии полного покоя и счастья. Вглядываясь в необъятные морские просторы, вдыхая аромат разнотравья, доносящийся с залитых солнцем лугов, наблюдая за спокойным течением реки, любуясь красивыми восходами и закатами или лесными пейзажами, мы чувствуем, как наша душа наполняется радостью. Солнце, воздух, вода, земля, деревья, цветы, плоды предназначены для людей. Вся эта Вселенная создана для человека, являющегося самым почетным и прекрасным творением Бога. Все блага существуют для того, чтобы посредством них человек познавал своего Создателя и через благодарность Ему стремился заслужить Его довольство!

Всевышний Аллах повелевает: **«В сотворении небес и земли, в смене дня и ночи – истинные знамения для обладающих разумом, которые поминают Аллаха и стоя, и сидя, и** [лежа] **на боку и размышляют о сотворении небес и земли** [и говорят]**: «Господь наш! Ты сотворил все это не напрасно. Славен Ты!..»** (Али Имран, 190-191).



Значит, ничто в этом мире не существует просто так, без смысла. Все сущее создано ради какой-то цели. Поэтому наш Господь не желает, чтобы мы бездумно смотрели на этот мир. Он желает, чтобы мы размышляли, анализировали, видели мир во всех тонкостях и деталях. Он желает, чтобы мы извлекали уроки и делали выводы, видя пасущихся на зеленых пастбищах овец, несущего былинку муравья или скользящую, подобно пестрой ленте, змею.

В этом произведении все сущее словно обретает дар речи. Все будут беседовать с вами! Все будут рассказывать о себе – от огромного раскаленного Солнца до атмосферы, окутывающей нашу Землю, от высоких деревьев до птиц, щебечущих в их ветвях, от червей и жуков, обитающих в земле, до микроскопических, невидимых глазом живых существ! Они сообщат о глубокой мудрости, заключенной в их жизни, и поведают свои удивительные тайны!

Вместе с этой книгой вы совершите необычайное путешествие в другие миры! Вы будете любоваться величественными картинами, в которых запечатлелось восхитительное искусство Творца, созерцанием которых невозможно насытиться! После того, как вы прочтете эту книгу, все окружающее предстанет перед вами совершенно в новом свете! Вы иначе будете относиться к солнцу и воде. Земля, по которой вы ступаете, и деревья, которые шумят над вашей головой и укрывают в своей тени, будут представляться вам другими. В птице, парящей в небесах, рыбе, плещущейся в море, букашке, спешащей по своим делам, вы будете видеть проявление божественного чуда…

**Мы просим Аллаха, чтобы эта книга послужила причиной обретения прекрасной нравственности теми, кто размышлял, читая ее! Главное, чего мы желаем всем нам, – удостоиться милости Аллаха и обрести право войти в Рай, полный удивительных чудес и невиданной красоты.**

**Январь 2010**



# Инеш һүҙ

Миллиардтарса йыл элек Аллаһу Сүбхәнәһү үә Тәғәлә икһеҙ-сикһеҙ Йыһанда ғәжәйеп гүзәл бер донъя барлыҡҡа килтергән. Аҙаҡ Ул унда үҙенең иң яратҡан ижад емешен – кешене хаким итеп ебәргән.

Раббыбыҙ донъяны әҙәм өсөн уңайлы итеп, ул тыныс һәм бәхетле йәшәрлек итеп камил сүрәттә бар ҡылған. Диңгеҙ киңлектәрен, көҙгөләй ялтырап ятҡан күлдәрҙе, йылғаларҙың тыныс ағышын күреп, алһыуланып таң атыуына йәки киске шәфәҡ нурына һоҡланып, ергә йәм биргән урмандарға бағып, күңелебеҙгә шатлыҡ тула.

Ҡояш, һауа, һыу, ер, һәр төрлө ниғмәт-бәрәкәттәр, бөтә һоҡланғыс Ғәләм күркәм зат булараҡ бар ҡылынған һәм был донъяға һынау өсөн ебәрелгән кешегә тәғәйенләнгән. Барса ул бәрәкәттәр, кеше үҙен Бар ҡылыусыны танып, Уға рәхмәтле булып, Хаҡ Тәғәләбеҙҙең ризалығын алырҙай ғәмәлдәр ҡылып йәшәүе өсөн бүләк итеп бирелгән. Аллаһу Сүбхәнәһү үә Тәғәлә бойора: **«Күктәрҙең һәм Ерҙең яратылышында, төн менән көндөң сиратлашыуында аҡылы сәләмәт кеше өсөн, ысынлап та, ғибрәт биреүсе дәлилдәр бар. Улар (мосолмандар) аяҡ өҫтө тороп та, ултырып та, ҡырын ятҡан килеш тә Аллаһты зекер итә, Күктәрҙең һәм Ерҙең яратылышы хаҡында тәрән фекерләй, (һәм әйтә):**

**- Раббыбыҙ! Һин быларҙы бушҡа ғына яралтманың. Һине тәсбих итәбеҙ!..»** (Әлү Ғимран, 190-191).



Тимәк, был донъяға берәү ҙә буштан-бушҡа килмәгән. Һәр бер мәхлүк ниндәйҙер маҡсат менән бар ҡылынған. Бына ни өсөн Раббыбыҙ беҙҙең был донъяға вайымһыҙ бағыуыбыҙҙы теләмәй. Ул уйлана, фекер йөрөтә, анализ яһай белеүебеҙҙе, донъяның бөтә нескәлектәрен аңлауыбыҙҙы теләй. Йәшел туғайҙарҙа утлап йөрөгән малдарҙы, төйәгенә ризыҡ ташыған ҡырмыҫҡаларҙы, ялтыр таҫма һымаҡ шыуышып йөрөгән йыландарҙы күреп, һабаҡ алыуыбыҙҙы, һығымталар яһарға өйрәнеүебеҙҙе теләй.

Был әҫәрҙә бөтә барлыҡ үҙ телендә хәбәр һөйләйәсәк, һәммәһе беҙҙең менән әңгәмә ҡорасаҡ, һәммәһе беҙҙең менән үҙенсә һөйләшәсәк! Ғәләмәт ҙур ҡыҙған ҡояш, Ерҙе урап алған атмосфера, бейек ағастар, уларҙың ботаҡтарында сутылдашҡан ҡоштар, ерҙәге селәүсендәр һәм ҡуңыҙҙар, тик микроскоп аша ғына күренгән йән эйәләре – һәммәһе үҙе хаҡында һөйләйәсәк! Улар тәрән хикмәт йәшеренгән тормоштары хаҡында бәйән итәсәк, үҙҙәренең ғәжәйеп серҙәрен асып һаласаҡ!

Был китап менән бергә һеҙ башҡа донъяларға сәйәхәт итәсәкһегеҙ! Хаҡ Тәғәләбеҙҙең һоҡланып туймаҫлыҡ сәнғәт әҫәрҙәре менән танышасаҡһығыҙ! Китапты уҡып сыҡҡас, һеҙ бөтә барлыҡҡа бөтөнләй икенсе күҙ менән бағасаҡһығыҙ! Ҡояшҡа, һыуға башҡаса ҡарай башлаясаҡһығыҙ. Көн һайын үҙегеҙ атлап йөрөгән ерҙе, һеҙгә күләгә биргән ағастарҙы, һеҙгә шыбыр-шыбыр хәбәр һөйләгән япраҡтарҙы һеҙ икенсе төрлө ҡабул итәсәкһегеҙ. Күкте иңләп осҡан ҡоштарҙа, һыуҙарҙа йөҙгән балыҡтарҙа, үҙ эше менән ашығып китеп барған бөжәктәрҙә Илаһи мөғжизә сағылышын күрәсәкһегеҙ…

**Аллаһтан шуны һорайбыҙ: ҡулына алып уҡыусыларҙы, уйланыусыларҙы гүзәл әхлаҡҡа этәреүгә бер сәбәп булһын был китап! Һәммәбеҙ Аллаһтың Мәрхәмәтенә лайыҡ булып, ғәжәйеп мөғжизәләр һәм матурлыҡтар тулы Йәннәткә инеү хоҡуғын алһын.**

**Ғинуар, 2010**



# Как прекрасно разговаривает с нами земля...



Я – земля, по которой вы привычно ступаете каждый день, на которой строите свои дома, прокладываете дороги. Еще в старину ваши предки называли меня «кормилицей», «матушкой», потому что именно на земле рождается всё живое: растения, животные, человек. И всех она кормит и поит, одевает, согревает теплом, дает пристанище, дарит красоту окружающего мира. Люди складывали обо мне песни, пословицы и поговорки: «Добра мать для своих детей, а земля – для всех людей», «Земля родная – колыбель золотая», «Всякому чело-



веку – и доброму и худому – земля даст приют».

Вот так, каждое существо я прижимаю к себе с добротой и лаской матери, так как прихожусь матерью всем земным созданиям.

Господь на протяжении веков будет продолжать создавать меня, также как Он создает другие Свои творения. Знаете ли вы, что для образования слоя почвы всего в один сантиметр требуется около 50 лет? Вам может показаться, что я, земля, – неживая, но я наполнена миллионами живых существ, потому что почва является средой обитания многих видов бак-

Господь на протяжении веков будет продолжать создавать меня, также как Он создает другие Свои творения.

терий и микроорганизмов. На самом деле, каждый мой кубический сантиметр полон жизни! Благодаря этим бактериям и микроорганизмам перерабатываются опавшие листья, погибшие растения, останки животных, превращаясь в плодородный перегной. На нем всходят и произрастают новые растения, дающие продукты питания для животных и людей.

Какие прекрасные примеры божественных чудес описаны в Коране! И первым чудом, несомненно, является земля. Всевышний Аллах повелевает:

**«Ты видишь безжизненную землю. Но стоит Нам ниспослать на нее воду, как она приходит в движение, набухает и порождает всякие прекрасные растения»** (сура Паломничество, 5).

На мне, земле, которая на первый взгляд может показаться сухой и безжизненной, Все-

вышний Господь взращивает для всех живых существ самую разную, предназначенную именно для них пищу. Представьте, например, овечек, пасущихся на лугу с сочной травой, или шумную стайку птиц, пирующих на полыхающей спелыми гроздьями рябине, или косолапого медведя, лакомящегося малиной, или рыжую белочку, грызущую еловую шишку. А сколько самых разных полезных и вкусных овощей и фруктов получают от земли для своего питания люди! Представьте себе, что на одной земле, которая везде кажется одинаковой, произрастают миллионы видов растений, которыми питаются миллионы живых существ. И при этом не иссякает ни их пропитание, ни сама земля! Насколько же удивительным божественным чудом является земля!

**«Нет на земле ни единого живого существа, которого Аллах не обеспечил бы пропитанием. Аллах знает также их** [земное] **местопребывание и** [конечное] **пристанище. И все это** [записано] **в ясном Писании»** (сура Худ, 6).

Еще в глубокой древности меня, землю, а точнее – глину,



ваши предки использовали для мытья тела, умывания лица и стирки, заметив мои очищающие свойства. Особенно нравилась глина жителям приморских районов, благодаря способности хорошо мылиться в соленой морской воде. Кроме того, я, земля, поглощаю все нечистоты и отходы, попадающие на меня. Я забираю, перерабатываю и очищаю их. Если бы Господь не дал мне такой чудесной способности, то из-за повсеместного засорения отходами и зловония, исходящего от них, невозможно было бы жить на земле.

Я превращаю все, что попадает в меня, в подобие себя и взращиваю на своей поверхно-



Первое, что должен усвоить молодой мусульманин, – это беречь землю Родины, чтобы сохранить свою веру, честь и достоинство.

сти прекрасные растения. По сути, все живое – животные, растения, цветы и даже люди представляют собой разные виды земли.

Человек был сотворен из горсти земли. Тело человека состоит из тех же химических элементов, которые входят в состав земли: кислород, углерод, азот, водород, сера, фосфор, хлор, калий, магний, натрий, кальций, железо и др. Впрочем, все клетки организма человека, животных и растений сходны по химическому составу, так как человек употребляет в пищу овощи и фрукты, которые дает земля, а также мясо животных, которые питаются растениями, произрастающими на моей поверхности.

Одним словом, человек произошел из земли. Человек рождается на земле, питается от земли и, когда истекает срок его жизни, вновь уходит в землю. Человек, пришедший на этот свет в объятия матери, после смерти тоже попадает в объятия матери-земли и сам становится землей.

Миллиарды людей и животных, которые приходили в этот мир на протяжении всех времен, начиная с первого человека и первого пророка – Адама (мир ему), стали землей, которая под вашими ногами. Сегодня вы ходите по мне. Но настанет день, когда ваши души покинут ваши тела, и они будут преданы земле. Но души будут жить вечно. Я буду хранить ваши тела до Судного дня и стану вторым местом вашего пребы-

вания после земной жизни. Я буду нежно держать вас в своих объятиях, пока ангел Исрафил (мир ему) не вострубит в свой Рог, возвещая о начале Судного дня. Вы воскреснете и выйдете из земли, и это будет началом вечной жизни.

А вот такой совет давал великий праведник Мавляна Джалалетдин Руми: *«Будьте скромны, подобно земле!»* Понимая истинную ценность земли, он говорил: *«Все сущее ходит по земле и питается от земли. Свои отбросы и бренные тела оставляет на земле. Несмотря на то, что земля всегда под ногами, и на нее бросают все нечистое, она без устали, не обращая ни на что внимания, скромно продолжает выполнять свою работу»*.

Вы, конечно, желаете стать прекрасными рабами Аллаха, поэтому каждый день, совершая свой путь по мне, наблюдайте и извлекайте уроки. Как цветы, благоухающие чарующими ароматами, ваши души должны источать тонкость и трепетность, а ваша прекрасная нравственность должна нести людям радость и покой. Ведь то, что по мне ступают люди, любящие



Аллаха и Его Посланника (мир ему и благословение) – великая честь для меня.

Также не следует забывать, что Родина – это ваша родная земля. На этом куске земли хранится вера, честь, достоинство и нравственные ценности народа. Поэтому земля Родины священна. Первое, что должен усвоить молодой мусульманин, – это беречь землю Родины, чтобы сохранить свою веру, честь и достоинство.

## Ер беҙҙең менән ни ҡәҙәр гүзәл һөйләшә…



Мин – һеҙ көн һайын атлап йөрөгән, шунда йорттарығыҙҙы төҙөгән, юлдар һалған ер. Бик борон замандарҙа уҡ халыҡ ерҙе тере йән эйәһе итеп күргән, уны ҡәҙерләгән, һаҡлаған, яҡлаған, сөнки ул бөтә йән эйәләренең: үҫемлектәрҙең, хайуандарҙың, кешенең атайсалы, төйәге. Һәммәһен мин, Аллаһ ярҙамында, кейендерәм, ашатам-эсерәм, йылы төйәк менән тәьмин итәм, гүзәл мөхит бүләк итәм. Кешеләр минең хаҡта йырҙар, мәҡәл, әйтемдәр уйлап сығарған: «Ерҙән айырылған елгә оса», «Ерен һөйгән – көн

Раббым, башҡаларҙы бар ҡылған кеүек, быуаттар буйы мине лә төҙөкләндереүҙе дау-ам итәсәк.



күргән», «Ерһеҙ кеше – илһеҙ кеше», «Ере байҙың иле бай».

Мин һәр йән эйәһен үҙ ҡосағыма алам, сөнки мин – Ер-Әсә – ерҙәге бөтә барлыҡтың Әсәһе.

Раббым, башҡаларҙы бар ҡылған кеүек, быуаттар буйы мине лә төҙөкләндереүҙе дауам итәсәк. Бер сантиметр ҡалынлығындағы тупраҡ барлыҡҡа килһен өсөн, 50 йыл талап ителеүен беләһегеҙме икән? Бәлки, мине йәнһеҙ тип уйлайһығыҙҙыр, әммә миндә миллиондарса йән эйәһе көн күрә, сөнки тупраҡ - төрлө бактерия һәм микроорганизмдарҙың йәнтөйәге. Минең һәр куб сантиметрымда тормош ҡайнай! Шул бактерия һәм микроорганизмдар ярҙамында ҡойолған япраҡтар, һәләк булған үҫемлектәр, хайуандарҙың ҡалдыҡтары, эшкәртелеп, уңдырышлы серемтә барлыҡҡа килә. Унда хайуандарға һәм кешеләргә ризыҡ булырҙай яңы үҫемлектәр үҫә.

Ҡарьяндә Илаһи мөғжизәләр һүрәтләнгән гүзәл миҫалдар бар! Һис шикһеҙ, тәүге мөғжизә – ер. Һәммәһе лә Аллаһтың әмере менән хәрәкәткә килә:

**«...Һин коп-коро (үлейәнһеҙ) ер йөҙөнә ҡарап тораһың, әммә Беҙ өҫтөнә ямғыр яуҙырғас, ул терелә, бүртә башлай һәм төрлө (токомдан булған) үҫемлектәр үҫтерә»** (Хаж, 5).

Миндә, тәү ҡарамаҡҡа ҡоро һәм йәнһеҙ булып күренгән ерҙә, Аллаһу Сүбхәнәһү үә Тәғәлә төрлө йән эйәләренә



ярак҃лы үҫемлектәр үҫтерә. Һутлы үләндәрҙе утлап йөрөгән хайуандарҙы, баҙрап торған миләштәр менән һыйланған ҡоштарҙы, кинәнеп ҡурай еләге ашаған тайыш табан айыуҙы йәки ыршы тубырсығын бик оҫта кимергән ерән тейенде күҙ алдыңа килтер әле. Ә кешеләр ерҙә үҫкән күпме файҙалы һәм тәмле емеш-еләк, йәшелсә менән туҡлана! Бөтә урында ла бер төрлө һымаҡ күренгән ерҙә миллиондарса йән эйәһе ризыҡланған үҫемлектәрҙең миллиондарса төрө үҫә, һәм ер ҙә, уларҙың ризығы ла бөтмәй! Шулай булғас ерҙе нисек Илаһи мөғжизә тип әйтмәйһең инде!

**«Ер йөҙөндә йәшәүсе һәр йән эйәһенең ризығы бары тик Аллаһ ихтыярында. Аллаһ ул йән эйәләренең торған урынын да, һуңынан ҡайҙа урынлаштыраласағын да белә. Быларҙың барыһы тураһында ла Китапта ап-асыҡ яҙылған»** (Һуд, 6).

Боронғо замандарҙа уҡ ерҙең, дөрөҫөрәге балсыҡтың, таҙарта алыу сифатын күреп, ата-бабаларығыҙ мине бит-кулын, тәнен йыуыу, кер йыуыу өсөн файҙаланды. Диңгеҙ буйҙарында йәшәүсе халыҡ мине айырыуса яратып ҡулланды, сөнки тоҙло диңгеҙ һыуында мин күпереп китәм. Бынан тыш үҙемә элеккән бөтә ҡалдыҡ-боҫтоҡто ла эшкәртергә һәләтлемен, барса бысраҡты үҙемә алып, тирә-йүнде сафландыра алам. Раббым миңә шундай мөғжизәле һәләт бирмәгән булһа, тирә-йүн һаҫыҡ ҡалдыҡ-боҫтоҡ менән тулыр, Ерҙә йәшәү мөмкин булмаҫ ине.

Үҙемә эләккән һәр нәмәне мин үҙем һымаҡ ергә әйләндерәм һәм өҫтөмдә гүзәл үҫемлектәр үҫтерәм. Асылда, хайуандар, үҫемлектәр, сәскәләр һәм хатта кешеләр ҙә ерҙең бер төрө.

Әҙәм ерҙән барлыҡҡа килгән. Уның тәне кислород, угле-

Йәш мосолман бер нимәне күңеленә һеңдерергә тейеш: Ватаныңдың ерен һаҡлау – иманыңды, намыҫыңды, абруйыңды һаҡлау ул.



род, азот, водород, көкөрт, фосфор, хлор, калий, магний, натрий, кальций, тимер кеүек ер составына ла ингән бер үк химик элементтарҙан тора. Әйтергә кәрәк, кешенең, хайуандарҙың һәм үҫемлектәрҙең бөтә күҙәнәктәре химик составы буйынса оҡшаш, сөнки кешенең ризығы - ер үҫтергән йәшелсәләр, емеш-еләк, миндә үҫкән үләндәр менән туҡланған хайуандарҙың ите.

Бер һүҙ менән әйткәндә, кеше ерҙән барлыҡҡа килгән, ул ерҙә тыуа, ер ризыҡтары менән ниғмәтләнә, ғүмере бөткәс, йәнә ергә китә. Яҡты донъяға килеп, Ер-Әсә ҡосағына эләккән әҙәм, бәхетлелеккә ынтылып ҡына, Ер-Әсә ҡосағына әләгә һәм үҙе лә ергә әйләнә.

Тәүге кеше һәм пәйғәмбәр Әҙәмдән (ғәләйһис-сәләм) алып, ергә килеп-китеп торған миллиардтарса кешеләр һәм хайуандар һеҙҙең аяҡ аҫтығыҙҙағы ергә әйләнгән. Һеҙ бөгөн минең өҫтә йөрөйһөгөҙ, ләкин шундай мәл дә етер: йәнегеҙ тәнен ташлап китер, тәнегеҙ минең ҡуйыныма инеп ятыр, йәндәрегеҙ генә мәңге йәшәр. Мин тәндәрегеҙҙе Ҡиәмәткә ҡәҙәр һаҡлармын, Ер өҫтөндәге тормоштан һуң, һеҙ миндә төйәк табырһығыҙ. Исрафил фәрештә (ғәләйһис-сәләм), Ҡиәмәт етеүен белдереп сурға өргәнгә ҡәҙәр, һеҙ минең ҡосағымда булырһығыҙ. Аҙаҡ һеҙ, терелеп, ерҙән сығырһығыҙ – был һеҙҙең мәңгелек тормошоғоҙҙоң башы булыр.



Бөйөк салих зат Мәүләнә Йәләлетдин Руми шундай кәңәш биргән:

*«Ер һымак, баçалкы булығыз!»* Минең хәҡиҡи ҡиммәтемде якшы аңлап, ул йәнә былай тигән: *«Бөтә барлык ерзә йөрөй һәм ерзән туклана. Вакытлы булған тәнен һәм калдыктарын ерзә калдыра. Ер һәр вакыт аяк аçтында булһа ла, уға бөтә бысракты ташлаһалар за, ул, быға иғтибар итмәйенсә, баçалкы рәүештә арымай-талмай үз эшен дауам итә».*

Һез, әлбиттә, Аллаһтың гүзәл ҡолдары булырға теләйһегез, шуға күрә көн һайын, өçтөмдә йөрөгәндә, күзәтеүсән булығыз һәм һабаҡ алығыз. Хуш еçтәре менән арбаған сәскәләр һымаҡ, әхүәле рухиәгез тирә-йүнде йәмләһен, нәзәкәтлек өçтәһен, ә гүзәл әхлағығыз кешеләргә шатлыҡ һәм тыныслыҡ бүләк итһен. Аллаһты һәм Уның Илсеһен (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) яратҡан кешеләрзең өçтөмдә йөрөүе – минең өсөн бөйөк мәртәбә.

Шуны ла иçтән сығармау лазым: Ватанығыз – һеззең тыуған ерегез. Ерзең ошо киçәгендә халҡығыззың иманы, намыçы, бәçе һәм әхлаҡи ҡиммәттәре һаҡлана, шуға күрә Ватанығыз ере – изге ер. Йәш мосолман бер нимәне күңеленә һеңдерергә тейеш: Ватаныңдың ерен һаҡлау – иманыңды, намыçыңды, абруйыңды һаҡлау ул.

## Как прекрасно разговаривает с нами атмосфера…



Я – воздушная оболочка Земли или, как меня называют, – «атмосфера» (от греческих слов «атмос» – пар и «сфера» – шар). Я окутываю Землю, словно одеялом, и сохраняю солнечное тепло. Я необходима всем живым организмам: животным и людям – для дыхания, а растениям – для питания. К тому же, я защищаю Землю от губительного ультрафиолетового излучения Солнца.

А знаете ли вы, что в раскаленном воздухе пустыни, и в чистом воздухе лесов, и в све-

жем воздухе морского прибоя, и даже в воздухе внутри квартиры неизменно будет содержаться 21% кислорода, 78% азота и 1% других газов? И это – один из безграничного множества прекрасных даров Создателя Своим рабам, являющимся гостями на этой земле, чтобы они чувствовали себя комфортно и безопасно.

Образующиеся во мне теплые ветры собирают испарившиеся с водных поверхностей капельки воды и поднимают их вверх, собирая в облака. От теплых весенних дождей, пролившихся из этих облаков, все оживает и зеленеет. А от холодных осенних дождей все желтеет и погибает. И весной, и осенью с небес нисходит вода. Но одна вода «живая», а другая – «мертвая». Это чудо, происходящее в атмосфере и нисходящее с небес по велению Милостивого Бога.

Я наполняю воздухом паруса и перемещаю суда по морю. Я вращаю крылья ветряных мельниц и электростанций. Я разношу по всей округе ароматное благоухание прекрасных цветов. Я удерживаю в полете птиц. Когда воздух обтекает передний край и верхнюю выпуклую поверхности крыла птицы, над ним образуется область пониженного давления. Благодаря возникающей разнице давлений сверху и снизу крыла птицы, создается подъемная сила ее крыла. **«Неужели они не видят, как птицы над ними простирают и складывают крылья? Никто не поддерживает их** [в воздухе]**, кроме Милостивого»** (сура Власть, 19).

Высота полёта птицы зависит от ее размера, особенностей строения, формы крыльев и среды её обитания. Например, особенности строения воробья не позволяют ему взлетать на большую высоту. И, наоборот, орлы созданы так, что могут парить над высокими горными вершинами. Всемогущий Господь создал их приспособленными для обитания на определенной высоте, а воздушную среду сделал удобной и естественной для них. Какое это удивительное чудо божественного творения!

Также я открываю в себе надежные воздушные пути для самолетов. С высотой плотность воздуха падает, и в верхних слоях «тропосферы», то есть на высоте 8-10 тысяч метров, она в

И в раскаленном воздухе пустыни, и в чистом воздухе лесов, и в свежем воздухе морского прибоя, и даже в воздухе внутри квартиры неизменно будет содержаться 21% кислорода, 78% азота и 1% других газов.



2,5 раза меньше, чем у поверхности земли. Поэтому воздушные суда, совершая свои полеты на этой высоте, преодолевают гораздо меньшее сопротивление воздуха, что позволяет увеличить скорость полета, избежать нагревания корпуса от действия сил трения и снизить расход топлива.

В современных самолетах во время полета на высоте 11-12 тысяч метров давление в салоне эквивалентно атмосферному давлению на высоте 1800-2400 м над уровнем моря. При снижении атмосферного давления содержание кислорода в салоне самолета снижается. Те, кто путешествует самолетами, хорошо знают, что в случае разгерметизации кабины из панели над пассажирскими креслами должны автоматически выбрасываться кислородные маски.

При нахождении на значительных высотах без специальной кислородно-дыхательной аппаратуры, начиная с отметки 4000 м, человек испытывает нехватку кислорода (гипоксию), которая выражается в учащении дыхания, удушье, болях и чувстве сжатия за грудиной. На высоте от 6000 м эти ощущения многократно усиливаются и могут закончиться смертельным исходом. Обратите внимание, как Коран, ниспосланный 1400 лет назад, когда не было не только самолетов, но даже элементарных моторных транспортных средств, указывает на



эту истину: **«Кого Аллах желает наставить на прямой путь, тому Он раскрывает грудь для Ислама, а кого Он желает ввести в заблуждение, тому Он сдавливает и сжимает грудь, словно тот забирается на небо. Так Аллах насылает скверну (или наказание) на тех, кто не верует»** (сура Скот, 125).

**Это и есть чудо Корана…**

Повелевая «Читай!», Господь желает, чтобы вы размышляли о Его величии и могуществе.

Он сотворил меня – атмосферу – только над нашей планетой, и никакая другая планета не имеет подобной воздушной оболочки. Чтобы удержать меня, одной силы земного притяжения недостаточно, и я должна была бы, оторвавшись от Земли, раствориться в бесконечном космическом пространстве. Но Всевышний Господь Своим безграничным могуществом сохраняет воздушную оболочку Земли.

Во мне есть множество чудес, которые вызывают удивление и восторг у тех, кто видит и размышляет о них. Вы знаете, что окружность Земли составляет 40 000 км, и за 24 часа Земля совершает полный оборот вокруг своей оси, таким образом, день и ночь сменяют друг друга. Разделив 40 000 км на 24 часа, мы получим, что наша планета вращается со скоростью 1666,7 км/час, то есть, со скоростью, превышающей скорость пассажирского самолета в 2 раза! Ваше положение, по сути, сходно с состоянием муравьев, взобравшихся на лопасть вентилятора. Представьте, что произойдет, если вентилятор начнет вращаться со скоростью, в два раза превышающей скорость самолета? Конечно, муравьев сдует в одно мгновение! Но тогда, каким образом вы на этой стремительно вращающейся планете спокойно ходите, общаетесь, зани-

маетесь повседневными делами, и при этом вас не сдувает? Задумывались ли вы об этом? А объясняется это тем, что я вращаюсь вместе с Землей, как единое целое и, создавая над вами прозрачный купол, оберегаю вас. Поэтому вас не сдувает, словно муравьев с лопасти вентилятора.

Все люди, даже атеисты и заблудшие, не осознавая и не отдавая себе отчета, верят и уповают на волю Всевышнего Господа. Выходя утром из дома, никто из них не беспокоится: «А вдруг сегодня уменьшиться или вовсе исчезнет кислород?», и никто, охваченный тревогой, не берет с собой кислородные баллоны. Даже атеисты подсознательно верят в существование Бога и в Его Прекрасные качества (сыфаты). Но, так как из-за упрямства и невежества их сердца покрыты пеленой беспечности, они не видят эту истину.

Поэтому Господь Бог желает, чтобы ваше размышление было глубоким, а восприятие – чутким. Он характеризует Своих любимых рабов так: **«…и размышляют о сотворении небес**



**и земли»** (сура Семейство Имрана, 191).

По сути, каждое мое (атмосферы) состояние представляет для вас удивительный факт, из которого можно извлечь урок и назидание. Например, солнечный луч проходит огромное расстояние в 150 млн. км от Солнца до Земли со скоростью 300 000 км/сек и достигает земной поверхности примерно за 8 минут. Солнечные лучи идут к земной поверхности в кромешной тьме. А приходила ли вам в голову мысль: «Почему космос погружен в темноту, в то время, как там находится Солнце?» Ответ прост: космос выглядит как черная бездна, даже если ярко светит Солнце,



так как является безвоздушным пространством. Когда же солнечный луч входит в атмосферу Земли, он отражается молекулами воздуха, как миллиардами миллиардов маленьких зеркал. Это можно сравнить с включением светильника. Лучи идут из космоса, словно по кабелю, а в момент, когда они входят в атмосферу, будто бы включается божественная кнопка, и мир наполняется светом.

А Луна, освещающая путь ночным путникам, на самом деле тоже погружена в темноту. Но свет ей дает Солнце. Когда оно уходит за горизонт, его лучи, отраженные от поверхности Луны, пронизав темноту, достигают атмосферы. И становятся чудесным лунным светом, которым невозможно налюбоваться.

Я, атмосфера, выполняя обязанности, возложенные на меня моим Создателем, служу вам, обеспечивая ваше дыхание. И вы, изучая меня, извлекайте уроки, оказывайте помощь бедным и нуждающимся людям, и будьте для них свежим дуновением ветра.

Я несу свет в ваш мир днем и ночью. И вы своим прекрасным нравом, знаниями будьте светом для вашей религии, Родины и народа.

Я приношу в облаках чистую, прозрачную, живительную и вкусную дождевую воду, которую вы пьете и используете для своих нужд. И вы, подобно мне, всегда дарите добро всему сущему своими действиями, словами и сердцем.

## Атмосфера беҙҙең менән ни ҡәҙәр гүзәл һөйләшә



Мин – Ерҙең һауа тышлығы, йәғни мине «атмосфера» (грекса «атмос» – пар һәм «сфера» – шар) тип атап йөрөтәләр. Мин Ерҙе юрған һымаҡ урап алам һәм ҡояш йылыһын һаҡлап торам. Бөтә тере йән эйәһенә лә бик кәрәк мин: хайуандарға һәм кешеләргә - тын алыу, әүҫемлектәргә – туҡланыу өсөн. Өҫтәүенә мин ерҙе Ҡояштың зарарлы ультрафиолет нурҙарынан һаҡлайым.

Ә һеҙ шуны беләһегеҙме икән: ҡыҙған сүллектәрҙең һауаһында ла, рәхәтлек биргән

урман, диңгеҙ буйҙарының саф һауаһында ла, хатта фатир эсендәге һауала ла 21% кислород, 78% азот һәм 1% башҡа газдар бар?! Донъялыҡта ҡунаҡ ҡына булған ҡолдары үҙҙәрен уңайлы һәм имен итеп тойһон өсөн, Аллаһу Тәғәлә бүләк итеп биргән сикһеҙ ниғмәттәренең береһе генә был.

Миндә барлыҡҡа килгән йылы елдәр һыуҙар өҫтөндә парға әйләнгән тамсыларҙы күккә күтәрә, болоттар итеп йыя. Ошо болоттарҙан яуған йылы яҙғы ямғырҙарҙан үҫемлектәр йәнләнә, йәшәрә, ә һалҡын көҙгө ямғырҙарҙан һарғая, һәлəк була. Яҙ ҙа, көҙ ҙә күктән һыу төшә, әммә һыуҙарҙың береһе - «тере», ә икенсеһе – «үле». Атмосфералағы был хәлдәр – Аллаһтың бөйөк мөғжизәһе.

Елкәндәренә һауа тултырып, мин караптарҙы диңгеҙҙәрҙә йөрөтәм. Ел тирмәндәре, электр станциялары ла минең ярҙамға мохтаж. Сәскәләрҙең хуш еҫен тирә-йүнгә таратам. Ҡоштарҙы ла күктә тотоп торам. Һауаны ярып осҡанда, ҡоштар ҡанатының өҫкө өлөшө ҡабарып тора, ҡанат аҫтында баҫым түбәнәйә. Өҫтәге һәм аҫтағы баҫым айырымлығы арҡаһында, ҡанаттар күккә күтәрелеү һәләтенә эйә була. **«Күктә, баш остарында ҡанат ҡаға-ҡаға оса торған ҡоштарҙы улар күрмәйме ни һуң? Уларҙы миһырбанлы Аллаһтан башҡа бер кем дә һауала тота алмай»** (Мүлк (Хакимиәт), 19).

Ҡоштоң ниндәй бейеклеккә күтәрелеүе уның ҙурлығына, төҙөлөшөнә, ҡанаттарының формаһына һәм йәшәү мөхитенә бәйләнгән. Мәҫәлән, турғай төҙөлөшөнөң үҙенсәлектәре уға бик бейеккә күтәрелергә мөмкинлек бирмәй, һәм, киреһенсә, бөркөттөң төҙөлөшө уға бейек-бейек тау түбәләренә күтәрелергә мөмкинлек бирә. Аллаһу Тәғәлә уларҙы билдәле бейеклектә йәшәүгә яраҡлы, һауа мөхитен улар өсөн уңайлы итеп яралтҡан. Иҫ китмес мөғжизәле Илаһи ижад емеше улар!

Самолеттар өсөн ышаныслы һауа юлдары ла булдырам мин. Юғарыраҡ күтәрелгән һайын, һауа тығыҙлығы кәмей, һәм «тропосфераның» өҫкө ҡатламында, йәғни 8-10 мең метр бейеклектә, ул ер өҫтөндәгегә ҡарағанда 2,5 тапҡыр кәмерәк. Бындай бейеклектә осҡан һауа караптары һауа ҡаршылығына әҙерәк дусар була, был иһә

Ҡыҙған сүллектәрҙең һауаһында ла, рәхәтлек биргән урман, диңгеҙ буйҙарының саф һауаһында ла, хатта фатир эсендәге һауала ла 21% кислород, 78% азот һәм 1% башҡа газдар бар.

тиҙлекте арттырырға мөмкинлек бирә, ышҡылыу көсө кәм булғас, корпус та кәмерәк йылына, яғыулыҡ та әҙерәк сарыф ителә.

Хәҙерге заман самолеттарында 11-12 мең километр бейеклектәге осош ваҡытында салондағы баҫым диңгеҙ кимәленән 1800-2400 метр бейеклектәге атмосфера баҫымына тиң. Атмосфера баҫымы түбәнәйһә, самолет салонындағы кислород миҡдары ла кәмей. Самолет менән сәйәхәт итеүселәр бер нәмәне яҡшы белә: әгәр кабинаның көпләнеүе боҙолһа, пассажирҙар креслоһы өҫтөндәге панелдән автоматик рәүештә кислород битлектәре килеп төшә.

4000 метрҙан юғарыраҡ күтәрелгән осраҡта, махсус кислородлы тын алыу аппаратураһынан башҡа гипоксия башлана: һауа етмәй, кеше йыш-йыш тын ала, күкрәк эсендә ауыртыу



һиҙелә. 6000 метрҙан юғарыраҡ күтәрелгәндә, был симптомдар үҙен тағы ла нығыраҡ һиҙҙереп, үлемгә алып килеүе лә ихтимал. 1400 йыл элек, самолеттар, хатта ябай ғына моторлы транспорт саралары ла булмаған ваҡытта төшөрөлгән Ҡөрьәндә был хәҡиҡәт асып һалына: **«Тура юлға күндерергә teләһә, Аллаһ ул кешенең күкрәген Ислам өсөн киң ҡыла; юлдан яҙҙырырға теләһә, уның күкрәген тап-тар итер; (ул кеше) Күккә оҫкандағы кеүек, (сыҙай алмайынса) интегер. Аллаһ иман килтермәгәндәр**



**өҫтөнә ана шулай нәжеслек яҙаһы индерер»** (Әнғәм, 125).

**Былар - Ҡөрьән мөғжизәһе...**

«Уҡы!» тигән әмере менән Раббыбыҙ Үҙенең Бөйөклөгө һәм Ҡеүәте хаҡында уйланыуыбыҙҙы теләй.

Ул мине – атмосфераны – беҙҙең планета өҫтөндә генә барлыҡҡа килтергән, башҡа бер планетаның да ундай һауа ҡабырсағы юҡ. Мине үҙендә тотоп тороу өсөн, Ерҙең тартыу көсө генә аҙ, мин, Ерҙән айырылып, сикһеҙ йыһан киңлегендә юҡҡа сығырға тейеш инем, әммә Аллаһу Сүбхәнәһү үә Тәғәлә Үҙенең сикһеҙ Ҡеүәте менән ерҙең һауа тышсаһын һаҡлап тора.

Фекер йөрөтә, күрә белгәндәрҙә һоҡланыу тыуҙырған бик күп мөғжизәләр бар миндә. Һеҙ беләһегеҙ: Ерҙең әйләнәһе 40 000 км, һәм 24 сәғәт эсендә Ер үҙ күсәрендә бер әйләнеш яһай, шул рәүешле көн һәм төн бер-береһен алмаштыра. 40 000 километрҙы 24 сәғәткә бүлеп, планетабыҙҙың тиҙлеге сәғәтенә 1666,7 км икәнен асыҡлайбыҙ - пассажир самолеты тиҙлегенән ике тапҡыр күберәк был! Асылда, һеҙҙең хәлегеҙ вентилятор ҡалағына менеп ултырған ҡырмыҫҡа хәленә оҡшаш. Күҙ алдына килтерегеҙ әле, әгәр вентилятор самолет тиҙлегенән ике тапҡыр шәберәк әйләнә башлаһа, нимә булыр? Әлбиттә, күҙ асып йомғансы ҡырмыҫҡанан елдәр иҫер! Тик улайһа шул ҡәҙәр шәп әйләнгән планетала һеҙ нисек тыныс ҡына йөрөйһөгөҙ, аралашаһығыҙ, көндәлек эштәрегеҙ менән мәшғүлһегеҙ, ә ел һеҙҙе бер ҙә осортоп алып китмәй? Был турала уйланғанығыҙ юҡмы? Ә эш былай тора: мин бер бөтөн булып Ер менән бергә әйләнәм, һәм, өҫтөгөҙҙәге үтә күренмәле көмбәҙ кеүек, һәммәгеҙҙе һаҡлап торам, шуға күрә лә һеҙҙе вентилятор

ҡалағындағы ҡырмыҫҡа шикелле осортоп алып китмәй.

Барса кеше, хатта дәһриҙәр һәм аҙашҡандар ҙа, үҙҙәре лә аңламайынса, Аллаһҡа өмөт бағлай. «Кислород кәмеп йәки бөтөнләй юҡҡа сығып ҡуймаҫмы?» тип, берәү ҙә иртән өйҙән сыҡҡанда борсолмай һәм үҙе менән кислород баллоны алмай. Хатта динһеҙҙәр ҙә күңеле менән Аллаһтың барлығына һәм Уның Гүзәл сифаттарына ышана, тик кирелектәре һәм наҙанлыҡтары арҡаһында, йөрәктәре ғәмһеҙлек турһығына ябылғанлыҡтан, хәҡиҡәтте улар күрмәй.

Бына ни өсөн Аллаһ һеҙҙең тәрән фекер йөрөтөүегеҙҙе һәм аңлауығыҙҙы теләй. Ул Үҙенең яратҡан ҡолдарын шулай тасуирлай: **«...Күктәрҙең һәм Ерҙең яратылышы хаҡында тәрән фекерләйҙәр...»** (Әлү Ғимран, 191).

Асылда, минең һәр бер халәтем - һабаҡ һәм нәсихәт биреүсе ғәжәйеп күренеш. Мәҫәлән, ҡояш нуры, 150 млн. км арауыҡты 300 000 км/сек тиҙлек менән үтеп, Ер өҫтөнә 8 минутта килеп етә. Ҡояш нурҙары Ергә ҡараңғылыҡты ярып килә. «Ҡояш була тороп, ни өсөн йыһан ҡараңғылыҡ эсен-



дә?» тигән уй башығыҙға килгәне юҡмы? Яуабы ябай ғына: Ҡояш яҡтыртып торһа ла, йыһан төпһөҙ ҡара упҡын кеүек, сөнки ул - икһеҙ-сикһеҙ һауаһыҙ киңлек. Ҡояш нуры, Ер атмосфераһына үтеп ингәс, миллиардлаған бәләкәй көҙгөләгә һымаҡ, һауа молекулаларында сағыла. Уны лампаны ҡабыҙыу менән сағыштырырға ла мөмкин. Нурҙар, кабель буйынса килгәндәй, йыһандан ағыла, ә атмосфераға ингән мәлдә, әйтерһең дә, Илаһи кнопка ярҙамында донъя яҡтылыҡҡа күмелә.

Төнгө юлаусыларҙың юлын яҡтыртҡан Ай ҙа бит ҡараңғылыҡ эсендә, Ҡояш уға яҡтылыҡ бирә. Ул офоҡ артына киткәс,



Ай өҫтөндә сағылған нурҙары, ҡараңғылыҡты ярып, атмосфераға килеп етә һәм һоҡланып туймаҫлыҡ ай нурына әүерелә.

Мин, атмосфера, Аллаһу Сүбхәнәһү үә Тәғәлә йөкмәткән бурысты үтәп, һеҙгә тын алыу мөмкинлеген бирәм. Һеҙ ҙә, мине өйрәнеп, һабаҡ алығыҙ, меҫкендәргә, мохтаждарға ярҙам итегеҙ, улар өсөн сафлыҡ бөркөүсе ел кеүек булығыҙ.

Көнө-төнөн мин донъяғыҙға яҡтылыҡ алып киләм. Һеҙ ҙә гүзәл холҡоғоҙ, ғилемегеҙ менән динегеҙ, Ватанығыҙ һәм халҡығыҙ өсөн яҡтылыҡ булығыҙ.

Мин болоттар менән таҙа, саф, көс биреүсе тәмле ямғыр һыуҙарын алып киләм, һеҙ уны эсәһегеҙ һәм хәжәттәрегеҙгә тотонаһығыҙ. Минең кеүек, һеҙ ҙә ғәмәлдәрегеҙ, һүҙҙәрегеҙ һәм йөрәгегеҙ менән бөтә барлыҡҡа игелек таратығыҙ.

## Как прекрасно разговаривает с нами вода…



Я – маленькая капля воды. Со времен сотворения первого человека и пророка Адама (мир ему) со мной произошло столько приключений, что если начать описывать их, то не хватит и многих томов книг. За эти многие десятки тысяч лет мои путешествия приводили меня и в огромный соленый океан, и в протянувшиеся на тысячи километров в своем течении реки. Я попадала внутрь тела человека, утоляющего жажду, а потом выходила капелькой пота на его лице. Множество миллионов раз Солнце превращало меня в пар, я поднималась в небеса, а затем вновь проливалась на землю капелькой дождя.

Господь Бог сотворил меня, чтобы я служила всем созданиям. Вода является источником



жизни на земле – ни одна клетка живого организма не может без нее существовать. А значит, не может существовать без воды и сам организм. Тело человека на 65-80% состоит из воды. Как вы думаете, сколько времени он может прожить без пищи, а сколько – без воды?

Вода является средой обитания для огромного числа самых различных живых организмов – от простейших инфузорий до огромных китов. Благодаря воде происходит набухание и прорастание семян, перенос полезных веществ из почвы в растения, благодаря чему они развиваются, растут и приносят разнообразные плоды для пользы людей и животных. «[Поклоняйтесь Господу], **...который низвел с неба воду дождей и взрастил на земле плоды для вашего пропитания»** (сура Корова, 22).

Создатель вложил в воду столько превосходных свойств, что сделал ее незаменимой для жизни на земле.

Из школьной программы вы знаете, что молекула воды ($H_2O$) состоит из двух элементов – водорода и кислорода. Подумайте над божественным чудом творения воды! Если водород и кислород соединились бы каким-то другим способом или в другом соотношении, то не было бы ни воды, ни жизни на земле. Если к молекуле воды присоединить еще 1 атом кислорода, то образуется перекись водорода ($H_2O_2$), концентрированные растворы которой опасны для человека, так как могут вызвать ожог кожи и слизистых оболочек. Газообразная смесь кислорода с водородом образует гремучий газ. Если поджечь его, произойдет сильный взрыв, так как водород будет гореть в кислороде. Но Всемогущий Господь соединил эти два противоположных по свойствам

элемента, даровав вам воду, и сделал ее прохладной и вкусной. Задумывались ли вы, сколько благ Господь Бог ниспосылает вам посредством воды?

Вода, несущаяся в потоке быстрой реки, наталкиваясь на камни и рассыпаясь тысячами сверкающих брызг, всегда питала вдохновение поэтов. Один поэт сказал: *«Я – вода, в своем течении преодолевающая удары о камень за камнем, чтобы достичь благословенной пыли твоих ног»*. Так он выразил свою любовь к Посланнику Аллаха (мир ему и благословение). В бурном течении реки поэт увидел ее стремление добежать до нашего Пророка и ласково прильнуть к его благословенным ногам. А вы любите Пророка? Вы желаете увидеться с ним? Я и миллиарды других созданий во вселенной знаем его, любим и скучаем по нему!

И вы, наблюдая за течением реки, так же, как тот поэт, постарайтесь почувствовать в ее бурном или, наоборот, плавном движении неудержимое желание попасть на родину Пророка (мир ему и благословение).

Я хочу рассказать вам о дожде, являющемся одним из



чудес Всевышнего. Под лучами солнца происходит процесс испарения воды отовсюду, где она есть, – с луж, рек, озер, морей, океанов и т. д. Великий праведник Мавляна Джалалетдин Руми так рассказывает о состояниях воды: *«Вода питает всех, но когда теряет чистоту и прозрачность, также как и мы, теряет покой. Она обращает свой крик о помощи Создателю: «О Всевышний Аллах! Все, что Ты даровал мне, я раздала и отдала, сама оставшись в нужде...» Вняв ее стенаниям, Всевышний Аллах повелевает: «Пусть солнце превратит ее в пар и поднимет в небо, а ты, облако, перенеси ее с этого гряз-*



*ного места в чистое…»* Господь Бог в виде пара забирает ее на небеса, различными путями очищает и ниспосылает обратно в виде дождя, несущего очищение, благо и изобилие. Взгляните на меня и очистите себя от дурных помыслов и качеств. Станьте, подобно дождю, милостью для всего сущего!

Задумывались ли вы, почему дождевые капли замедляют свой ход, приближаясь к земле? Почему дождь не льется на землю сплошным потоком, а каждая капля падает по отдельности? Почему дождевые капли не травмируют людей и других обитателей земли? Ведь под действием силы земного притяжения дождевые капли должны падать с тысячеметровой высоты с огромной скоростью, пробивая все на своем пути, подобно свинцовой дробинке. Но Кто низводит дождевые капли с таким милосердием? Кто проявляет такую доброту и заботу о людях и других живых существах?

Как и у вас, у меня в жизни есть радостные и печальные моменты. Больше всего мне приносит огорчение, когда меня используют для изготовления опьяняющих напитков, которые являются скверной, запрещенной Всевышним Аллахом. Но есть и моменты наивысшего счастья для меня: когда я становлюсь капелькой воды чудесного источника Зам-зам, по воле Аллаха, бьющего среди пустыни и не иссякающего многие века. От которого жаждущий – утолит жажду, голодный – насытится, больной – исцелится.

Размышляйте над таким благом Аллаха, каким является вода! У меня к вам есть небольшая просьба: когда вы пьете воду, то начинайте со слов: «Бисмиллях», а заканчивайте словами: «Альхамдулиллях!»

# Һыу беҙҙең менән ни
# ҡәҙәр гүзәл һөйләшә...



Мин – кескәй генә һыу тамсыһы. Тәүге кеше һәм пәйғәмбәр Әҙәм (ғәләйһис-сәләм) бар ҡылынғандан алып минең менән шул ҡәҙәр күп мажаралар булды, тасуирлай башлаһаң, улар бихисап томдарға ла һыйып бөтмәҫ ине. Ошо тиҫтәләрсә мең йыллыҡ сәйәхәтем мине ғәләмәт ҙур тоҙло океанға ла, меңдәрсә километрға һуҙылған йылғаларға ла алып килде. Мин сарсап һыу эскән кешенең эсенә лә индем, унан тир менән ағып яңынан тышҡа сыҡтым. Миллиондарса тапҡыр Ҡояш мине парға әйләндерҙе, мин күктәргә аштым һәм йәнә ямғыр булып ергә яуҙым.

Аллаһу Тәғәлә мине кешеләргә хеҙмәт итеү өсөн бар ҡылған. Һыу – йәшәү сығанағы, тере организмдың бер генә күҙәнәге



лә, тимәк бөтә организм үҙе лә минһеҙ тора алмай. Әҙәм тәненең 65-80 проценты һыуҙан тора. Нисек уйлайһығыҙ, ризыҡһыҙ ул күпме тора ала һәм һыуһыҙ күпме тора ала?

Һыу – ябай ғына инфузорияларҙан алып ғәләмәт ҙур киттарға ҡәҙәр иҫәпһеҙ-хисапһыҙ тере организмдарҙың йәшәү мөхите. Һыу ярҙамында орлоҡтар бүртә һәм тамыр ебәрә, тупраҡтан файҙалы матдәләрҙе ала, үҫә, кешеләргә һәм хайуандарға файҙалы булған емештәр бирә. «[Раббығыҙға ғибәҙәт ҡылығыҙ], **...Күктән һыу ағыҙып, һеҙҙең тамағығыҙ туйһын тип, төрлө-төрлө емештәр үҫтерҙе...»** (Баҡара, 22).

Аллаһ һыуға шул ҡәҙәр күп ғәжәйеп сифаттар биргән, ерҙәге әҙәм тормошонда уны алмаштырырлыҡ бер нәмә лә юҡ.

Һыу молекулаһының ($H_2O$) ике элементтан – водород һәм кислородтан тороуын һеҙ мәктәп программаһынан беләһегеҙ. Һыуҙың Илаһи мөғжизәгә эйә булыуы хаҡында уйланығыҙ! Әгәр водород һәм кислород башҡа төрлө итеп һәм башҡа нисбәттә берләшһә, һыу ҙа, ерҙәге тормош та булмаҫ ине. Әгәр һыу молекулаһына йәнә 1 кислород атомын ҡушһаң, водород перекисе ($H_2O_2$) барлыҡка килә, уның ҡуйыртылған иретмәһе кеше өсөн уғата хәүефле, сөнки тәнен, лайлалы тиресәһен яндырыуы ихтимал. Кислород һәм водородтың газ рәүешендәге ҡатнашмаһы - шартлатҡыс газ, уға ут төртһәң, көслө шартлау буласаҡ, водород кислородта янасаҡ. Әммә Аллаһы Тәғәлә, ҡапма-ҡаршы үҙенсәлектәргә эйә булған ошо ике элементты берләштереп, беҙгә һыу бүләк иткән, уны һалҡын һәм тәмле иткән. Һыу ярҙамында Аллаһ беҙгә күпме бәрәкәт биреүе

хаҡында уйланғанығыҙ булдымы икән?

Таштарға бәрелә-бәрелә, меңдәрсә нурлы тамсы сәсеп, урғылып аҡҡан йылғалар күпме шағирҙы илһамландырған. Бер шағир әйткән: *«Мин – фатихалы аяҡ туҙанына етер өсөн, таштан-ташҡа бәрелә-һуғыла аҡҡан һыумын»*. Шул рәүешле ул Аллаһ Илсеһенә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) оло һөйөүен белдергән. Шағирға шарлап аҡҡан йылғалар ҙа Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) янына уҡтала һымаҡ. Ә һеҙ Уның менән күрешергә теләйһегеҙме? Күсләмө Пәйғәмбәребеҙгә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һөйөүегеҙ? Мин дә, йыһандағы миллиардтарса бөтә барлыҡ та Уны ярата, Уны юҡһына!

Һеҙ ҙә, теге шағир шикелле, йылғаны күҙәтеп, уның урғылып йәки тыныс ҡына ағышында Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Ватанына уҡталыуын тойорға тырышығыҙ.

Раббыбыҙҙың бер мөғжизәһе булған ямғыр хаҡында һөйләгем килә һеҙгә. Ҡояш нурҙары тәьҫире арҡаһында, күләүек, йылға, күл, диңгеҙ, океандарҙағы һыу



парға әйләнә. Бөйөк салих зат Мәүләнә Йәләлетдин Руми һыуҙың хәле тураһында былай тип яҙа:

*«Һыу һәммә барлыҡты һуғара, әммә таҙалығын, сафлығын юғалтһа, беҙҙең һымаҡ уҡ тыныслығын юғалта, һәм ул Аллаһҡа ялбара башлай: «О Хаҡ Тәғәләм! Һин бүләк итеп биргәнде мин таратып бөттөм, үҙем мохтажлыкта ҡалдым…»*

*Уның аһ-зарын ишетеп, Аллаһу Сүбхәнәһү үә Тәғәлә әмер бирә: «Ҡояш уны парға әйләндереп, күккә күтәрһен, ә һин, болот, уны бысраҡ урындан таҙа урынға күсер…»*

*Аллаһу Тәғәлә уны пар рәүешендә күккә ала, төрлө юлдар*



*менән таҙарта һәм сафлыҡ, бәрәкәт рәүешендә кире ямғыр итеп яуҙыра. Миңә бағығыҙ һәм яман ниәттәрҙән һәм сифаттарҙан үҙегегеҙҙе паклағыҙ. Бөтә барлыҡҡа бәрәкәт биргән ямғыр кеүек булығыҙ*!

Ергә етәрәк ямғыр тамсыларының тиҙлеге ни өсөн кәмеүе тураһында уйлап ҡараманығыҙмы? Ни өсөн ямғыр ергә ташҡын булып түгел, айырым тамсылар булып яуа? Ни өсөн ямғыр тамсылары кешеләрҙе, ерҙә төйәкләнгәндәрҙе йәрәхәтләмәй? Ерҙең тартыу көсө арҡаһында меңәр метр бейеклектән ғәләмәт ҙур тиҙлек менән төшкән ямғыр тамсылары юлындағы һәр нәмәне ҡурғаш йәҙрә бөртөктәре ише тишеп үтергә тейеш һымаҡ. Кем ямғыр тамсыларын шундай шәфҡәт менән ергә төшөрә? Кем кешеләр һәм ерҙәге бөтә барлыҡ хаҡында шулай хәстәрлек күрә?

Күңелемде ныҡ йәрәхәтләгән нәмәләр бар: Аллаһ ҡәтғи тыйған иҫерткес эсемлектәр эшләү өсөн файҙаланалар мине. Әммә иҫ киткес бәхетле мәлдәрем дә бар: Аллаһ ихтыяры менән меңәр быуат буйы сүллектә лә кипмәгән Зәм-Зәм шишмәһе тамсыһына әүерелəм. Ул шишмә һыуһынды ҡандыра, асты туйындыра, ауырыуҙы һауыҡтыра.

Аллаһтың оло ниғмәте – һыу тураһында уйланығыҙ! Бәләкәй генә үтенесем бар һеҙгә: һыу эсер алдынан «Бисмилләһ» һүҙен әйтегеҙ, ә эсеп бөткәс, «Әлхәмдүлилләһ!» һүҙен әйтергә онотмағыҙ. Килештекме?

## Как прекрасно разговаривает с нами Солнце…



Я – Солнце, дающее вам свет и тепло. Я – самая близкая к Земле звезда. Мой диаметр в 109 раз больше диаметра Земли и составляет 1 392 000 км, а объем превышает объем земного шара в 1 301 000 раз. Среднее расстояние от Земли до Солнца 150 миллионов км. Это расстояние огромно, поэтому вы видите меня в небе в виде небольшого диска. Чтобы понять эти соотношения, представьте себе Землю в виде грецкого ореха, тогда я, по сравнению с ней, окажусь огромным шаром диаметром 5 или 6 метров – это примерно равно высоте двух этажей дома! А расстояние между нами в этом масштабе будет равно 600 метрам!

Я – гигантский огненный шар. Температура моего ядра 13 500 000 °С. Если температу-



ра кипения воды около 100 ºС, то температура кипения моего ядра превышает ее в 135 тыс. раз. Когда я встаю над землей, мой свет разгоняет ночную тьму. Людям, животным, всему созданному я несу тепло. Без солнечного тепла и света не созреет зерно в колосьях, не вырастут овощи, не поспеют фрукты.

Если бы Земля находилась немного ближе ко мне, то превратилась бы в выжженную безводную пустыню, а если бы находилась немного дальше, то покрылась бы льдом. Но Земля находится на строго определенном расстоянии от меня – не ближе и не дальше, и это установление Великого и Мудрого Создателя. **«Разве ты не знаешь, что Аллах …подчинил Своей власти Солнце и Луну, которые движутся по установленному** [Им] **порядку…»** (сура Лукман, 29).

Звезды – как люди, рождаются, живут и умирают. Космос часто называют «безвоздушным пространством», полагая его пустым. Но на самом деле, в межзвездном пространстве перемещаются огромные массы космической пыли и газа (в основном водорода), которые скапливаются в облака, достигающие размеров сотен световых лет. Ученые считают, что части облака могут сжиматься под действием сил гравитации, в результате чего составляющее облако вещество уплотняется, уменьшается в размерах и одновременно нагревается. Внутри вещества начинают происходить ядерные реакции, и рождается новая звезда. Возможно так, по воле Всевышнего Создателя, 5 млрд. лет назад, произошло рождение звезды по имени Солнце.

Когда вы смотрите на ночное небо, вас привлекает удивительная картина мириадов ярких звезд, рассыпанных, словно сверкающие бриллианты, на

«Разве ты не знаешь, что Аллах …подчинил Своей власти солнце и луну, которые движутся по установленному [Им] порядку…» (сура Лукман, 29)



бархате небес. Снизу вам кажется, что все звездочки одного размера, Но среди них есть «карлики», масса которых составляет не более половины массы Солнца, а есть и супергиганты, как звезда Бетельгейзе из созвездия Ориона, которая в 1000 раз больше Солнца. Если бы Солнце имело такой же размер, оно поглотило бы все планеты Солнечной системы до Юпитера.

Звезды собираются в скопления, образуя галактики. Я, Солнце – только одна из 200 миллиардов звезд, находящихся в галактике Млечный путь, как песчинка на дне огромного океана. Всевышний Создатель сотворил бесконечное множество галактик, подобных нашей. То есть, мои огромные размеры в масштабах Вселенной нельзя сравнить даже с ничтожной пылинкой!

Так Господь призывает людей размышлять над восхитительным искусством и могуществом Своего творения: **«Он – тот, который сотворил для вас звезды, чтобы вы находили по ним путь во мраке суши и моря. Да, Мы разъяснили знамения для людей, познавших** [истину]**»** (сура Скот, 97).

Я не знаю, сколько вам лет, а мой возраст – примерно 5 миллиардов лет, и это означает, что я прошло около половины своего жизненного пути. 5 миллиардов лет я продолжаю излучать свет и тепло, как повелел мне мой Создатель.

Когда вы смотрите на небо, вам кажется, что я нахожусь на одном месте. А ведь я со скоростью 250 км/сек вместе с Землей



и другими планетами совершаю путешествие в холодной темноте бескрайнего космического пространства. **«Солнце плывет к своему местопребыванию. Таково предустановление Могущественного, Знающего»** (сура Йасин, 38). Хотя мы миллионы лет совершаем свое движение, но ни разу не пересекли свой путь дважды ни в одной точке. В ходе этого удивительного путешествия нашей галактики вы вместе с планетой Земля только за один день преодолеваете расстояние 2 000 000 км вокруг меня, Солнца, но не замечаете этого. Прибавьте к этому вращение Земли вокруг своей оси со скоростью 1 666 км/час и подумайте о могуществе и восхитительном чуде божественного искусства! Какой идеальный расчет! Какая совершенная программа!

Все эти космические законы установлены Всевышним Создателем. А человеку, обладающему разумом, ничего не остается, как размышлять над проявлениями божественного могущества и величия, как повелевает сам Господь миров: **«Он создал семь небес одно над другим. В творении Милостивого ты не увидишь никакой несообразности. Взгляни еще раз. Видишь ли ты какую-нибудь трещину? Потом взгляни еще раз и еще раз, и твой взор вернется к тебе униженным, утомленным»** (сура Власть, 3-4).

Это послание Священного Корана, сделанное 1400 лет назад, адресовано современным людям, ученым и поколениям, которые будут жить до самого Конца света!

Как велик Священный Коран, вобравший в себя все, что есть во Вселенной! Как велик Священный Коран, который всегда опережает всех в знании и открытиях! Насколько мудр этот хранитель божественных истин, что все познание человечества идет за ним! А когда челове-

чество уходит в заблуждение, снова именно Коран является компасом, указывающим истинный путь!

До ниспослания Священного Корана люди периода невежества (джахилии) видели звезды, в виде мерцающих светлячков. Перед совершением какого-либо дела они гадали по звездам и только потом принимали решение. А в средние века, в 15-16 веках христиане Европы утверждали, что земной шар не вертится, а я, Солнце, вращаюсь вокруг Земли. К сожалению, их уши, глухие к истине, не могли слышать чудные звуки Корана, направляющего к знаниям.

По воле Господа Бога, я олицетворяю на земле Его милость и доброту. Так же как Господь дает пропитание даже неверующим, которые отвергают Его, предоставляет им время, чтобы они могли увидеть истину, и проявляет терпение, я, Солнце, даю свет и тепло всем, не делая различий между верующими и неверующими, между грешниками и праведниками.

Всемогущий Творец начинает Коран с повеления «Читай!» Он желает, чтобы вы читали, наблюдая за Вселенной и за всем, что происходит в ней.



Великий праведник Мавляна Джалалетдин Руми, указывая на меня, как на образец милосердия и щедрости, говорил: *«В доброте и милосердии будь как Солнце»*.

Всемогущий Господь повелевает: **«Клянусь Солнцем»**. Я рассказало вам о себе, как светило, которым поклялся сам Аллах.

И вы, каждый раз наблюдая за мной, видя первые утренние лучи, вспомните о могуществе и величии Господа миров.

## Ҡояш беҙҙең менән ни кәҙәр гүзәл һөйләшә...



Мин – яҡтылыҡ һәм йылы биреүсе Ҡояш. Ергә иң яҡын йондоҙмон. Диаметрым Ер диаметрынан 109 тапҡыр артыҡ һәм оҙонлоғо 1 392 000 км, ә дәүмәлем ер дәүмәленән 1 301 000 тапҡыр ҙур. Ер һәм Ҡояш араһы 150 миллион км. Был ғәләмәт ҙур арауыҡ, шуға күрә һеҙ мине ҙур булмаған дүңгәләк рәүешендә күрәһегеҙ. Был нисбәттәрҙе аңлар өсөн, Ерҙе эстерхан сәтләүеге рәүешендә күҙ алдына килтерегеҙ, ул сағында мин диаметры 5-6 метрлыҡ ҙур шар кеүек буласаҡмын – ике ҡатлы йорт кеүек булам инде. Был масштабта беҙҙең ара 600 метрға тиң буласаҡ!

Ғәләмәт ҙур утлы шар мин. Үҙәгемдәге температура 13 500 000 °С. Һыуҙың ҡайнау температураһы - 100 °С булһа, минең үҙәгемдәге ҡайнау тем-

«Күрмәйһеңме ни, Аллаһ төндө көнгә һәм көндө төнгә керетеп аралаштыра. Ҡояшты, Айҙы үҙ тәртибенсә йөрөтә. Быларҙың һәр береһе (Аллаһ тарафынан) билгеләнгән бер ваҡытҡа ҡәҙәр шул тәртиптә хәрәкәт итәсәк…» (Лоҡман, 29)



ператураһы унан 135 мең тапҡыр күберәк. Мин Ер өҫтөнә күтәрелһәм, яҡтылығым төнгө ҡараңғылыҡты ҡыуып ебәрә. Кешеләргә, хайуандарға, бөтә барлыҡҡа мин йылы бирәм. Ҡояш йылыһы һәм яҡтылығы булмаһа, иген башаҡтары тулышмай, йәшелсәләр, емеш-еләк өлгөрмәй.

Ер саҡ ҡына миңә яҡыныраҡ булһа, ул һыуһыҙ сүллеккә әйләнер, ә саҡ ҡына алыҫыраҡ булһа, боҙ менән ҡапланыр ине. Әммә Ер минән күпме кәрәк, шундай алыҫлыҡта – Бөйөк һәм Хаҡ Тәғәләбеҙ уны шулай урынлаштырған. **«Күрмәйһеңме ни, Аллаһ төндө көнгә һәм көндө төнгә керетеп аралаштыра. Ҡояшты, Айҙы үҙ тәртибенсә йөрөтә. Быларҙың һәр береһе (Аллаһ тарафынан) билгеләнгән бер ваҡытҡа ҡәҙәр шул тәртиптә хәрәкәт итәсәк…»** (Лоҡман, 29).

Йондоҙҙар ҙа кешеләр кеүек: тыуалар, йәшәйҙәр һәм үләләр. Йыһанды йыш ҡына «һауаһыҙ киңлек» тип йөрөтәләр, бушлыҡ рәүешендә күҙ алдына килтерәләр. Асылда, йондоҙло күктә, болоттар рәүешендә ойошоп, йөҙҙәрсә яҡтылыҡ йылы дәүмәлендәге ғәләмәт зур йыһан туҙаны һәм газдарынан торған массалар күсеп йөрөй. Ғалимдар фекеренсә, гравитация көсө тәьҫире арҡаһында, болоттарҙы барлыҡҡа килтергән матдәнең бер өлөшө тығыҙлана, дәүмәле бәләкәсәйә һәм бер үк ваҡытта йылына. Матдә эсендә йәҙрә реакцияһы башлана,



һәм яңы йондоҙ тыуа. Моғайын, Аллаһ ихтыяры менән 5 млрд. йыл элек Ҡояш тип аталған йондоҙ, йәғни мин, шулай тыуғанмындыр.

Һеҙ төнгө күккә бағаһығыҙ һәм бәрхәт ерлектә ялтлап ятҡан гәүһәрҙәр шикелле иҫәпһеҙһанһыҙ йондоҙҙарҙы күрәһегеҙ. Аҫтан ҡарағанда, барса йондоҙҙар ҙа бер дәүмәлдә кеүек. Әммә улар араһында массаһы Ҡояш массаһының яртыһынан артмаған «кәрләләр» һәм Орион йондоҙлоғондағы Бетельгейзе йондоҙо ише Ҡояштан 1000 тапҡыр ҙур ғәләмәт ҙур гиганттар ҙа бар. Әгәр Ҡояш та шул дәүмәлдә булһа, Юпитерға ҡәҙәр Ҡояш системаһындағы бөтә планеталарҙы ла йотор ине.

Йондоҙҙар, өйкөм-өйкөм йыйылып, галактикалар барлыҡҡа килтерә. Мин, Ҡояш - Ҡош Юлы галактикаһындағы 200 миллиард йондоҙҙоң береһе – ҙур океан төбөндәге ҡом бөртөгө генә кеүекмен. Хаҡ Тәғәләбеҙ беҙҙеке ише ифрат күп галактикалар барлыҡҡа килтергән. Йәғни, минең оло тойолған дәүмәлем Йыһан масштабында бер туҙан бөртөгө кеүек кенә.

Раббыбыҙ беҙҙе Үҙенең һоҡланғыс Ижад емештәре һәм Кеүәте хаҡында уйланырға саҡыра: **«Ул, коро ерҙә һәм диңгеҙҙә юлығыҙҙы турылау өсөн, йондоҙҙарҙы яралтты. Хаҡтыр, мәғлүмәтле халыҡ өсөн аяттарҙы тәфсилләп аңлаттыҡ»** (Әнғәм, 97).

Һеҙгә нисә йәш икәнен мин белмәйем, ә минеке – яҡынса 5 миллиард, тимәк, ғүмер юлымдың яртыһы уҙған. Раббым әмере буйынса, 5 миллиард йыл буйы мин яҡтылыҡ һәм йылылыҡ таратам.

Күккә баҡһағыҙ, мин бер урында ғына торам һымаҡ. Ә бит мин секундына 250 километр тиҙлек менән Ер һәм башҡа планеталар менән бергә сикһеҙ ҡараңғы йыһан киңле-

гендә сәйәхәт итәм. **«Ҡояш та (Илаһи бер ҡөҙрәттең дәлиле булараҡ) үҙенә (Аллаһ тарафынан) билгеләнгән ваҡытҡа саҡлы әйләнеп йөрөр. Был эштәр сикһеҙ Ҡөҙрәт эйәһе, (һәр нимәне) дөрөҫө менән белеп тороусы (Аллаһ) әмерелер»** (Йәсин, 38). Беҙ миллиондарса йыл хәрәкәт итһәк тә, һис ҡасан юлыбыҙ бер үк нөктә аша үткәне юҡ. Галактикабыҙҙың ғәжәйеп был сәйәхәте ваҡытында һеҙ Ер менән бергә көн эсендә минең тирәләй, йәғни Ҡояш тирәләй, 2 000 000 км арауыҡты үтәһегеҙ, әммә быға иғтибар ҙа итмәйһегеҙ. Шуға өҫтәп, Ерҙең дә үҙ күсәре тирәләй сәғәтенә1 666 км. тиҙлек менән әйләнеүен онотмағыҙ һәм иҫ киткес Илаһи Ҡөҙрәт тураһында уйланығыҙ! Ниндәй теүәл иҫәп! Ниндәй камил программа!

Бөтә был йыһан ҡанундары Аллаһу Сүбхәнәһү үә Тәғәлә тарафынан булдырылған. Ә аҡылы булған әҙәмгә, Ғаләмдәр Раббыһы әмер иткәнсә, Илаһи Ҡеүәт, Бөйөклөк тураһында уйланырға ғына ҡала: **«Аллаһ бер-береһенә ярашҡан ете ҡат Күкте бар итте. Ғаләмдәр Раббыһының бар итеү ғәмәлендә һеҙ һис бер кәмселек күрмәҫһегеҙ. Унан һуң тағы ҡат-ҡат ҡарағыҙ, ҡарашығыҙ (Күк**



**төҙөлөшөндә етешһеҙлек таба алмайынса), хәлдән тайып, меҫкен хәлдә кире ҡайтыр»** (Мүлк (Хакимиәт), 3-4).

1400 йыл элек тапшырылған Изге Ҡөрьәндең мөрәжәғәте Ҡиәмәткә ҡәҙәр йәшәйәсәк бөтә кешеләргә, ғалимдарға, быуындарға төбәлгән!

Йыһанда булғандың һәммәһен үҙ эсенә алған Изге Ҡөрьән ни ҡәҙәр бөйөк! Буласаҡ бөтә асыштар үҙендә тупланған Изге Ҡөрьәндең тиңе юҡ! Кешелек ғилемен үҙенең артынан эйәрткән Илаһи хәҡиҡәттәр һаҡлағысы ниндәй ҙур хикмәткә эйә! Кешелек аҙашып кит-



кән һайын, тап Ҡөрьән компас һымаҡ хәҡиҡәт юлын күрһәтә!

Изге Ҡөрьән төшөрөлә башлағанға ҡәҙәр, яһилиәт замана халҡы йондоҙҙарҙы ем-ем итеп торған баҙлауыҡ итеп күрҙе. Ниндәйҙер эш башлар алдынан, улар йондоҙҙарға ҡарап күрәҙәлек ҡылды һәм шунан ғына ҡарар ҡабул итте. Урта быуаттарҙа Европа христиандары, Ер шары әйләнмәй, ә мин, Ҡояш, Ер тирәләй әйләнәм, тип иҫәпләне. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уларҙың хаҡты ишетмәгән ҡолаҡтары Ҡөрьәндең ғилемгә илтеүсе ғәжәйеп тауышын ишетергә ҡадир түгел ине.

Аллаһ ихтыяры менән, Ерҙә мин Уның шәфҡәте һәм изгелеге кәүҙәләнеше булып торам. Раббым, түҙемлек күрһәтеп, хаҡты күрер өсөн ваҡыт биреп, Үҙен инҡар иткән дәһриҙәргә лә ризыҡ биргән кеүек, мин, Ҡояш, дәһриҙәргә лә, мосолмандарға ла, гонаһкәрҙәргә лә, изге күңеллеләргә лә һис айырмай йылымды өләшәм.

Аллаһ Тәғәлә Ҡөрьәнде «Уҡы!» тигән әмере менән башланы. Ул Йыһанды, тирә-йүндәге хәлдәрҙе күҙәтеп уҡыуығыҙҙы теләй. Бөйөк мәғрифәт эйәһе Мәүләнә Йәләлетдин Руми мине шәфҡәт һәм йомартлыҡ үрнәге итеп күреп әйткән: *«Ҡояш кеүек шәфҡәтле һәм игелекле булығыҙ».*

Аллаһ Тәғәлә әмер бирә: **«Ҡояш менән ант итәм».** Аллаһ Үҙе минең менән ант иткән яҡтылыҡ сығанағы мин.

Мине күҙәткән, иртәнге тәүге нурҙарымды күргән һайын, Ғаләмдәр Раббыһының Ҡөҙрәте һәм Бөйөклөгө хаҡында уйланығыҙ.

## Как прекрасно разговаривает с нами Коран…



Я – чудо Аллаха, которое будет существовать до самого Конца света. Я – проводник счастья и покоя для человечества. Я – Священный Коран, который Всевышний Господь ниспослал людям как сокровищницу знаний. На протяжении веков я дарую покой сердцам и озаряю радостью лица тех, кто следует моим повелениям и наставлениям. Эти люди и в мире вечном будут также счастливы.

Я такая Книга, что если люди будут строить свою жизнь согласно моим положениям и идти по пути, указанному мной, то обретут красивую нравствен-



ность, пребудут в счастье и покое. Они станут прекрасными рабами Аллаха.

*Я – от Аллаха!*

Все книги мира содержат знания, которые являются продуктом размышлений и высказываний людей, то есть, они созданы людьми и являются человеческим творением. Но я – Слово Аллаха. Я ниспослан Всевышним Творцом, я – божественная Книга.

Во всех книгах, написанных людьми, есть ошибки, заблуждения, неверные сведения. Но во мне вы не найдете ни одного изъяна или недостатка, так как я ниспослан от Всемогущего Бога, который самым безупречным и совершенным образом обустроил всю Вселенную и все, что находится в ней. Всевышний Господь повелевает:

**«Милостивый научил Корану, создал человека и научил его изъясняться»** (сура Милостивый, 1-4).

Ведь Аллах ниспослал меня вам в качестве руководства и путеводителя.

***Я – самое великое чудо Посланника Аллаха!***

Всемогущий Господь Бог ниспосылал священные книги и тем народам, которые жили задолго до вас. Когда к ним приходили пророки, они требовали у них сотворить чудеса, и пророки явили им множество чудес. Например, пророк Салих (мир ему) на виду у всего народа сделал так, что из скалы вышла верблюдица с верблюжонком. Пророк Ибрахим/Авраам (мир ему) превратил огромный пылающий костер в благоухающий сад. Пророк Муса/Моисей (мир ему) взмахнул своим посохом, и Красное море разделилось надвое. Пророк Иса/Иисус (мир ему) возвращал зрение слепым, оживлял мертвых. А послед-

нему пророку – Мухаммаду (мир ему и благословение) был ниспослан Коран, как самое великое чудо Посланника Аллаха. Ведь за 14 веков, прошедших с ниспослания Корана, люди не смогли создать Книгу, подобную мне. Они не смогли написать ничего подобного даже одному моему аяту (стиху).

И не напишут никогда, о чем Всевышний Аллах говорит:

**«Скажи: «Если бы люди и джинны объединились для того, чтобы сочинить нечто, подобное этому Корану, это не удалось бы им, даже если бы они стали помогать друг другу»** (сура Ночной перенос, 88).

Чтобы найти ответы на возникающие вопросы, мы часто обращаемся к энциклопедиям, над которыми работали целые коллективы из десятков ученых, объединивших свои знания и научный опыт для этого труда. Но каждые 8-10 лет сведения, относящиеся к науке и технике, требуют обновления, так как жизнь не стоит на месте, постоянно происходят новые открытия и достижения, меняется жизнь людей. Следовательно, многие энциклопедические сведения теряют свою актуальность или оказываются ошибочными. И ученые коллективы вынуждены постоянно вносить коррективы или писать новые энциклопедии. Например, в словарях, составленных 30-40 лет назад, вы не встретите таких слов, как интернет, сотовая связь, электронная почта, так как этих понятий тогда просто не существовало.



Поэтому на земле, кроме меня – Корана, нет книги, написанной много веков назад, в которой не было бы ошибок и недостатков. Ведь источником знаний, содержащихся во мне, является Господь Бог, который объял Своим безграничным знанием все сущее. Поэтому я



всегда иду впереди всех наук. Я указываю им путь. В свою очередь, ученые могут распознать истины, содержащиеся во мне, в зависимости от степени своей проницательности.

***Человечество до Конца света будет разгадывать истины, содержащиеся во мне!***

Открывая эти истины, человечество приходит в изумление.

Взгляните на кончики своих пальцев. Присмотревшись, вы увидите, что кожа подушечек пальцев покрыта сложными рельефными узорами, состоящими из бороздок и гребешков между ними. Это «папилярные линии», которые формируются у человека еще в утробе матери и не исчезают после смерти. Они не меняются в течение жизни. Отпечатки пальцев индивидуальны, то есть среди семи миллиардов людей, живущих на земле, нет никого, чьи отпечатки пальцев повторялись бы. То есть, отпечатки ваших пальцев присущи только вам. Отпечатки пальцев миллиардов людей, которые жили до нас, также не похожи друг на друга. Об этой истине ученые узнали совсем недавно, 60-70 лет назад. А ведь еще 1400 лет назад Всевышний Господь сообщил в Коране:

**«Неужели человек полагает, что Мы не соберем его костей? Конечно! Мы способны восстановить даже кончики его пальцев»** (сура Воскресение, 3-4).

Наш Господь, который мощен над всякой вещью и который обладает безграничной силой, сообщил, что так же как сотворил человека из небытия, также Он может вновь оживить его после смерти из праха.

На меня, Коран, Всевышний Господь возложил обязанность спасения людей от тьмы неве-

жества, сделав руководством на пути к свету веры и знаниям.

Невежественные люди, еще до того, как Всевышний Господь начал ниспослание откровений пророку Мухаммаду (мир ему и благословение), глядя на небо, видели мириады рассыпанных по нему звезд, но не имели никаких знаний о них. Они гадали по звездам, а также, ориентируясь по ним, находили путь. Всевышний Господь клянется звездами:

**«Нет же (не правы неверующие, говоря о Коране плохое)! (Я, Аллах,) клянусь местами заката звезд! Если бы вы только знали, что это – клятва великая»** (сура Событие, 75-76).

Здесь «место заката звезд», которым клянется Аллах, может означать «черную дыру» – область в пространстве и времени, сила притяжения которой настолько велика, что попавшие внутрь нее объекты, даже движущиеся со скоростью света (в том числе и кванты самого света), не могут покинуть ее.

Часто астрономы фиксируют ужасающие всплески энергии, приходящие из далекого космоса. Это могут быть отголоски



гибели планет и звезд в провалах черных дыр. Эти звезды, которые во много раз превосходят по размерам нашу Землю, по истечении их срока жизни уходят в «черные дыры» и погибают на таинственном «кладбище звезд».

***Верующие, воспитанные Священным Кораном, будут счастливы в обоих мирах.***

Ваш Господь желает, чтобы вы часто читали Коран. Он желает, чтобы вы размышляли над моими аятами. Он желает, чтобы вы размышляли над историей народов, о которых я рассказываю вам, и извлека-



ли назидание из их жизни. Он предупреждает вас:

**«Неужели они не размышляют над Кораном? Или же на их сердцах засовы?»** (сура Мухаммад, 24).

Так, в давние времена жили народы Ад и Самуд. К ним были посланы пророки Худ и Салих (мир им). Народу деспотичного правителя Немруда был направлен пророк Ибрахим/Авраам (мир ему). А пророк Муса/Моисей (мир ему) был послан сынам Исраиля (потомкам пророка Якуба), которые находились под гнетом жестокого Фараона.

Однако большая часть этих народов, несмотря на призыв пророков, не уверовали и восстали против воли Всевышнего Бога, нарушили божественные повеления и запреты, перейдя все пределы допустимого. Последовав за своими низменными желаниями, они остались в тьме неверия и заблуждений. Своей гордыней и упрямством они навлекли на себя гнев Всевышнего и были погублены. Некоторых сокрушил страшный ураган. Других поглотила разверзнувшаяся земля. Третьи утонули в море, накрытые огромной волной. Кого-то из могущественных тиранов погубил ничтожный комар, пробравшийся через нос в основание его мозга и причинявший ему невыносимую боль.

Они все остались на страницах истории как символы невежества и безбожия. Люди до сих пор помнят злодеяния Фараона и Немруда, употребляя в своей речи обороты: «мучитель, как Фараон» или «злодей, подобно Немруду».

В то же время благородные сподвижники пророка Мухаммада (мир ему и благословение) жили в соответствии с повелениями Корана и наставлениями Пророка (мир ему и благо-

словение). Каждый из них стал образцом высокой нравственности и достоинства для людей. Когда мы вспоминаем их, то всегда добавляем: «Радыйаллаху анхум/Да будет доволен ими Аллах!» Они – словно яркие звезды, взошедшие на небосводе Ислама.

Даже если самые лучшие учителя современности, самые знаменитые профессора и воспитатели соберутся все вместе и начнут претворять самые передовые современные методы педагогики в самой лучшей школе мира, интересно, смогут ли они воспитать таких людей, какими были сподвижники – ученики пророка Мухаммада (мир ему и благословение)?

***Я – восхитительное произведение божественного искусства!***

Я несу людям все предписания Ислама, который является религией, избранной Богом для людей. Я призываю верующих, любящих Аллаха и Его посланника, к размышлению.

Подумайте, каким образом люди появились из небытия? Посмотрите на порядок и гармонию во вселенной! Почему атмосфера не улетает? Почему



каждый год земля дает урожай самых разнообразных злаков, овощей и фруктов, но при этом не устает и даров на ней не уменьшается!

Кто разработал этот порядок до мельчайших деталей и сохраняет его? Как видите, все во Вселенной указывает на существование, величие и могущество Всевышнего Бога.

***Не забывайте, что вы пришли в этот мир для испытаний!***

Посредством меня, Корана, Господь Бог напоминает, что вы пришли в этот мир для испытаний. Он желает, чтобы вы знали, что за всякое добро



или зло даже размером с пылинку, вы получите воздаяние. Он сообщает, что ни один поступок не останется без ответа, так как в Судный день все места, где человек поклонялся или грешил, будут свидетельствовать «за» или «против» него.

В этот страшный день какое-то место на земле скажет: «Этот раб на мне совершал намаз, читал Коран и получал знания». А другое место будет свидетельствовать: «Этот человек, стоя на мне, злословил и сплетничал, причинял страдания другим».

Если бы не было будущей жизни, то не было бы смысла нашего прихода в этот мир. Например, если учителя в школе не будут задавать вам уроки и устраивать экзамены, а в конце учебного года не будут выводить итоговые оценки – много ли учеников будет продолжать посещать школу?

Также и главным смыслом нашей жизни на земле является испытание. У этого испытания обязательно будут результаты и итоговые оценки. Кто был старателен, будет отделен от нерадивых, кто перешел в следующий класс, будет отделен от оставшихся на второй год.

***Господь Бог ниспослал Коран, по причине большой любви к вам!***

Помните, что Аллах любит вас! Он желает, чтобы вы были любящими Аллаха рабами!

Поэтому Он ниспослал меня как путеводитель к счастью. Господь желает, чтобы вы, выполняя предписания Корана, стали благонравными, добрыми, милосердными, щедрыми и чуткими людьми, достойными вхождения в Рай.

Аллах желает, чтобы вы, избегая низких и дурных деяний, удалялись от Ада.

## Ҡөрьән беҙҙең менән ни ҡәҙәр гүзәл һөйләшә...



Мин – Ҡиәмәткә ҡәҙәр йәшәйәсәк Аллаһ мөғжизәһе, бәхеткә һәм тыныслыҡҡа юл асыусы. Мин – кешелеккә ғилем хазинаһы итеп ебәрелгән Изге Ҡөрьән. Әмерҙәремә һәм нәсихәттәремә эйәреүселәрҙең йөрәктәренә быуаттар буйы тыныслыҡ өләшәм, йөҙҙәрен нурландырам. Ул кешеләр мәңгелек донъяла ла сәғәҙәткә ирешәсәк.

Тормоштарын минең нәсихәттәремә эйәреп ҡороусылар һәм мин күрһәткән юлдан барыусылар гүзәл әхлаҡҡа эйә буласаҡ, бәхет һәм тыныслыҡ



табасаҡ, Аллаһтың күркәм ҡолдары буласаҡ.

*Мин – Аллаһтан!*

Донъялағы бөтә китаптарҙа ла кешеләрҙең уй-фекерҙәре сағылыш тапҡан, улар – кешеләрҙең ижад емеше. Әммә мин – Аллаһ һүҙе. Мин Аллаһ Тәғәлә тарафынан төшөрөлдөм, мин – Илаһи Китап.

Кешеләр тарафынан яҙылған китаптарҙа яңылышлыҡтар, дөрөҫ булмаған мәғлүмәттәр бар. Миндә һеҙ бер генә етешһеҙлек тә таба алмаясаҡһығыҙ, сөнки мин бөтә ғаләмде камил рәүештә барлыҡҡа килтергән Аллаһу Сүбхәнәһү үә Тәғәләнәнмен. Аллаһ бойора:

**«Мәрхәмәт эйәһе Аллаһ Ҡөрьәнде өйрәтте. Инсанды Ул яралтты. Һөйләшергә өйрәтте»** (Әр-Рахмән, 1-4).

Аллаһ мине етәксе һәм юл күрһәтеүсе сифатында ебәрҙе.

***Мин – Аллаһ Илсеһенең иң бөйөк мөғжизәһе!***

Хаҡ Тәғәләбеҙ изге китаптарҙы беҙҙән әүәл йәшәгән халыҡтарға ла төшөргән. Пәйғәмбәрҙәр килгәс, улар мөғжизә күрһәтеүҙе талап иткән, һәм пәйғәмбәрҙәр уларға бик күп мөғжизәләр күрһәткән. Мәҫәлән, Салих пәйғәмбәр доғаһы буйынса (ғәләйһис-сәләм) ҡая таш эсенән балаһы менән дөйә сыҡҡан. Ибраһим пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) ырғытылған ут хуш еҫле баҡсаға әүерелгән. Муса пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) таяғын һелтәү менән, Ҡыҙыл диңгеҙ уртаға ярылған. Ғайса пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) һуҡырҙарға күреү һәләтен ҡайтарған, үлеләрҙе терелткән. Ә һуңғы пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәткә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) иһә иң бөйөк мөғжизә - Ҡөрьән төшөрөлдө. Миңә, Ҡөрьәнгә торошло китапты

әҙәм балалары яҙа алғаны юҡ. Хатта бер аятыма тиң әҫәрҙе лә таба алмаҫһың. Миңә тиң китапты бирәү ҙә яҙа алмаясаҡ, Аллаһ Тәғәлә әйткән:

**«Әйт: «Шуныһы хаҡтыр: кешеләр менән барлыҡ ендәр, бергә йыйылышып, бер-береһенә ярҙам итешһәләр ҙә, Ҡөрьәнгә оҡшаш китапты майҙанға сығара аласаҡ түгел»** (Исра (Төндәге йөрөү), 88).

Килеп тыуған һорауҙарға яуап табыу өсөн, беҙ йыш ҡына тиҫтәләрсә ғалим ғилеме, фәнни тәжрибәләре берләштерелеп төҙөлгән энциклопедияларға мөрәжәғәт итәбеҙ. Әммә фәнгә һәм техникаға ҡараған ул мәғлүмәттәр 8-10 йыл һайын яңыртылып тороуҙы талап итә, сөнки тормош бер урында тормай, яңы асыштар яһала, кешеләрҙең тормошо үҙгәрә. Ҡасандыр ҙур асыш һымаҡ булып күренгән энциклопедик мәғлүмәттәр хаталы булып сыға. Һәм ғалимдар коллективы хеҙмәттәренә даимән үҙгәрештәр индерергә йәки яңы энциклопедия яҙырға мәжбүр була. Мәҫәлән, 30-40 йыл элек төҙөлгән һүҙлектәрҙә һеҙ «интернет», «кәрәҙле телефон», «электрон почтаһы» ише һүҙҙәрҙе таба алмайһығыҙ, сөнки бындай төшөнсәләр ул саҡта булманы.



Минән, Ҡөрьәндән башҡа, күп быуаттар элек яҙылған һәм хата, етешһеҙлектәрҙән азат булған бүтән китап юҡ. Миндә тупланған ғилем – барса барлыҡты ғилеме менән солғап алған Аллаһтан, шуға күрә мин фәндәрҙән һәр саҡ алда барам, уларға юл күрһәтәм. Үҙ сиратында ғалимдарҙың иң зирәктәре миндәге хәҡиҡәттәрҙе яйлап һиҙемләй, күрә ала.

***Кешелек Ҡиәмәткә ҡәҙәр миндә йәшеренгән хәҡиҡәттәрҙе асырға ынтыласаҡ!***

Ул хәҡиҡәттәр асылған һайын, кешелек хайран ҡала.



Бармаҡ остарығыҙға күҙ төшөрөгөҙ. Ентекләп ҡарағыҙ, күреһегеҙ: улар ҡатмарлы һыҙҙарҙан торған рельефлы биҙәктәр менән ҡапланған. Кешеләргә был «папиляр һыҙыҡтар» әсә ҡарынында уҡ формалаша һәм үлгәс тә юҡҡа сыҡмай. Улар ғүмер буйы үҙгәрешһеҙ ҡала. Бармаҡ эҙҙәре индивидуаль, ерҙә йәшәгән 7 миллиард кешенең бармаҡ эҙҙәре ҡабатланмай. Йәғни һеҙҙеке ише бармаҡ эҙҙәре башҡаларҙа юҡ. Һеҙгә кәҙәр йәшәгән миллиардлаған кешенең бармаҡ эҙҙәре лә бер-береһенә оҡшамаған. Был хәҡиҡәт хаҡында ғалимдар яңы ғына, 60-70 йыл элек кенә белде. Ә бит 1400 йыл элек үк Аллаһу Сүбхәнә үә Тәғәлә Ҡөрьәндә хәбәр иткәйне:

**«Кеше, үлгәс, сереп тарҡалған һөйәктәребеҙҙе бергә йыйып, беҙҙе яңынан терелтә алмаясаҡ, тип уйлаймы? Һис шикһеҙ, уларҙың бармаҡ остарына саҡлы, нисек булған, шулай мөкәммәл итеп, яңынан йыйырға ҡөҙрәтебеҙҙән килә»** (Ҡиәмәт), 3-4).

Беҙҙең Раббыбыҙ, Ҡөҙрәтле Хикмәт эйәһе, кешене нисек юҡтан бар итһә, үлеп юҡҡа сыҡҡандарҙы ла шулай тергеҙәсәге тураһында хәбәр итте.

Миңә, Ҡөрьәнгә, Раббыбыҙ кешеләрҙе наҙанлыҡ ҡараңғылығынан ҡотҡарыуҙы, иман яҡтылығы һәм ғилем юлында етәксе булыуҙы йөкмәтте.

Күккә бағып, иҫәпһеҙ күп йондоҙҙарҙы күрһәләр ҙә, наҙан әҙәмдәрҙең, Аллаһ Үҙ пәйғәмбәре Мөхәммәткә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үәхи индерә башлағансы, улар хаҡында белемдәре булманы. Улар йондоҙҙарға ҡарап күрәҙәлек итте,

бараһы юлдарының йүнәлешен билдәләне.

Аллаһ Тәғәлә йондоҙҙар менән ант итә:

**«Эйе, йондоҙҙарҙың батып һүнгәне менән әйтәм, әгәр һеҙ белһәгеҙ: ысындан да, был бер бөйөк ант»** (Вәҡиға), 75-76).

Бында Аллаһ ант иткән «йондоҙҙарҙың батып һүнгән» урыны – «ҡара упҡын» – арауыҡ һәм ваҡыттағы өлкә, уның тартыу көсө шул ҡәҙәр ҙур, уның эсенә ингән объекттар, хатта яҡтылыҡ тиҙлеге менән хәрәкәт иткәндәре лә, уны ҡалдырып китә алмай.

Астрономдар йыш ҡына алыҫ йыһандан килгән иҫ китмәле энергия тулҡынын теркәй. Был «ҡара упҡындарҙа» һәләк булыусы планета һәм йондоҙҙарҙың шаңдауы булыуы ихтимал. Ерҙән бик күпкә ҙур булған был йондоҙҙар, ғүмерҙәре бөткәс, «ҡара упҡын»ға китә һәм серле «йондоҙҙар зыяратында» юҡҡа сыға.

***Изге Ҡөрьән тәрбиәһен алған иманлылар ике донъяла ла бәхетле буласаҡ.***

Раббығыҙ Ҡөрьәнде йыш уҡыуығыҙҙы теләй. Ул минең аяттарым хаҡында уйланыуығыҙҙы, мин һөйләгән халыҡтарҙың тарихы тураһында уйланыуығыҙҙы һәм нәсихәт алыуығыҙҙы теләй. Ул һеҙҙе киҫәтә:



**«Улар Ҡөрьәнде аңламайҙармы? Әллә уларҙың күңеленә йоҙаҡ һалынғанмы?»** (Мөхәммәд, 24).

Боронғо замандарҙа Ғад һәм Сәмүд ҡәүемдәре йәшәгән. Уларға Һуд һәм Салих пәйғәмбәрҙәр (ғәләйһүмәс-сәләм) ебәрелгән. Залим Нәмруд халҡына Ибраһим пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) ебәрелгән. Ә Муса пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) ҡаты күңелле Фирғәүен ҡулында яфа сиккән Исраил улдарына



(Яҡуп пәйғәмбәр вариҫтарына) ебәрелгән.

Пәйғәмбәрҙәрҙең өгөт-нәсихәтенә ҡарамаҫтан, ул халыҡтарҙың күп өлөшө иман юлына баҫмаған, Хаҡ Тәғәлә ихтыярына ҡаршы сыҡҡан, Илаһи әмерҙәрҙе һәм тыйыуҙарҙы боҙоп, сиктән сыҡҡан. Нәфселәренә буйһоноп, улар кәфер булып ҡалған, мин-минлектәре һәм кирелектәре арҡаһында, Аллаһтың асыуына тарығандар һәм һәләк ителгәндәр: ҡайһыларын ҡурҡыныс ғәрәсәт юҡ иткән, ҡайһыларын ер йотҡан, ҡайһыларын, тулҡын йыуып алып китеп, диңгеҙгә батырған. Танауы аша мейеһенең төбөнә кескәй генә серәкәй үтеп, оло яфаларға дусар ителеп һәләк булған залимдар ҙа булған.

Һәммәһе лә тарихта наҙанлыҡ һәм иманһыҙлыҡ символы рәүешендә тороп ҡалған. Фирғәүен һәм Нәмрудтың яуыҙлыҡтары әле булһа кешеләр телендә: «Фирғәүендәй ғазаплаусы» йәки «Нәмруд име залим» тип һөйләйҙәр.

Шул уҡ ваҡытта Ҡөрьән әмерҙәренә һәм Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) нәсихәттәренә ярашлы йәшәгән оло йөрәкле сәхәбәләр ҙә (раҙыйаллаһу ғәнһүм) булған. Уларҙың һәр береһе кешеләр өсөн юғары әхлаҡ өлгөһө. Уларҙы иҫкә алғанда, беҙ шундай һүҙҙәр өҫтәп ҡуябыҙ: «Раҙыйаллаһу ғәнһүм/Аллаһ унан разый булһын!» Улар – Ислам көмбәҙендә ҡалҡҡан яҡты йондоҙҙар кеүек.

Заманыбыҙҙың иң яҡшы уҡытыусылары, иң данлыҡлы профессорҙары һәм тәрбиәселәре, бергә йыйылып, донъяның иң яҡшы мәктәбендә педагогиканың иң алдынғы методтарын файҙаланып эш итһәләр ҙә, пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) сәхәбәләренә торошло уҡыу-

сыларҙы тәрбиәләй алыр инеме икән?!

***Мин – һоҡланғыс Илаһи сәнғәт әҫәре!***

Мин кешеләргә Ислам ҡанундарын еткерәм, Аллаһты һәм Уның Илсеһен яратҡан иманлыларҙы уйланырға саҡырам.

Уйланығыҙ, кешеләр нисек юҡтан бар булған? Ғаләмдәге тәртип һәм гармонияға иғтибар итегеҙ! Ни өсөн атмосфера осоп юҡҡа сыҡмай? Ни өсөн ер йыл һайын төрлө-төрлө ҡыяҡлы үҫемлектәр, йәшелсәләр һәм емештәр үҫтерә, әммә тупраҡ ярлыланмай һәм уның уңышы бөтмәй!

Был тәртипте ентекләп кем булдырған һәм кем уны һаҡлай? Күреүегеҙсә, Йыһанда һәр нәмә Хаҡ Тәғәләнең барлығы, бөйөклөгө һәм ҡеүәте хаҡында һөйләй.

***Онотмағыҙ, һеҙ был донъяға һынауҙар өсөн килдегеҙ!***

Минең ярҙам менән, Ҡөрьән ярҙамы менән, Аллаһ һеҙҙең был донъяға һынауҙар өсөн килеүегеҙҙе иҫкә төшөрә. Туҙан хәтле генә яҡшылыҡ өсөн дә, туҙан хәтле генә яманлыҡ өсөн дә әжер буласағын белеүегеҙҙе теләй, бер генә ғәмәлегеҙҙең дә



яуапһыҙ ҡалмаясағы хаҡында хәбәр итә, сөнки Ҡиәмәт еткәс, әҙәм ғибәҙәт ҡылған йәки гонаһ ҡылған һәр ер шаһитлыҡ ҡыласаҡ.

Ҡурҡыныс был көн еткәс, ерҙәге бер урын әйтәсәк: «Был ҡол минең өҫтөмдә намаҙ торҙо, Ҡөрьән уҡыны һәм ғилем алды». Ә икенсе урын былай шаһитлыҡ ҡыласаҡ: «Был әҙәм минең өҫтөмдә тороп ғәйбәт сәсте, башҡа кешеләргә яфа килтерҙе».

Әгәр киләсәк тормош булмаһа, беҙҙең был донъяға килеүебеҙҙең мәғәнәһе булмаҫ ине. Мәҫәлән, уҡытыусылар мәктәптә өйгә эш бирмәһә һәм



имтихан алмаһа, уҡыу йылы аҙағында баланың хеҙмәтенә баһа ҡуймаһа, артабан мәктәпкә йөрөүселәр булыр инеме икән?

Шулай уҡ ерҙәге тормошобоҙҙоң төп мәғәнәһе – һынау. Ул имтихандың да һөҙөмтәһе буласаҡ, баһалары ҡуйыласаҡ. Тырыштарҙы ялҡауҙарҙан айырасаҡтар: кемдер киләһе синыфҡа күсәсәк, кемдер күсмәй ҡаласаҡ.

***Һеҙҙе нык һөйгәнгә күрә, Аллаһ Ҡөрьән төшөргән!***

Онотмағыҙ, Аллаһ һеҙҙе ярата! Аллаһты һөйгән ҡолдар булыуығыҙҙы теләй Ул!

Бына ни өсөн Ул мине бәхеткә табан юл күрһәтеүсе итеп ебәрҙе. Ҡөрьәндә ҡушылғандарҙы үтәп, игелекле, шәфҡәтле, миһырбанлы, йомарт һәм тирә-йүндәгеләргә хәстәрле булып, Йәннәткә инеүегеҙҙе теләй Ул, түбән, яман ғәмәлдәрҙән баш тартып, Йәһәннәмдән йыраҡайыуығыҙҙы теләй.

# Как прекрасно разговаривают с нами невидимые создания



Известно ли вам о самых мельчайших представителях царства живой природы? Мы – маленькие живые существа, обитающие повсюду. Многих из нас вы не увидите невооруженным глазом, поэтому ученые-микробиологи, чтобы разглядеть нас, используют микроскопы с многократным увеличением.

Заглянув в линзу микроскопа, они видят нас – очень разных по строению бактерий. Есть среди нас бактерии в форме шара, а есть – как прямые или изогну-



тые палочки, а есть имеющие очень причудливые формы.

По воле нашего Создателя, мы можем быть полезными или вредными для человека, животных, растений и других форм жизни.

Мы, бактерии, состоим всего из одной клетки и получаем пищу из окружающей среды. Большинство из нас живет в человеческом организме, внутри или на поверхности тела. Полезные бактерии, населяющие кишечник людей и животных, помогают правильно переваривать пищу. Бактерии защищают организм от разных болезней. И, наоборот, среди нас, бактерий, есть те, которые способны вызывать опасные инфекционные заболевания – дизентерию, туберкулез, коклюш, холеру, тиф, столбняк, сальмонеллез. Болезнетворные бактерии называют микробами.

Хотя еще в XIX веке французский микробиолог Луи Пастер высказал предположение о возможности разрушения одного микроорганизма – бактерии другим – грибами, но только в 1928 году был открыт первый антибиотик – пенициллин, без которого врачи не могли помочь безнадежно больным людям.

Безгранична Милость нашего Господа, который посылает людям болезни как испытание и посылает им средство исцеления от них. Как во всей вселенной идет нескончаемая борьба добра со злом, так и в царстве невидимых существ одни микроорганизмы помогают человеку в борьбе с вредным воздействием других – микробов и вирусов.

***Вся Вселенная – это демонстрация могущества и искусства Всевышнего Бога!***

Только Всевышний Господь, сотворивший нас, знает наше истинное количество и все

многообразие видов. Ученым удалось изучить только малую часть представителей «царства простейших».

***Ни одно живое существо не сотворено просто так!***

Мы живем с вами в одном мире. Мы облегчаем вашу жизнь и выполняем полезную работу, но вы часто не замечаете этого. Например, если не будет лактобактерий, молоко не превратится в йогурт или кефир.

Микроскопические пылевые клещи являются «спутниками человека». Питаясь отмершими клетками человеческой кожи (а человек теряет до полутора граммов отмерших чешуек кожи ежедневно) и шерстяного ворса пледов, одеял, ковров, мебельной обивки, домашней пылью и т. д., они очищают ваш дом.

Пылевые клещи так многочисленны, что даже на пылинке, которую вы с трудом разглядите, их может проживать до 500 штук.

***Нашему Господу вовсе не трудно сотворить как большое, так и малое!***

Взгляните на эти рисунки! Это наши увеличенные в тысячи крат изображения, получен-



ные с помощью электронных микроскопов. Как у всех живых существ, у нас есть органы передвижения, питания, дыхания, размножения, благодаря чему мы осуществляем свою жизнедеятельность. Только наши органы меньше ваших в миллионы раз. Наша жизнь протекает на таком крошечном пространстве, как острие иглы. Поэтому вы не можете даже представить нашу жизнь, наши потребности и наши функции!

Для Господа нет никакой разницы: сотворить большое или маленькое! Не обращайте внимания на наши крошечные размеры! Мы совершаем такие дела, которые не под силу



людям, даже если они соберутся все вместе. Например, мы, сапрофитные почвенные бактерии и грибки, помогаем разложению органических продуктов, таких как останки животных, перегной и листва, тем самым обогащая почву и выполняя санитарную функцию на земле.

А в Новой Зеландии в горячей земле вблизи геотермальной зоны ученые обнаружили ранее неизвестный вид бактерий, которые питаются метаном. Это открытие помогло им разгадать одну из самых больших загадок геотермальной зоны Хеллс Гейтс: здесь под землей образуются большие массы метана, которые однако не выходят на поверхность. Как считают микробиологи, эти бактерии способны сыграть существенную роль в борьбе человечества с глобальным потеплением.

Представьте себе! Если все ученые соберутся в одном месте и создадут умные машины, смогут ли они совершить ту работу, которую выполняем мы?

***Нас сотворили для служения вам!***

Всевышний Господь сотворил все во вселенной для блага человека. И мы, маленькие невидимые существа, везде, каждое мгновение облегчаем вашу жизнь и служим вам. Даже в создание болезнетворных микробов и вирусов Всевышний Господь вложил глубокую мудрость, которая заключается в напоминании вам о наказании Аллаха. Это предупреждение, чтобы вы не забывали о Всевышнем, жили по Его повелениям, не совершали грехов, чтобы не попасть под Его гнев и наказание.

***Ваше тело – наш дом!***

Как вы знаете, множество бактерий живут в вашем организме. Некоторые из них выпол-

няют полезную и необходимую работу, Например, в вашем кишечнике живет множество бифидобактерий, которые укрепляют ваш иммунитет, повышая сопротивляемость организма многим болезням, помогают пищеварению и делают еще массу нужных вещей.

А те из нас, которые опасны, попадая в человеческий организм, поселяются там и вызывают болезни. Будьте осторожны, не обманывайтесь нашими микроскопическими размерами! Аллах дал нам такую силу, что, хоть мы очень малы, но, попав даже в организм богатыря, можем одолеть его. А ведь мы в миллионы раз меньше него. Случается, что огромный человек умирает, побежденным маленьким вирусом, который с трудом можно разглядеть даже в микроскоп.

Это суровое напоминание человеку о том, чтобы он не слишком возгордился своей силой, способностями и другими достоинствами. Ибо все это дал ему Господь Бог. Настоящее могущество и сила принадлежат только Ему. А Он дает силу и



могущество тому, кому пожелает и столько, сколько пожелает.

Посмотрите, как Священный Коран, чудеса которого одно за другим проявляются с развитием науки, разъясняет наше существование и нашу суть:

**«Мы покажем им Наши знамения по свету и в них самих, пока им не станет ясно, что это есть истина. Неужели не достаточно того, что твой Господь является Свидетелем всякой вещи?»** (сура Разъяснены, 53).

А ведь когда были ниспосланы эти аяты, ни один человек не знал о нашем существовании.



Аллах дал нам такую силу, что, хоть мы очень малы, но, попав даже в организм богатыря, можем одолеть его.

Это и есть чудо Священного Корана.

***Этот изумительный фильм могут смотреть только обладатели верующих сердец!***

Кто знает, сколько тайн хранит в себе эта величественная вселенная? Существует множество миров, созданных Творцом. И, кроме царства бактерий, среди них есть и другие, не видимые вам миры – мир джиннов, мир ангелов…

Знаете ли вы, что каждую дождевую каплю, каждую снежинку спускает на землю отдельный ангел? Кто же тогда, кроме Создателя, может знать об истинном количестве и деяниях ангелов? Вам же не остается ничего другого, как восхищаться этим божественным искусством и могуществом и стараться быть прекрасными рабами Аллаха. Ведь только обладатели верующих сердец могут наблюдать за отражениями Воли и Мудрости Всевышнего Творца в его творениях в этой полной тайн вселенной, проходящими перед глазами, словно кадры удивительного и необыкновенного фильма.

## Күҙгә күренмәгән заттар беҙҙең менән ни ҡәҙәр гүзәл һөйләшә...



Йәнле тәбиғәт батшалығының үтә лә кескәй вәкилдәре хаҡында һеҙ беләһегеҙме икән? Беҙ – һәр ерҙә лә көн итеүсе бәләкәс кенә йән эйәләре. Күптәребеҙҙе ябай күҙ менән күреп булмай, шуға күрә ғалим-микробиологтар, беҙҙе күреү өсөн, күп тапҡыр ҙурайтыусы микроскоптар ҡуллана.

Микроскоп линзаһы аша улар беҙҙе – төҙөлөшө төрлө булған бактерияларҙы күрә. Беҙҙең арала шар һымаҡ бакте-



риялар, тура һәм бөгөлгән таяҡсалар рәүешендәгеләре, ғәжәп ҡыҙыҡлы формалағылары ла бар.

Раббыбыҙ ихтыяры менән, беҙ кеше, хайуандар, үҫемлектәр һәм башҡа йән эйәләре өсөн файҙалы ла, зыянлы ла була алабыҙ.

Беҙ, бактериялар, бер генә күҙәнәктән торабыҙ һәм ризыҡты тирә-яҡ мөхиттән алабыҙ. Күпселегебеҙ кеше организмында йәшәй: тәне эсендә йәки тән тиреһе өҫтөндә. Кешеләрҙең һәм хайуандарҙың эсәктәрендәге файҙалы бактериялар ризыҡты дөрөҫ эшкәртергә ярҙам итә, организмды төрлө ауырыуҙарҙан һаҡлай. Беҙҙең арала дизентерия, туберкулез, быума йүтәл, ваба, тиф, ҡарыштырыу, сальмонеллез ише йоғошло ауырыуҙар тыуҙырырға һәләтле ҡурҡыныс бактериялар ҙа бар. Ауырыу тыуҙырыусы бактерияларҙы «микробтар» тип атайҙар.

XIX быуатта уҡ француз микробиологы Луи Пастер бактерияларҙың ауырыу тыуҙырырға һәләтле булыуы хаҡында әйтһә лә, 1928 йылда ғына ҡаты ауырыуҙарға ҡаршы бик тә кәрәкле тәүге антибиотик – пенициллин эшләнә.

Кешеләргә һынау өсөн ауырыуҙар ебәргән һәм уларҙан ҡотолоу сараларын да бүләк иткән Раббыбыҙҙың Миһырбанлығы сикһеҙ. Ғаләмдә яҡшылыҡ һәм яманлыҡ араһында туҡтауһыҙ алыш барған кеүек, күҙгә күренмәгән заттар батшалығында ла ҡайһы бер микроорганизмдар кешегә микробтар һәм вирустарға ҡаршы торорға ярҙам итә.

***Бөтә Ғаләм Аллаһу Тәғәләнең сикһеҙ Ҡеүәте хаҡында һөйләй!***

Беҙҙе юҡтан бар ҡылған Хаҡ Тәғәләбеҙ генә Үҙе барлыҡҡа

килтергәндәрҙең хәҡиҡи иҫәбен беләләр. Ғалимдар ошоғаса «бер күҙәнәклеләрҙең» бик аҙын ғына өйрәнә алды.

***Бер генә йән эйәһе лә алъюҫыҡҡа барлыҡҡа килмәгән!***

Беҙ һеҙҙең менән бер үк донъяла йәшәйбеҙ. Беҙ һеҙҙең тормошоғоҙҙо еңеләйтәбеҙ, файҙалы эш эшләйбеҙ, ә һеҙ йыш ҡына быға иғтибар ҙа итмәйһегеҙ. Мәҫәлән, әгәр лактобактериялар булмаһа, һөт йогурт йәки кефирға әүерелә алмаҫ ине.

Бәләкәй генә туҙан талпандары - «кешеләрҙең юлдаштары». Кеше тиреһенең кибеп, ҡубып төшкән күҙәнәктәре (ә кешенең көн һайын бер ярым грамм самаһы тиреһе юҡҡа сыға) һәм йөн япмалар, юрғандар, келәмдәр, йорт йыһаздары туҙандары менән туҡланып, улар йортоғоҙҙо таҙарта. Туҙан талпандары шул ҡәҙәр күп һанлы, күҙегеҙгә саҡ-саҡ күренгән туҙанда улар 500 тирәһе булыуы ихтимал.

***Раббыбыҙ ҙурҙы ла, кескәйҙе лә һис ауырлыҡһыҙ барлыҡҡа килтерә ала!***

Һүрәттәргә ҡарағыҙ! Былар электрон микроскоптар ярҙамында беҙҙең меңдәрсә тапҡыр ҙурайтылған һүрәттәребеҙ.



Башҡа тере йән эйәләрендәге һымаҡ, беҙҙең хәрәкәт итеү, ризыҡланыу, тын алыу, үрсеү өсөн кәрәкле ағзаларыбыҙ бар, тик беҙҙең ағзаларыбыҙ һеҙҙекенән миллион тапҡыр бәләкәй. Ғүмеребеҙ энә осондай ғына арауыҡта үтә, шуға күрә һеҙ тормошобоҙҙо, ихтыяждарыбыҙҙы һәм беҙҙең функцияларҙы күҙ алдына ла килтерә алмайһығыҙ!

Ҙурҙы бар ҡыламы, бәләкәйҙеме – Раббыбыҙ өсөн айырма юҡ! Дәүмәлебеҙҙең үтә лә бәләкәйлегенә иғтибар итмәгеҙ! Бөтә әҙәмдәр бергә йыйылып эшләй алмағанды атҡарырға



ҡулыбыҙҙан килә. Мәҫәлән беҙ, тупраҡтағы сапрофит бактериялары һәм үңәҙ бәшмәктәре, хайуан ҡалдыҡтары, тиреҫ һәм япраҡтар ише органик матдәләрҙең сереүенә, шул рәүешле тупраҡты байытыуға булышлыҡ итәбеҙ һәм ерҙең санитары ла булып торабыҙ.

Ә Яңы Зеландиялағы геотермаль зонаға яҡын ҡыҙған ерҙә метан менән туҡланған, бығаса билдәле булмаған бактерияларҙы тапты ғалимдар. Хеллс Гейтс геотермаль зонаһының иң ҡатмарлы йомағын сисергә ярҙам итте ул. Бындағы ер аҫтында бик күп метан массаһы барлыҡҡа килә, әммә ул ер өҫтөнә сыҡмай. Микробиологтар фекере буйынса, был бактериялар кешелектең глобаль йылылыҡҡа ҡаршы көрәшендә мөһим роль уйнауы ихтимал.

Күҙ алдына килтерегеҙ әле! Бөтә ғалимдар бергә йыйылһа һәм аҡыллы машиналар уйлап сығарһа, беҙ атҡарған эште эшләй алыр инеме икән?

***Беҙ һеҙгә хеҙмәт итеү өсөн бар ҡылынғанбыҙ!***

Ғаләмдәге бөтә нәмәне Аллаһ кешегә файҙа өсөн барлыҡҡа килтергән. Беҙ, күҙгә күренмәгән бәләкәй генә йән эйәләре, һеҙҙең тормошоғоҙҙо еңеләйтәбеҙ һәм һеҙгә хеҙмәт итәбеҙ. Хатта ауырыу тыуҙырыусы микроб һәм вирустар барлыҡҡа килтереүҙә лә Аллаһтың хикмәте сағыла – улар Раббыбыҙҙың язаһы хаҡында иҫкәртә. Улар, Аллаһтың асыуына һәм язаһына тарымаҫ өсөн, һәр саҡ Уны иҫтә тотоп, әмеренә буйһоноп йәшәргә кәрәклекте төшөндөрә.

***Һеҙҙең тәнегеҙ – беҙҙең йортобоҙ!***

Белеүегеҙсә, организмығыҙҙа бик күп бактериялар йәшәй. Уларҙың ҡайһы берҙәре файҙалы һәм кәрәкле эште эшләй.

Мәсәлән, эсәктәрегеҙҙә иммунитетығыҙҙы нығытыусы, организмығыҙҙың ауырыуҙарға ҡаршы тороуын көсәйтеүсе, аш һеңдереүгә ярҙам итеүсе һәм башҡа бихисап файҙалы эштәр атҡарыусы бик күп бифидобактериялар йәшәй.

Ә хәүефлеләре, организмығыҙға эләгеп, төрлө ауырыуҙар барлыҡҡа килтерә. Һаҡ булығыҙ, беҙҙең микроскоптан ғына күрерлек дәүмәлебеҙ менән алданмағыҙ! Аллаһ беҙгә шундай көс биргән: остоҡ ҡына булһаҡ та, хатта баһадирҙы еңерлек көсөбөҙ бар беҙҙең. Беҙ әҙмәүерҙәй әҙәмдән миллион тапҡыр бәләкәй, тик микроскопта саҡ-саҡ күренгән вирус уны еңергә, һәләк итергә һәләтле.

Кеше көсө, һәләттәре менән һауаланып китмәһен өсөн, ҡаты кисәтеү был. Уларҙы һеҙгә Аллаһ биргән. Хәҡиҡи Көс-Ҡеүәт Унда ғына, һәм көстө, ҡеүәтте, һәләттәрҙе Ул кемгә теләй, шуға бирә.

Фәндәр үсешкән һайын, мөғжизәләренең асылына төшөндөргән Изге Ҡөрьән йәшәйешебеҙҙе бына нисек аңлатып бирә:

**«Йыраҡта йәшәүсе халыҡтарға һәм үҙ кәүемдәре**



**араһында ла аяттарыбыҙҙы күрһәтәбеҙ, уның (Ҡөрьәндең) ысын икәнен (Аллаһтан индерелгәнен) яҡшы белһендәр өсөн. Раббыңдың һәр нимәгә шаһит булғанлығы етмәçме?»** (Фуссиләт (Аңлатылды), 53).

Был аяттар төшөрөлгәндә, бер әҙәм дә беҙҙең барлыҡты белмәне. Изге Ҡөрьән мөғжизәһе ошо була ла инде.

***Иман тулы йөрәктәр генә был һоҡланғыс фильмды күрә ала!***

Мөһабәт ғаләм күпме серҙәр һаҡлауын кем белә ала?! Хаҡ Тәғәләбеҙ барлыҡҡа килтергән бихисап донъялар бар. Бактери-



Аллаһ беҙгә шундай күҫ биргән: остоҡ кына булһаҡ та, хатта баһадирҙы еңерлек көсөбөҙ бар беҙҙең.

ялар батшалығынан тыш һеҙгә күренмәгән ендәр, фәрештәләр донъяһы ла бар.

Һәр ямғыр тамсыһын, һәр ҡар бөртөгөн айырым фәрештә төшөрөүен беләһегеҙме икән? Раббыбыҙҙан башҡа фәрештәләрҙең хәҡиҡи иҫәбе һәм ғәмәлдәре хаҡында кем белә алһын? Илаһи сәнғәт һәм ҡеүәткә һоҡланып, Аллаһтың гүзәл ҡолдары булырға ғына ҡала һеҙгә. Иманлы йөрәктәр генә ғәжәйеп фильм кадрҙары ише Аллаһу Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең Ихтыяры һәм Хикмәте сағылыш тапҡан серҙәр тулы ғаләмдәге ижадты күҙәтергә һәләтле.

# Как прекрасно разговаривают с нами рыбы



Мы – рыбы, живущие в бескрайних водных просторах. Огромные океаны, синие моря, глубокие реки, чистые озера и пруды являются нашей родиной.

Удивительный и загадочный подводный мир отличается от земных пейзажей, хотя и здесь, так же как на земле, есть горы, впадины, пещеры, долины, густые леса и необыкновенные «цветы». На отмелях заросли водорослей напоминают леса и луга. Это пастбища для нас, рыб.

Яркие краски, замысловатые узоры, диковинные кораллы, пещеры и гроты, а еще остатки затонувших кораблей… Кто не мечтал опуститься в морские глубины, чтобы исследовать этот прекрасный и загадочный мир?!

Кроме нас в океане обитают сотни тысяч видов удивитель-



ных живых существ: морские звезды, морские коньки, медузы, кальмары, осьминоги, креветки, мидии. Но есть и такие, которых можно встретить на земле, – например, морские змеи и черепахи. Есть здесь и кровожадные хищники – акулы, чувствующие свою добычу за несколько метров.

Наш Господь каждого из нас поместил в определенные условия и, будучи бесконечно милостив к нам, наделил особыми свойствами, чтобы мы могли обитать именно в этих условиях. Например, одни из нас приспособлены жить в пресной, другие – в соленой воде, одни обитают в теплых, другие – в холодных водах. Каждый из нас обитает только в подходящих ему условиях. Так пресноводные рыбы не могут существовать в морской воде, а холодноводные – в теплой воде. Одни живут несколько месяцев, другие – много лет.

Короче всего жизнь маленькой рыбки цинолебиас, обитающей в Южной Америке, которая живет всего 6 месяцев. Долгожителями среди рыб считаются щука и белуга, которые могут дожить до столетнего возраста.

Всевышний Творец создал более 25 000 видов разнообразных рыб. Среди нас есть необыкновенно красивые создания, а есть безобразные, – как желеобразная рыба-капля, или внушающие ужас, – как 2-метровый европейский удильщик. Есть среди нас удивительные «стеклянные» рыбки, сквозь прозрачное тело которых видны их внутренние органы. Самые маленькие из нас, например, карликовый бычок, имеют длину всего 1 см, а самые большие, как например, китовая акула, достигают 12,5 м в длину и 7 м в ширину. Каждый из нас – это произведение нашего Создателя, демонстрирующее

Каждый из нас обитает только в подходящих ему условиях, так пресноводные рыбы не могут существовать в морской воде, а холодноводные – в теплой воде.

Его могущество и искусство творения.

Жизнь в океане интересна тем, что обитатели различных глубин находятся в неодинаковых условиях. Так, мелководье у берегов называют литоральной зоной. Здесь волнения воды, приливы и отливы – обычные явления. Поэтому живые организмы, живущие здесь, приспособлены к постоянной смене воздушной и водной среды обитания, колебаниям температуры, изменению концентрации соли в воде и ударам прибоя. Чтобы выжить в этих условиях, моллюски прочно закрепляются на скалах, крабы удерживаются цепкими клешнями, рыбы имеют специальные присоски. А креветки и морские звезды умеют закапываться в грунт.

Далее – батиальная зона, которая охватывает слой от глубины 200 м до 2000 м. Растительный мир этой зоны очень беден, ведь сюда не доходят солнечные



лучи. Зато мы, рыбы, обитаем здесь в большом количестве. На глубинах более двух км располагается самая глубоководная – абиссальная зона. Здесь стабильно низкая температура (0°-5°C), высокая соленость воды (35%), нет большого течения. По милости нашего Создателя, на огромных океанских глубинах жизнь его обитателей оказалась приспособленной к полному отсутствию солнечного света, огромному давлению, низкому содержанию кислорода и скудной пище. Животный мир здесь весьма необычен. Тела у животных нежные и хрупкие. Многие виды имеют длинные придатки, чтобы передвигаться, опираясь о вязкий грунт. Так



как жизнь обитателей абиссальной зоны проходит в кромешной тьме, то одни из них имеют огромные глаза, а у других они полностью отсутствуют. У них отлично развиты осязательные органы, которые, словно антенны, торчат в разные стороны. Некоторые организмы способны светиться. Здесь живут наши глубоководные собратья – светящиеся рыбы, имеющие железы-фонари – фотофоры, которые могут быть расположены в разных местах их тела: на голове, вокруг рта или глаз, на усиках, на спине, по бокам или на отростках. Фотофоры заполнены слизью со светящимися биолюминесцентными бактериями. Например, придонная галатеатаума имеет световую «приманку» у себя во рту. Она не «утруждает» себя охотой, ведь ей достаточно открыть рот и проглотить заплывшую в него «на огонек» добычу.

Приспособленные для обитания на огромной глубине рыбы не могут подняться в верхние слои. У адаптированных к огромному давлению глубоководных рыб скелет и мускулатура развиты слабо. За счет проницаемости внутренних тканей и тела рыбы их внутреннее давление уравнено с давлением внешней среды. Поэтому при быстром подъеме на поверхность их тело раздуется, внутренности выйдут наружу.

Всевышний Господь создал нас для жизни в воде и сделал наше строение и физиологические функции приспособленным к этой среде. Большинство из нас покрыты чешуей, которая, подобно панцирю, защищает нас от повреждений, проникновения микроорганизмов, придает телу упругость, обеспечивает большую скорость движения.

Чешуя в сочетании с кожными слизистыми железами спасает нас от зубов хищника. Вы же знаете, как трудно удержать в руках пойманную рыбку, кото-

рая выскальзывает из ваших рук! Секрет этого – в слизистых железах. Даже при легком надавливании на тело рыбы разрываются верхние слизистые клетки. А если надавить сильнее, то слизи выделится еще больше, и хищнику будет труднее удержать свою скользкую добычу.

Чтобы мы могли ориентироваться в окружающем пространстве, Всевышний Создатель наделил нас органами чувств – зрением, обонянием, осязанием, слухом. Роль зрения для подводных жителей чрезвычайно важна. Благодаря тому, что наши глаза расположены по бокам головы и немного выступают над поверхностью тела, мы, не поворачиваясь, можем видеть каждым глазом не только то, что впереди, но и то, что по сторонам, и даже – позади нас. Хищникам зрение помогает найти добычу. А беззащитным травоядным рыбам оно необходимо, чтобы находить пропитание и, заметив опасность, не стать добычей хищника.

Мы постоянно беззвучно благодарим Аллаха за то, что Он наделил нас столькими милостями, благодаря которым мы и тысячи других живых существ



можем жить в своих местах обитания.

Например, вы задумывались, как наши сородичи, обитающие в северных морях, такие как пикша, морской окунь, треска, не мерзнут в холодных водах, когда даже моря замерзают и все вокруг покрывается льдом? Этого не происходит благодаря проявлению таких Прекрасных Имен Аллаха, как «аль-Бари» (Создающий без изъянов) и «аль-Бади’» (Создающий наилучшим образом). Он каждому живому существу придал свои специфические особенности. Так, Он дал полярным видам рыб способность вырабатывать гликопротеин – особый белок крови, который во много раз



замедляет процесс замерзания жидкости в клетках. По Своей Милости Господь сделал так, что лед образуется в верхних слоях морей и океанов, а в морских глубинах, где обитают рыбы, вода не замерзает.

Представьте себе, в морях, озерах и реках живет неисчислимое количество самых разных рыб. Кто дает им пропитание? Тысячи лет крупные рыбы поедают маленьких, но при этом маленькие рыбы не исчезают, а крупные не перенаселяют океаны. Люди съедают более 300 тыс. тонн рыбы ежедневно, но при этом запасы ее не иссякают.

Господь Бог дал вам превосходство над другими созданиями, наделив разумом и волей. Но когда человек использует эти божественные блага не для добра, а во зло, то несет огромную угрозу всему созданному. Удивительно, что воду, без которой человек не проживет и дня, активно загрязняет именно он. Варварское использование водных ресурсов приводит к загрязнению океана отходами, отравлению среды нашего обитания, гибели миллионов обитателей морей и океанов. Всевышний Господь превознес человека над мирами, но тем самым возложил на него ответственность за сохранность благ, данных ему во временное пользование. Каждый из вас может внести свой вклад в дело защиты океанов. Вы можете больше узнавать о жизни морей и океанов, читая книги, журналы, просматривая документальные фильмы. Вы можете поддерживать организации, занимающиеся спасением морей и океанов, озер и рек. Вы можете сдавать на повторную переработку пластик, стекло и бумагу. Бывая на море, озере, реке позаботьтесь, чтобы не загрязнять их и не причинять ущерб их животному и растительному миру.

Если вы будете милостивы к нам, то Господь Бог проявит Свою милость к вам, да будет на то Его Воля!

## Балыктар беҙҙең менән ни ҡәҙәр гүзәл һөйләшә...



Беҙ – йәйрәп ятҡан һыуҙарҙа йәшәүсе балыктар. Ғәләмәт ҙур океандар, күк диңгеҙҙәр, тәрән йылғалар, таҙа күлдәр һәм быуалар – беҙҙең ватан.

Ерҙәге һымаҡ бында ла тауҙар, упҡындар, мәмерйәләр, үҙәндәр, ҡуйы урмандар һәм иҫ киткес «сәскәләр» булһа ла, ғәжәйеп һәм серле һыу аҫты донъяһы ер пейзажынынан айырыла. Һайлыктағы ылымыҡтар ҡуйы урман, болондарҙы хәтерләтә, улар - балыҡтарҙың көтөүлеге.

Сағыу төҫтәр, хикмәтле биҙәктәр, иҫ киткес мәрйендәр, мәмерйә һәм мәғәрәләр, батҡан караптарҙың ҡалдыҡтары... Был гүзәл һәм серле донъяны өйрәнеү өсөн, кемдәр генә диңгеҙ



төптәренә төшөргә хыяллан-
маған?!

Океанда беҙҙән тыш йөҙҙәрсә меӊ төрлө ғәжәйеп йән эйәләре йәшәй: диӊгеҙ йондоҙҙары, ат-баш балыҡтар, медузалар, кальмарҙар, һигеҙаяҡтар, ҡыҫалалар... Ерҙә лә күреү мөмкин булған йылан һәм ташбаҡалар ҙа бар диӊгеҙҙә. Акула ише, табышын әллә нисә метрҙан тойған ҡанэскес йыртҡыстар ҙа йәшәй.

Сикһеҙ миһырбанлы Раббыбыҙ, беҙҙе билдәле шарттарға урынлаштырып, шул шарттарға яраҡлашырлыҡ сифаттар ҙа биргән. Мәҫәлән, берәүҙәребеҙ сөсө һыуҙа йәшәүгә ҡулайлашҡан, икенселәребеҙ – тоҙло һыуҙа, ҡайһыларыбыҙ йылы һыуҙа көн күрә, ҡайһыларыбыҙ - һалҡын һыуҙа. Һәр беребеҙ үҙенә тап килгән шарттарҙа йәшәй. Әйтәйек, сөсө һыуҙа көн иткән балыҡтар диӊгеҙ һыуында йәшәй алмай, һалҡынға ҡулайлашҡандары йылы һыуҙа. Берәүҙәребеҙгә бер нисә айлыҡ ҡына ғүмер бирелгән, икенселәребеҙ бик оҙаҡ йәшәй.

Көньяҡ Американа көн күргән кескәй генә цинолебиастарҙыӊ ғүмере ҡыҫҡа – 6 ай ғына. Суртан һәм ҡырпа йөҙ йәшкә етеүе лә ихтимал.

Аллаһу Тәғәлә балыҡтарҙыӊ 25 меӊдән ашыу төрөн барлыҡҡа килтергән. Арабыҙҙа иҫ киткес гүзәл балыҡтар ҙа, желе кеүек имәнес тамсы-балыҡтар ҙа, ҡотто алырлыҡ ике метрлы Европа ҡармаҡсылары ла бар. Үтә күренмәле тәне аша бөтә эске ағзалары күренеп торған «быяла» балыҡтар ҙа бар. Иӊ бәләкәй балыҡ - кәрлә ташбаштыӊ оҙонлоғо 1 см, ә иӊ ҙур кит акулаһыныӊ оҙонлоғо 12,5 метрға, киӊлеге 7 метрға етә. Һәр беребеҙ – Сикһеҙ Ҡөҙрәт Эйәһе булған Хаҡ Тәғәләбеҙҙеӊ ижад емеше.

Океандағы тормош шул яғы менән ҡыҙыҡлы: төрлө тәрәнлеккә ҡулайлашҡан балыҡтарҙыӊ

Ерәүҙәребеҙ сөсө һыуҙа йәшәүгә ҡулайлашҡан, икенселәребеҙ – тоҙло һыуҙа, ҡайһыларыбыҙ йылы һыуҙа көн күрә, ҡайһыларыбыҙ - һалҡын һыуҙа.



тормоштары ла төрлөсә. Яр буйындағы һайлыҡ «литораль зона» тип атала. Бында тулҡындар, һыу күтәрелеүе, һыу ҡайтыуы – ғәҙәти күренеш, шуға ошонда йәшәгән тере йән эйәләре үҙ төйәктәрендәге һауа, һыу алмашынып тороуға, температура һәм һыуҙағы тоҙ миҡдары үҙгәреүенә, бәрмә тулҡындарға яҡшы күнеккән. Ошо шарттарҙа иҫән ҡалыр өсөн, моллюскылар ҡаяларға ныҡ итеп йәбешә, диңгеҙ ҡыҫалалары ҡыҫҡыстарын эшкә ҡуша, балыҡтарҙың да махсус һурғыстары бар. Ә диңгеҙ ҡыҫалалары һәм диңгеҙ йондоҙҙары һыу төбөн соҡоп инеп ята белә.

Артабан – 200-2000 метрҙағы тәрәнлекте үҙ эсенә алған батиаль зона башлана. Был зонаның үҫемлектәр донъяһы ярлы, сөнки бында ҡояш нурҙары килеп етмәй. Уның байы беҙ, балыҡтар, бында күпләп көн итәбеҙ.

2 километрҙан ары иң тәрән зона - абиссаль зона. Бында һауа температураһы һәр саҡ түбән ($0^{o}$-$5^{o}$C), һыуҙағы тоҙҙарҙың миҡдары ла юғары (35%), көслө ағымдар юҡ. Раббыбыҙҙың шәфҡәте менән, океан тәрәнлегеген төйәк итеүселәр ҡараңғылыҡҡа, көслө баҫымға, кислородтың һәм ризыҡтың үтә лә әҙ булыуына яҡшы яраҡлашҡан.

Хайуандар донъяһы ла бында үҙенсәлекле: хайуандарҙың тәндәре йомшаҡ һәм нескә, күптәренең һыу төбөнә таянып ҡуҙғалып йөрөү өсөн оҙон өҫтәмә ағзаһы бар. Абис-



саль зонаны төйәк иткәндәр дөм ҡараңғыла көн иткәнлектән, ҡайһыларының күҙе уғата ҙур, ҡайһыларының күҙе бөтөнләй юҡ. Уның урынына уларҙың һиҙеү органдары яҡшы үҫешкән, улар антенналар ише төрлө яҡҡа тырпайып тора.

Ҡайһы бер организмдар яҡтылыҡ һибеп торорға һәләтле. Бик тәрәндә фотофоралар - фонарь-биҙҙәре булған яҡтылыҡ таратыусы туғандарыбыҙ йәшәй, ул биҙҙәр тәндәренең төрлө урынында: башында ла, ауыҙ йәки күҙ, мыйыҡтары тирәһендә лә, арҡаһында, ҡабырғаларында, өҫтәмә ағзаларында булыуы ла ихтимал. Фотофоралар яҡтылыҡ һибеүсе биолюминесцент бактериялы лайла менән тулған. Мәҫәлән, һыу төбөндәге галатеатауманың ауыҙында яҡтылыҡ алдатҡысы бар. Ул һунар итеп йонсомай, ауыҙын асыуы була - яҡтылыҡҡа ҡыҙығып, табыш үҙе үк килеп инә.

Ныҡ тәрәндә йәшәүгә ҡулайлашҡан балыҡтар өҫкә күтәрелә алмай - көслө баҫымға күнеккән балыҡтарҙың һөлдәһе һәм мускулатураһы насар үҫешкән. Балыҡтарҙың эске туҡымаларының һәм тәненең үткәреүсәнлеге арҡаһында, улар эсендәге баҫым тирә-яҡ мөхит баҫымы менән тап килә, шуға өҫкә шәп күтәрелгән сүрәттә, тәндәре шартлап, эске ағзалары тышҡа сығасаҡ.

Хаҡ Тәғәләбеҙ, беҙҙе һыуҙа йәшәүгә тәғәйенләп, төҙөлөшөбөҙҙө һәм физиологик функцияларыбыҙҙы шул мөхиткә ҡулайлаштырған. Күптәребеҙ тәңкә менән ҡапланған, улар панцирь һымаҡ, беҙҙе зарарланыуҙан, микроорганизмдар үтеп инеүҙән һаҡлай, тәнгә һығылмалылыҡ бирә, хәрәкәт тиҙлеген арттыра.

Тәңкәләр һәм тиреләге лайлалы биҙҙәр йыртҡыстар тешенән һаҡлай. Тотҡан балыҡтың ҡулдан шыуып төшөп китергә генә

торғанын бик яҡшы беләһегеҙ бит! Бының сере – лайлалы биҙҙәрҙә. Балыҡ тәненә ҡулыңды еңелсә батырһаң, уның өҫкө лайлалы күҙәнәктәре йыртылып китә. Ә нығыраҡ батырһаң, лайла күберәк бүленеп сыға, йыртҡысҡа шыуғалаҡ табышын тотоп ҡалыу ауырлаша.

Тирә-яҡ мөхиттә кәрәкле йүнәлеште табыу өсөн, Раббыбыҙ беҙгә күҙ, еҫ һиҙеү, тойоу, ишетеү ағзалары биргән. Күреү һәләте һыу аҫтында йәшәүселәр өсөн ифрат та мөһим. Күҙҙәребеҙ баштың ике ҡырында булып, бер аҙ тышҡа сығып торғанлыҡтан, беҙ алдағы нәмәләрҙе генә түгел, тирә-йүндәге, хатта арттағы нәмәләрҙе лә күрә алабыҙ. Күҙ йыртҡыстарға табышын эҙәрлекләп тоторға ярҙам итә, ә ылымыҡтар менән түкләнеүсе балыҡтарға ризыҡ табырға, йыртҡысты күреп, хәүефтән ҡасырға ярҙам итә.

Рәхмәттәребеҙҙе беҙгә иҫәпһеҙ бәрәкәттәрен һәм һәммәбеҙгә йәшәү өсөн төйәк биргән Аллаһҡа өнһөҙ рәүештә даимән белдереп торабыҙ. Мәҫәлән, төньяҡ диңгеҙҙәрҙә көн күргән пикша, диңгеҙ алабуғаһы, тәрәс кеүек туғандарыбыҙ хатта диңгеҙҙәр туңып, бөтә нәмә боҙ менән ҡапланғанда ла туңмауына аптырамайһығыҙмы?



Раббыбыҙҙың «әл-Бәәри» (Кәмселекһеҙ Яралтыусы) һәм «әл-Бадиғ» (Ғаләмде иң гүзәл үә оҡшашы булмаған рәүештә Яралтыусы) сифаттарының сағылышы был. Ул һәр бер йән эйәһенә үҙенә генә хас үҙенсәлектәр биргән. Балыҡтарҙың поляр төрөнә Ул гликопротеин – ҡандарында күҙәнәктәрҙәге шыйыҡлыҡтың туңыуын бик күпкә кәметеүсе махсус аҡһым эшләп сығарыу һәләтен биргән. Раббыбыҙ Үҙенең сикһеҙ шәфҡәте менән шулай ҡылған: боҙ диңгеҙ һәм океандарҙың өҫкө өлөшөндә генә барлыҡҡа килә, ә төптәрәк, балыҡтар йәшәгән урында, һыу туңмай.



Уйлап ҡарағыҙ әле, диңгеҙҙәрҙә, күлдәрҙә һәм йылғаларҙа төрлө-төрлө иҫәпһеҙ күп балыҡтар йәшәй. Кем уларға ризыҡ бирә? Меңдәрсә йыл буйы эре балыҡтар ваҡтары менән туҡлана, әммә ваҡ балыҡтар юҡҡа сыҡмай, ә эреләре артыҡ күбәйеп китмәй. Кешеләр көн һайын 300 мең тоннанан ашыу балыҡ ашай, тик балыҡтар бөтмәй.

Хаҡ Тәғәләбеҙ, һеҙгә аҡыл һәм ихтыяр биреп, башҡа йән эйәләренән өҫтөн ҡылған. Әгәр кеше Илаһи бәрәкәттәрҙе изгелек өсөн түгел, яманлыҡ өсөн файҙалана икән, ул бөтә барлыҡҡа хәүеф тыуҙыра. Шуныһы ғәжәп: әҙәм бер көн дә һыуһыҙ тора алмай, ләкин тап ул һыуҙарҙы бысрата. Һыу ятҡылыҡтарын вәхшиҙәрсә файҙаланыу арҡаһында, океандар бысрана, беҙ көн иткән мөхит ағыулана, диңгеҙ һәм океандарҙа йәшәүселәр күпләп ҡырыла.

Хаҡ Тәғәләбеҙ, кешене өҫтөн ҡылып, ваҡытлыса бирелгән бәрәкәттәр өсөн яуаплы ла итеп ҡуйған. Һеҙҙең һәр берегеҙ океандарҙы яҡлауға үҙ өлөшөн индерә ала. Диңгеҙ һәм океандарҙағы тормош хаҡында китап, журналдар, документаль фильмдар аша белә алаһығыҙ. Һеҙ диңгеҙ, океан, күл, йылғаларҙы һаҡлау менән шөғөлләнгән ойошмаларға булыша алаһығыҙ. Һеҙ пластик, быяла һәм ҡағыҙҙарҙы йыйып, ҡайтанан эшкәртеүгә тапшыра алаһығыҙ. Диңгеҙ, күл, йылға буйҙарында булғанда, уларҙы бысратмаҫҡа, улар тирәһендәге хайуандар һәм үҫемлектәр донъяһына зыян һалмаҫҡа тырышығыҙ. Әгәр һеҙ беҙгә шәфҡәтле булһағыҙ, ин шәә Аллаһ, Раббыбыҙ ҙа һеҙгә шәфҡәтле булыр!

# Как прекрасно разговаривают с нами птицы



Я – маленькая птичка королек. С ранней весны в хвойных лесах можно слышать мою негромкую, но очень красивую песенку. Каждый, кто вслушается в мои мелодичные трели, услышит и поймет их по-разному, в зависимости от состояния своего сердца. Одному послышится лишь беззаботное щебетание, а другой различит в моей песенке «Ля-иляха илля-Ллах!» (Нет бога кроме Аллаха!)

Забавно, но долгое время люди не могли понять, чья же это песенка доносится откуда-то сверху. А все потому, что я настолько маленький, что меня трудно заметить в кронах деревьев. Мои размеры всего 8-10 сантиметров, а вес – 10 грамм. За мои крошечные раз-



Как вы проявляете свою покорность и любовь к Аллаху через чтение Корана и совершение намаза, так и мы поклоняемся Аллаху посредством своего пения, полета и всего образа жизни.

меры меня даже называют «северным колибри».

А вам какая птица нравится больше всего? Может, павлин? Кроме него ни одна птица в природе не имеет такого роскошного оперения, которое так красочно описал поэт Г.Р. Державин:

*...Лазурно-сизы-бирюзовы*
*На каждого конце пера,*
*Тенисты круги, волны новы*
*Струиста злата и сребра:*
*Наклонит – изумруды блещут!*
*Повернет– яхонты горят!..*

Или вам нравятся яркие забавные попугаи, прирученные людьми и умеющие подражать их речи? А может стремительные, как черные молнии, ласточки или загадочные аисты, о которых сложено много сказок и легенд? Ястребы и орлы, парящие в синеве неба, подобно планерам? Белоснежные чайки, неразделимые с морем? Грациозные лебеди, которых считают символом красоты, чистоты и благородства? Или непревзойденный певец наших лесов и рощ – соловей? Все они, как и я, никогда не забывают своего Создателя, поминают и восхваляют Его. Об этом наш Господь говорит в Священном Коране:

**«Разве ты не видел, что Аллаха славят те, кто на небесах и на земле, а также птицы с распростертыми крыльями? Каждый знает свою молитву и свое славословие. Аллах знает о том, что они совершают»** (сура Свет, 41).

Каждый прославляет Господа на своем, доступном ему языке. Как вы проявляете свою покорность и любовь к Аллаху

через чтение Корана и совершение намаза, так и мы поклоняемся Аллаху посредством своего пения, полета и всего образа жизни. Но часто вам трудно это понять.

Пророк Сулейман/Соломон (мир ему) лучше всех из людей понимал язык и состояния животных и птиц, потому что Всевышний Господь наделил его такой способностью. Одного из наших собратьев, удода, он взял себе на службу. Когда пророк Сулейман выходил в поход, удод летел впереди и сообщал ему обо всем, что видел.

Мы, возможно, маленькие хрупкие существа, но, если наш Господь пожелает, то даст нам огромную силу. И тогда не будет такого дела, которое бы мы не смогли сделать. Незадолго до рождения пророка Мухаммада (мир ему и благословение) наши собратья, маленькие птицы Абабиль спасли Каабу, которую пришло разрушить войско правителя Абрахи. Несметная стая птиц Абабиль появилась, подобно огромной черной туче, заслонившей небосвод. Каждая из них несла в лапках кусочек обожженной глины из Ада размером с горошину. Настигнув войско Абрахи, птицы отпускали камни, и они стремительно,



со свистом, летели на головы солдат. Словно пули, они поражали их, прошивая насквозь. Солдаты падали замертво. Так маленькие птички Абабиль разгромили огромную хорошо вооруженную армию, в рядах которой были лучники, конники и даже боевые слоны...

В нашем пении, оживляющем весной и летом леса и поля, свободном полете в небесной синеве испокон веков черпали вдохновение поэты, певцы, музыканты, художники. *«Отчего люди не летают, как птицы?»* Наверное, любому человеку знакомо ощущение полета. Мы слышали, что все люди в детстве летают во сне. А



потом им всю жизнь не хватает этого ощущения.

Извечная мечта человека к полету воплотилась в изобретении самолета, а конструкция самолета была вдохновлена устройством тела птиц. У самолета, как и у птицы, есть крылья, корпус, нос, хвост и ноги (шасси) для движения по земле. Ученые подробно изучают строение птичьего тела и крыла, чтобы придать подобные аэродинамические характеристики своим летательным аппаратам.

Вы знаете, как устроено крыло птицы? Оно покрыто маховыми и кроющими перьями, образующими легкую и гибкую аэродинамическую поверхность. Сплошное крыло птицы в полете становится многощелевым, имеющим большой коэффициент подъемной силы. Конструкция щелевого крыла некоторых типов самолетов заимствована человеком у птиц.

Для полета любого аппарата нужна подъемная сила и сила тяги. Они также нужны и для полета птицы. У самолета эти силы создаются раздельно: подъемная сила – крыльями, а тяга – двигателем. У птицы же подъемная сила и тяга создаются одним органом – машущими крыльями.

Но, несмотря на все свои превосходные качества, мы не проявляем гордыни, так как свои достоинства мы получили в дар от нашего Создателя. Мы благодарим и восхваляем Всевышнего Творца за то, что Он так прекрасно создал нас и внушил людям хорошее отношение к нам.

Мир птиц очень многообразен и многочислен. Мы все – от самого большого среди нас – страуса, рост которого достигает 2,7 м, а вес – 175 кг, до крошечного колибри-пчелки, имеющего длину всего 5,7 см, а вес 1,6 г – постоянно находимся в поклонении Господу, которое

состоит в нашей покорности и безропотном выполнении возложенных на нас обязанностей.

Утром мы голодными покидаем свои гнезда. Наполнив зобы пищей, предопределенной нам Аллахом, мы вечером сытыми возвращаемся домой.

Мы очень трудолюбивы и терпеливы. Мы просыпаемся до восхода солнца и весь день проводим в заботах о пропитании для себя и своих птенцов, мы спасаем деревья и посевы от вредителей и радуем вас своим прекрасным пением, льющимся из наших маленьких сердечек, каждый миг восхваляя и благодаря нашего Господа. Мы уповаем только на Аллаха, и Он наделяет нас всем необходимым. Каким прекрасным примером являемся мы для людей, которые причиняют друг другу вред и страдания от зависти и алчности. Ведь в хадисе от нашего Пророка (мир ему и благословение) сказано:

***«Если бы вы уповали на Аллаха истинным упованием, то Он напитал бы вас так, как дает пропитание птицам, которые улетают утром голодными, а вечером возвращаются сытыми»*** («Сунану Тирмизи», № 2344, 4/573).



Поистине, Господь Бог больше заботится о нас, чем мы о себе. Его мощи хватит на все. Если мы будем полагаться на Него и молиться Ему, Он даст нам силу, благодаря которой мы сможем преодолеть любые трудности. Я – маленький певчий королек, но сила моя в том, что мое крошечное сердечко постоянно трепещет, находясь в страхе перед могуществом Аллаха, сотворившем меня, давшем мне жизнь и неотрывно наблюдающим за мной, и надеждой на Его милость.

## Коштар беҙҙең менән ни кәҙәр гүзәл һөйләшә...



Мин – кәрлә турғай. Иртә яҙҙан уҡ ылыҫлы урмандарҙа минең һаҡ, әммә һоҡланғыс йырымды ишетергә мөмкин. Күңел торошона ҡарап, һәр кем моңло көйөмдө үҙенсә аңлай. Берәүгә мин ғәмһеҙ сырҡылдап йөрөйөм һымаҡ, ә икенсе берәү минең йырымда «Лә-иләһә иллә-Лаһ!» һүҙҙәрен ишетә.

Көлкө, оҙаҡ ваҡыт кешеләр ҡайҙандыр өҫтән килгән йыр кемдеке икәнлеген аңлай алмай яфаланды. Ә эш шунда: ағастар араһында мине күреү еңел түгел. Дәүмәлем 8-10 сантиметр ғына, ауырлығым ни бары 10 грамм. Уғата кескәй булыуым сәбәпле, мине «төньяҡ колибрийы» тип йөрөтәләр.

Ә һеҙгә ниндәй ҡош нығыраҡ оҡшай? Бәлки, тауистыр? Тәбиғәттә унан башҡа бер коштоң да шундай күркәм

Аллаһҡа күндәмлегегеҙҙе, һөйөүегеҙҙе Ҡөрьән уҡып, намаҙ ҡылып белдергән кеүек, беҙҙең дә йырыбыҙ, осошобоҙ, бөтә тормошобоҙ – Аллаһҡа ғибәҙәт ул.



ҡауырһындары юҡ. Юҡҡа ғына шағир Г.Р. Державин уларҙы шулай тасуирламаған:

...Ҡанат осҡайҙары зәңгәр,

зөмрәт йәшел, күгелйем,

Тулҡынланып баҙрап яна,

Алтын-көмөш емелдәй:

Бер эйелһә – зөбәржәттәр яна!

Бер эйелһә – яҡут ялтырай!..

Бәлки, һеҙгә кешеләр һөйләшергә өйрәткән, үҙе сағыу, үҙе бытылдыҡ тутыйғоштар оҡшайҙыр? Ҡара йәшен кеүек етеҙ ҡарлуғастар йәки байтаҡ әкиәттәрҙә, легендаларҙа һөйләнелгән серле ҡауҙылар күңелегеҙгә яҡын булыуы ла ихтимал. Зәңгәр күкте иңләп осҡан ҡарсығалар, бөркөттәр оҡшаһа ла ғәжәп түгел. Диңгеҙҙәрҙән айырылғыһыҙ ап-аҡ аҡсарлаҡтар оҡшаһа ла аптырамаҫ инем. Матурлыҡ, сафлыҡ һәм нәзәкәтлек символы иҫәпләнгән гүзәл аҡҡоштарҙы ла яратмау мөмкин түгел. Урман, сауҡалыҡтарҙың тиңһеҙ йырсыһы һандуғасмы әллә яратҡан ҡошоғоҙ? Улар һәммәһе лә, минең кеүек, Раббыһын онотмай, иҫенән сығармайынса, гел Уны маҡтап тора. Был хаҡта Хаҡ Тәғәләбеҙ Изге Ҡөрьәндә лә әйтә:

**«Күктәрҙә һәм Ерҙә йәшәгәндәр менән осар ҡоштарҙың, ҡанат ҡаға-ҡаға Аллаһты маҡтап һайрағандарын ишетмәйһеңме ни, күрмәйһеңме ни? Һәр береһе үҙ доғаһын һәм тәсбихен яҡшы өйрәнгән. Аллаһ уларҙың нимә ҡылғандарын яҡшы белеп тора»** (Нур, 41).

Һәр кем Раббыбыҙҙы үҙ телендә, үҙенә бирелгән тел



менән данлай. Аллаһҡа күндәмлегегеҙҙе, һөйөүегеҙҙе Ҡөрьән уҡып, намаҙ ҡылып белдергән кеүек, беҙҙең дә йырыбыҙ, осошобоҙ, бөтә тормошобоҙ – Аллаһҡа ғибәҙәт ул. Әммә һеҙ йыш ҡына быны аңлай алмайһығыҙ.

Сөләймән пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) хайуандар, ҡоштар телен барыһынан да яҡшыраҡ аңлаған, сөнки был һәләттәрҙе уға Хаҡ Тәғәләбеҙ биргән. Беҙҙең бер туғаныбыҙҙы – һөҙһөттө - ул хеҙмәткә лә алған. Сөләймән пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) походҡа сыҡҡанда, һөҙһөт алдан осоп барған һәм күргәндәре хаҡында килеп хәбәр иткән.

Беҙ ҡарамаҡҡа көсһөҙ генә йән эйәләре, әммә Аллаһ теләһә, беҙгә ғәләмәт ҙур көс бирә ала, ул саҡта беҙ булдыра алмаған эш юҡ. Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) тыуырҙан алда бәләкәй генә әбәбил ҡоштары, Әбрахә хаким ғәскәре Ҡәғбәне емерергә ниәтләп килгәндә, уны ҡотҡарып ҡала. Күк көмбәҙен ҡара болот һымаҡ әбәбил ҡоштары ҡаплап ала. Уларҙың һәр берееһенең тәпәйендә борсаҡ ҙурлыҡ ҡына Йәһәннәмдә янған балсыҡ кисәге була. Әбрәхә ғәскәренә килеп еткәс, ҡоштар таштарын ысҡындыра һәм улар көс менән, шыйлап, һуғышсылар башына төшә, пуля һымаҡ уларҙы үтә тишә. Һуғышсылар шунда уҡ йән бирә. Кескәй генә әбәбил ҡоштары уҡсылары, һыбайлылары, хатта һуғыш филдәре булған яҡшы ҡоралланған ғәскәрҙе еңә.

Яҙғы, йәйге айҙарҙа урман, ҡырҙарҙы моңобоҙ менән йәнләндереүебеҙ, зәңгәр күктәрҙе иңләп осоуыбыҙ бик борондан шағирҙарҙы, йырсыларҙы, музыканттарҙы, рәссамдарҙы илһамландырған.

*«Ни өсөн кешеләр ҡоштар һымаҡ осмай икән?»* Моғай-

ын, һәр кемгә лә осош халәте таныштыр. Бала саҡта бик күптәр төштәрендә оса. Аҙаҡ ошо тойғо ғүмер буйы әҙәмде үҙенә тартып тора.

Осошҡа ынтылышы әҙәм балаһын самолеттар уйлап табыуға этәрә, ә самолеттың конструкцияһы - ҡоштар тәне төҙөлөшөнөң үҙенсәлекле күсермәһе. Самолеттарҙың да ҡоштарҙыҡы кеүек ише ҡанаттары, корпусы, мороно, ерҙә йөрөү өсөн аяҡтары (шасси) бар. Оса торған аппараттарҙы шундай уҡ аэродинамик характеристикалар менән тәьмин итеү өсөн, ғалимдар ҡоштар тәне, ҡанаттары төҙөлөшөн ентекләп өйрәнә.

Ҡоштар ҡанаты төҙөлөшөн беләһегеҙме икән? Улар еңел һәм һығылмалы аэродинамик ерлекте барлыҡҡа килтереүсе елпеүсе һәм ҡаймалаусы ҡауырһындар менән ҡапланған. Ҡоштоң тотош ҡанатында осош мәлендә күтәрелеү коэффициенты юғары булған күп һанлы ектәр барлыҡҡа килә. Ҡайһы бер самолеттар ҡанатының екле конструкцияһын кешеләр ҡоштарҙан отҡан.

Осош өсөн һәр аппаратҡа күтәрелеү көсө һәм тартыу көсө кәрәк. Ҡоштар осошо өсөн дә кәрәк ул. Самолетта ул көстәр айырым бүленгән: күтәрелеү



көсө – ҡанаттарға бәйле, ә тартыу көсө – двигателгә. Ҡоштарҙа күтәрелеү һәм тартыу көсөн бер ағза – елпеүсе ҡанаттар тәьмин итә.

Гүзәл сифаттарға эйә булһаҡ та, беҙ һауаланмайбыҙ, сөнки бөтә был яҡшы яҡтарыбыҙҙы беҙгә Раббыбыҙ бүләк иткән. Беҙгә шундай күркәм сифаттар биргән, кешеләрҙең яҡшы мөнәсәбәтен тәьмин иткән Хаҡ Тәғәләбеҙгә рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ һәм Уны данлайбыҙ.

Ҡоштар донъяһы төрлө һәм күп һанлы. Беҙ һәммәбеҙ ҙә – буйы 2,7 метрға, ә ауырлығы 175 килограмға еткән дөйәғоштан алып, оҙонлоғо 5,7 сантиметр, ә ауырлығы 1,6 грамм



ғына булған кескәй генә колибри ҡошсоғона ҡәҙәр Раббыбыҙға ғибәҙәттәбеҙ, үҙебеҙгә йөкмәтелгән бурыстарҙы көндәмлек менән үтәйбеҙ.

Иртән оябыҙҙан ас килеш осоп китәбеҙ. Бөрләтәүҙәребеҙҙе Аллаһ тәғәйенләгән ризыҡ менән тултырып, кисен туҡ килеш кире әйләнеп ҡайтабыҙ.

Беҙ эшсән һәм түҙемле. Беҙ ҡояш ҡалҡҡансы уҡ уянабыҙ һәм көнөбөҙҙө үҙебеҙгә, ҡошсоҡтарыбыҙға ризыҡ эҙләп үткәрәбеҙ, ағастарҙы һәм сәсеүлектәрҙе ҡоротҡостарҙан һаҡлайбыҙ, бәләкәс кенә йөрәктәребеҙҙән ағылған гүзәл моңобоҙ менән һеҙҙе шатландырабыҙ, һәр мәлебеҙҙе Раббыбыҙҙы маҡтап, рәхмәтебеҙҙе белдереп үткәрәбеҙ. Беҙ өмөттәребеҙҙе тик Аллаһҡа ғына бағлайбыҙ һәм Ул кәрәкле булған нәмәләрҙең барыһын да беҙгә бирә. Хөсөтлөк һәм ҡомһоҙлоҡтары арҡаһында бер-береһен яфалаған кешеләр өсөн беҙ гүзәл үрнәк. Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) хәҙисендә әйтелгән бит:

***«Аллаһҡа ысынлап өмөт бағлаһағыҙ, Ул иртән ас килеш осоп китеп, кис туҡ килеш ҡайтҡан ҡоштарҙы ризыҡландырғандай ризыҡландырыр ине»*** («Сунану Тирмиҙи», № 2344, 4/573).

Хаҡтыр, Аллаһ беҙҙең хаҡта үҙебеҙгә ҡарағанда ла нығыраҡ хәстәрлек күрә. Уның Ҡеүәте һәр нимәгә етә. Өмөттәребеҙҙе Уға бағлаһаҡ, Уға ғибәҙәттә булһаҡ, Ул беҙгә бөтә ауырлыҡтарҙы еңерлек көс бирер. Мин – кескәй генә ҡошсоҡ, әммә мине бар ҡылған, миңә ғүмер биргән һәм һәр саҡ мине күҙәтеп торған, шәфҡәтенә өмөт уятҡан Аллаһтың Ҡөҙрәтен танып ҡурҡҡан остоҡ ҡына йөрәгем менән мин көслө.

## Как прекрасно разговаривают с нами деревья…



Всякое дерево – живой организм. Конечно, каждый человек на планете знает, как оно выглядит. Его опорой является одревесневший ствол, от которого отходят сотни, а то и тысячи веток, покрытых листвой или вечнозеленой хвоей. Корни дерева подобны сердцу в организме человека, ведь благодаря им оно черпает силу из почвы. И ими оно крепко держится в земле.

Вот я – обычное дерево, одно из тех, которые во множестве растут в зеленом лесу. Мои соседи – высокие смолистые сосны, белоствольные березки и старый дуплистый дуб, густо заросший у подножия папоротником, синие колокольчики, глазастые ромашки и прячущая под



листиками свои ароматные алые ягодки лесная земляника.

Много лет назад я было всего лишь семечком, которое упало с ветки дерева на землю. Политое дождями, согретое солнышком, я взошло и, набираясь сил, росло-росло и стало большим деревом. Таких деревьев в нашем лесу тысячи, а на всей планете Земля, как подсчитали ученые, нас 3,04 триллиона. Удивительный мир деревьев, созданный Всемогущим Творцом, существует параллельно с человеком миллионы лет и верно служит ему.

Однако люди часто не придают значения этому и не задумываются о том, откуда, например, берется чистый воздух? Люди давно, казалось бы, должны были израсходовать его, отравиться углекислотой, которая образуется при дыхании, выбросах в атмосферу фабрик, заводов, транспорта, гниении органических веществ. Но воздух по-прежнему относительно чист и вполне пригоден для дыхания. Почему? Потому что зеленое вещество в наших листьях – хлорофилл – на свету поглощает избыток углекислоты и выделяет кислород.

Без леса у человечества не было бы воздуха, чтобы дышать, а почва была бы лишена питательных веществ, необходимых для выращивания сельскохозяйственных культур. Более 2 млрд. человек в мире лишились бы возможности отапливать свои жилища и готовить пищу, не имея дров. Деревья дают древесину для строительства, изготовления бумаги, мебели, и многих полезных продуктов. Люди в лесах собирают ягоды, орехи и грибы, смолу и каучук, множество ценнейших лекарственных растений.

Вы, люди, живущие в городах, устаете от постоянного шума, пыли, толчеи и суеты, раздражаетесь, заболеваете, теряя связь с природой. Но стоит вам выйти в парк или

А знаете ли вы, кто считается самыми счастливым среди деревьев? Те наши собратья, которые удостоились почета видеть пророка Мухаммада (мир ему и благословение), быть рядом с ним и приветствовать его, когда он проходил мимо.



выехать за город в лес, как к вам вновь возвращается душевное равновесие, спокойствие и энергия. Ведь все мы – от высоких деревьев до маленькой травинки постоянно находимся в поминании и восхвалении своего Господа, поэтому атмосфера леса наполнена благом, покоем и величием. Здесь все целебно – и воздух, и звуки, и краски, и запахи, и ощущения, и мысли...

В творении деревьев и лесов проявились прекрасные качества Всевышнего Аллаха – ар-Рахман (Милостивый), аль-Карим (Щедрый) и аль-Хаким (Мудрый). Лес – это родной дом для множества животных, птиц, насекомых. Когда начинают вырубать деревья в лесу, его обитатели сразу же покидают эти места. Ведь они попросту не смогут выжить в подобных условиях, так как деревья давали им пристанище и еду. Птицы большую часть своей жизни проводят на ветвях деревьев. Здесь они вьют гнезда, выводят птенцов, находят насекомых и плоды для питания, прячутся от врагов. Животные любят объедать листья и тонкие веточки деревьев. А другие предпочитают собирать их плоды. Например, дикие кабаны очень любят желуди, белки – шишки, а бобры и зайцы вовсе не прочь полакомиться корой и молодыми побегами. Люди также научились использовать дары, приносимые деревьями, себе во благо. Благодаря своим усилиям и труду, по воле и замыслу Господа Бога, они научились разводить фруктовые сады. И великое разнообразие плодов, которые произ-



растают в них, поражают воображение.

Яблоки, груши, сливы, вишни, манго, апельсины, финики, инжир, бананы питаются от одной земли, согреваются одним солнцем, поливаются одними дождями, но при этом одни сладкие, словно сахар, другие – кисло-сладкие, а третьи – кислые. Одни плоды большие, другие – маленькие. Одни растут индивидуально, другие – гроздьями. Каким образом из одной почвы вырастает великое множество разных деревьев, родящих плоды самой разной формы, цвета, вкуса, запаха и состава? Как и где они приобретают эти качества? Все это есть проявление великолепного искусства Всемогущего Творца, создавшего удивительный живой мир во всем богатстве и разнообразии. Он наделил каждый вид живых существ присущими только им яркими неповторимыми качествами, информация о которых хранится, как на компакт-диске, в виде последовательности нуклеотидов (генов) в молекулах ДНК и передается неизменной по наследству от родителей потомкам через многие поколения.

А знаете ли вы, кто считается самыми счастливым среди деревьев? Те наши собратья, которые удостоились почета видеть пророка Мухаммада (мир ему и благословение), быть рядом с ним и приветствовать его, когда он проходил мимо. Среди них было бревно из ствола финиковой пальмы, служившее возвышением нашему Пророку (мир ему и благословение) во время его проповедей. Бревно было счастливо тем, что служило Посланнику Аллаха и было всегда рядом с ним. Позднее сподвижники соорудили минбар (трибуну, с которой читают проповеди), и, когда Пророк (мир ему и благословение) начал произносить проповеди с него, пальмовое бревно застонало,

как человек, и горько заплакало. В моментально наступившей тишине всем присутствующим ясно стали слышны рыдания и стоны бревна финиковой пальмы. Пророк Мухаммад (мир ему и благословение) прервал свою речь и подошел к нему. Он стал гладить его своими благословенными руками и успокаивать. От его добрых слов бревно успокоилось и замолчало. Его страдание от разлуки с Пророком (мир ему и благословение) усиливает нашу любовь к нему и тоску, поэтому мы считаем эту финиковую пальму самой почетной среди нас.

Но есть у нас и печально известные собратья. Это колючие деревья из Мекки, ветки которых дядя Посланника Аллаха – Абу Ляхаб и его жена в темноте разбрасывали по дороге, по которой обычно ходил наш Пророк (мир ему и благословение). Колючки, впиваясь, ранили его ноги до крови. Если бы вы знали, как эти наши собратья страдали и мучились, поэтому им оставалось только проклинать Абу Ляхаба и его жену, которые не избежали наказания Аллаха в вечной жизни...



Не понимая ценности деревьев, некоторые люди ломают наши ветви, вырезают надписи на стволах, ранят, губят нас. Но что бы ни случилось, мы, не обижаясь и не желая отомстить, всю свою жизнь будем безотказно служить им, укрывая своей тенью, одаривая плодами, давая древесину и топливо, радуя цветущими садами и зеленым шумом лесов.

Всевышний Господь поставил нас на службу людям, таково наше предназначение.

## Ағастар беҙҙең менән ни ҡәҙәр гүзәл һөйләшә...



Һәр ағас – тере организм. Әлбиттә, планеталағы һәр әҙәм ағастың ниндәй икәнлеген белә. Уның тәрәге – олон, ә унан япраҡтар, йәшел ылыҫ менән ҡапланған йөҙҙәрсә, хатта меңдәрсә ботаҡтар китә. Ағас тамыры кеше организмындағы йөрәк эше, сөнки уның ярҙамында ул тупраҡтан көс ала, уның ярҙамында ергә йәбешеп тора.

Бына мин – урмандарҙа күпләп үҫкән ябай ағастарҙың береһе. Күршеләрем – сайырлы ҡарағайҙар, аҡ олонло ҡайын-

дар һәм олон төбө абаға менән ҡапланған ҡыуышлы ҡарт имән. Тирә-йүнемдә зәңгәр ҡыңғырауҙар, аҡ сәскәләр, япраҡтар аҫтына боҫҡан ер еләктәре ...

Күп йылдар элек мин ботаҡтан ергә осоп төшкән орлоҡ ҡына инем. Ямғырҙарға ҡойоноп, ҡояшта йылынып, мин шытып сыҡтым, көс алып үҫә-үҫә, ҙур ағасҡа әүерелдем. Минең һымаҡ ағастар урманда меңдәрсә, ә бөтә Ер планетаһында, ғалимдар иҫәпләүенсә, беҙ 3 триллион 40 миллиард. Хаҡ Тәғәләбеҙ бар ҡылған ағастар донъяһы кеше менән йәнәш миллиондарса йыл йәшәй һәм уға тоғро хеҙмәт итә.

Кешеләр быға артыҡ әһәмиәт биреп мәшәҡәтләнмәй, саф һауа ҡайҙан барлыҡҡа килеүе хаҡында ла артыҡ уйланмай. Бер уйлаһаң, тын алғанда һәм завод, фабрика, транспорттарҙан, органик матдәләр сереүенән бүленеп сыҡҡан углекислота саф һауаны сарыф итеп бөтөрөргә тейеш кеүек, ләкин һауа һаман саф һәм тын алыуға яраҡлы. Ни өсөн? Бөтә ғилләә беҙҙең япраҡтарҙағы йәшел матдәлә – хлорофилл көн яҡтыһында



артыҡ углекислотаны йота һәм кислород бүлеп сығара.

Урмандарһыҙ тын алыр өсөн һауа булмаҫ, ә тупраҡ ауыл хужалығы культураларын үҫтереү өсөн кәрәк булған файҙалы матдәләрҙән мәхрүм ҡалыр ине. Донъялағы 2 миллиардтан ашыу кеше йорттарын йылытыр, ризыҡ әҙерләү өсөн утынға мохтаж. Ағастар төҙөлөштә, йорт йыһаздары, ҡағыҙ эшләү өсөн дә кәрәк. Кешеләр урмандарҙа еләк-емеш, сәтләүектәр, бәшмәктәр, ыҫмала, каучук, бик күп файҙалы дарыу үләндәрен йыя.

Һеҙ, ҡалала йәшәүселәр, шау-шыуҙан, этеш-төртөштән



Ә ниндәй ағас иң бәхетлеһе тип һаналғанын беләһегеҙме икән? Улар – пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәтте (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) күреү, ул үткәндә, уны сәләмләү бәхетенә ирешкән туғандарыбыҙ.

арыйһығыҙ, асыуланаһығыҙ, тәбиғәт менән бәйләнеште өҙгәнлектән, ауырып та китәһегеҙ. Ә паркка йәки ҡала ситенә сығыу менән, күңел тыныслығы табаһығыҙ, көс йыяһығыҙ. Беҙ, бәләкәй генә үлән ҡыяғынан алып бейек ағастарға ҡәҙәр – һәммәбеҙ Раббыбыҙҙы данлай, шуға күрә урман мөхите бәрәкәт, тыныслыҡ, яҡтылыҡ менән тулы. Бында бөтә нәмә шифалы: һауа ла, тауыштар ҙа, төҫтәр ҙә, еҫтәр ҙә, тойғолар ҙа, уйҙар ҙа...

Ағас, урмандарҙы ижад итеүҙә Раббыбыҙҙың әр-Рахмән (Шәфҡәтле), әл-Кәрим (Йомарт) һәм әл-Хакиим (Хикмәт эйәһе) кеүек иң күркәм сифаттары сағылыш тапҡан.

Урман – бихисап хайуан, ҡош, бөжәктәрҙең тыуған йорто. Ағастарҙы ҡырҡа башлаһалар, улар был урындарҙан китергә мәжбүр, сөнки төйәк һәм ризыҡ биргән ағастарһыҙ улар йәшәй алмай. Ғүмеренең күп өлөшөн ҡоштар ағас ботаҡтарында үткәрә. Бында улар оя ҡора, бала сығара, ризыҡланыр өсөн бөжәк һәм емеш таба, дошмандарынан ҡаса. Хайуандар япраҡтар, ағас ботаҡтары менән туҡлана, ҡайһылары емештәрен ашай. Мәҫәлән, ҡабандар имән сәтләүеген ярата, тейендәр – тубырсыҡтарҙы, ә ҡондоҙҙар һәм ҡуяндар ағас ҡабығын, йәш үҫентеләрҙе.

Кешеләр ағастарҙан файҙа күрергә өйрәнде. Аллаһ ихтыяры менән, тырышлыҡ һәм хеҙмәт һалып, улар емеш баҡсалары үҫтерә. Ул баҡсаларҙа

үҫкән емеш-еләктең төрлөлөгө хайран ҡалдыра.

Алмалар, грушалар, сливалар, сейәләр, манголар, әфлисундар, финиктар, инжирҙар, банандар бер үк ерҙән туҡланып, бер үк ҡояш аҫтында, бер үк ямғырҙарға ҡойоноп үҫә, әммә берәүҙәре балдай, икенселәре әскелтем-татлы, ә өсөнсөләре әсе. Ҡайһылары ҙур, ҡайһылары бәләкәй. Ҡайһылары айырым үҫә, ҡайһылары тәлгәш булып. Ни өсөн бер үк тупраҡта емештәренең формаһы, төҫө, тәме, еҫе айырылып торған бихисап ағастар үҫә? Ҡайҙан алған улар был сифаттарҙы? Байлығы һәм төрлөлөгө менән ғәжәпләндергән йәнле донъяны барлыҡҡа килтергән Хаҡ Тәғәләбеҙҙең һоҡланғыс сәнғәт емеше түгелме ни былар?! Ул һәр бер йән эйәһенә үҙенә генә хас сағыу үҙенсәлектәр биргән, һәм ул үҙенсәләктәр, компакт-дискыла һаҡланған һымаҡ, һәр кемдең ДНК молекулаларында һаҡлана, ата-әсәләренән мираҫ булып, киләһе быуындарға тапшырыла.

Ә ниндәй ағас иң бәхетлеһе тип һаналғанын беләһегеҙме икән? Улар – пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәтте (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) күреү, ул



үткәндә, уны сәләмләү бәхетенә ирешкән туғандарыбыҙ. Улар араһында Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) вәғәз һөйләгәндә баҫып торған финик пальмаһы бүрәнәһе лә бар. Бүрәнә Аллаһ Илсеһенә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) хеҙмәт итә алғаны, уның янында була алғаны өсөн бик тә бәхетле булған. Һуңғараҡ, сәхәбәләр минбәр төҙөгәс һәм Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) вәғәздәрен шунан һөйләй башлағас, пальма бүрәнәһе, ыңғырашып, кеше һымаҡ һыҡтап илап ебәргән. Ҡапыл барлыҡҡа килгән тынлыҡта барыһы ла финик пальмаһы бүрәнәһенең һыҡтауын,



ыңғырашыуын ап-асыҡ ишеткән. Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм), һүҙен бүлеп, уның янына килгән, тынысландырып һыйпарға керешкән. Уның яғымлы һүҙҙәренән иреп, бүрәнә тынысланған, тынып ҡалған. Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) менән айырылыуҙан уның яфаланыуы беҙҙең уға һөйөүебеҙҙе һәм һағышыбыҙҙы көсәйтә, шуға күрә беҙ финик пальмаһын арабыҙҙа иң маҡтаулы ағас тип иҫәпләйбеҙ.

Арабыҙҙа ҡайғы менән бәйле туғандарыбыҙ ҙа бар. Улар – Мәккәнең энәле ағастары, был ағастарҙың ботаҡтарын Пәйғәмбәребеҙҙең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) бабаһы Әбү Ләһәб һәм уның ҡатыны ҡараңғыла Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) йөрөгән юлға ташлаған, һәм энәләр уның аяғына ҡаҙалып ҡанатҡан. Был туғандарыбыҙҙың ыҙаларын һөйләп аңлатырлыҡ түгел, улар мәңгелек тормошта Аллаһ яҙаһын күрәсәк Әбү Ләһәбте һәм уның ҡатынын ҡарғаған...

Ағастарҙың ҡиммәтен аңламайынса, ҡайһы бер кешеләр ботаҡтарыбыҙҙы һындыра, олондарыбыҙға яҙа, йәрәхәтләй, һәләк итә. Тик ниндәй хәлдә булһаҡ та, беҙ, үпкәләмәйенсә һәм үс алырға теләмәйенсә, күләгәләр биреп, емештәребеҙҙе бүләк итеп, төҙөлөш материалдары һәм утын биреп, сәскәгә күмелгән баҡсаларыбыҙ, урмандарыбыҙ шауы менән донъяны йәмләп, кешеләргә һис ауырһынмай хеҙмәт итәсәкбеҙ.

Хаҡ Тәғәләбеҙ беҙҙе кешегә хеҙмәт итеү өсөн барлыҡҡа килтергән, һәм беҙ үҙ бурысыбыҙҙы ихлас үтәйбеҙ.

## Как прекрасно разговаривают с нами собаки…



Давайте знакомиться, я – пес Смелый, я живу в конуре и охраняю дом, большой сад и скотный двор моего любимого хозяина. Я предупрежу его о приближении чужого недоброго человека громким лаем и не пущу воришек на свою территорию.

За сотни тысяч лет своего существования на Земле человек приручил и одомашнил для своей пользы много диких животных и птиц. Но собака, которая из дикого, хищного зверя превратилась в надежного преданного друга, готового отдать жизнь за своего хозяина, занимает особое место среди этих четвероногих и крылатых спутников человека. На этой



преданности основана дружба человека с собакой, истоки которой уходят в глубины веков. Собаки способны понимать хозяев без слов, часто им достаточно еле заметного жеста или взгляда, чтобы понять, чего хочет от них хозяин. Эту верность и беззаветное служение человеку, которого Он поставил своим наместником на земле, вложил в нашу суть Всемогущий Создатель. Ведь если бы Господь Бог не сотворил людей, на земле не было бы ни одного животного.

**«И сказал твой Господь ангелам: «Я поставлю на земле наместника...»** (сура Корова, 30).

Из любви к лучшему Своему творению – человеку Всевышний Господь создал животных, молоком и мясом которых вы питаетесь, например, коров, коз, овец, или используете для верховой езды и перевозки грузов, например, лошадей и верблюдов. Как напоминание людям о чудесных райских садах, Он создал удивительных рыб, плавающих в воде, и птиц в небе, обладающих красивым оперением и чарующими голосами.

Но есть хищные животные, которые вызывают у вас страх, например, львы, тигры, волки. Они напоминают о гневе Аллаха. И тогда человек, чтобы не подвергнуться господнему наказанию, с еще большим старанием и усердием начинает выполнять Его повеления и соблюдать запреты.

А мы, собаки, предназначены быть верными и близкими спутниками людей, за что нас еще называют «животными-компаньонами». Умные и понятливые, сильные и выносливые, собаки пасли стада, выслеживали добычу во время охоты,

А мы, собаки, предназначены быть верными и близкими спутниками людей, за что нас еще называют «животными-компаньонами». Умные и понятливые, сильные и выносливые, собаки пасли стада, выслеживали добычу во время охоты, охраняли дом и своих хозяев.



охраняли дом и своих хозяев. Со временем люди заметили, что у разных собак какие-то качества проявляются в большей мере, что-то они умеют делать лучше, и это стало причиной использования их для определенной службы. Так появились собаки караульные, охотничьи, ездовые, розыскные, служебные, собаки-спасатели, собаки-поводыри. У каждой из них – своя миссия, которую они, благодаря способностям, дарованным Всевышним Создателем, отменно исполняют.

Моя служба состоит в охране дома моего хозяина и прилегающих к нему территорий, поэтому мне необходим ум, острый слух, повышенная внимательность. Я неприхотлив, вынослив, хорошо переношу разные климатические условия. У меня крепкое здоровье, спокойный, уравновешенный характер, острое чутье, громкий голос. А еще есть у меня два родных братца. Один из них – Ловкий – охотничий пес. Благодаря своему острому обонянию, быстроте реакции и силе, он очень хорошо умеет выследить добычу и поймать ее. Другой мой братец – Смышленый пасет большое стадо коров. Его служба состоит в том, чтобы направлять стадо на пастбище и обратно и защищать его от хищников. Ему приходится бежать много километров по пересеченной местности за стадом, поэтому он очень крепок и вынослив. Его длинная плотная шерсть уберегает его от дождя и зноя. Она удерживает температуру тела даже в 40-градусную жару и защищает его от



зубов хищников. У каждого из нас – своя служба, о чем пророк Мухаммад (мир ему и благословение) говорил: ***«Собак можно держать с тремя целями: для охоты, охраны скота и охраны посевов»*** (Мухтасар, Муслим, 121). Задумайтесь: если мы, собаки, созданные животными, настолько верны и преданы своему хозяину, то как же вам, людям не быть верными и преданными своему Создателю!

У многих народов мира существует поговорка: *«Верности надо учиться у собак»*. Если хозяин по той или иной причине исчезает, собака будет терпеливо и преданно ждать его. В США, на берегу реки Миссури стоит памятник шотландской овчарке по кличке Шеп. Впервые Шеп появился здесь в 1937 году, когда его погибшего хозяина переносили с поезда на пароход. Каждый день, в течение почти шести лет, встречал верный пес каждый поезд в ожидании чуда. Собака, как никакое другое животное, привязана к человеку, служит ему ревностно и преданно до конца своих дней.

Преданный труд собак зачастую становится решающим при раскрытии преступлений и задержании злоумышленников, спасении людей из-под завалов. Караульные и розыскные собаки используются для охраны государственных границ, розыска преступников, поиска оружия, наркотических средств, взрывчатых веществ и устройств.

Ездовые собаки, из которых составляют упряжки, служат одним из транспортных средств в районах Крайнего Севера (средняя нагрузка на собаку 40-50 кг, скорость пробега упряжки до 15 км/ч). В составе геологоразведочных экспедиций собаки занимаются поиском полезных ископаемых.

Если собаки после специальной подготовки могут выполнять такую важную и необхо-

димую людям работу, то какие же прекрасные дела и поступки сможет совершить являющийся самым превосходным творением Всевышнего Господа человек, наделенный разумом и способностями и прошедший путь духовного воспитания! Когда он избавляется от низменных качеств, обретая благой нрав, то каждым поступком приближается к Всевышнему Богу!

Если человек не будет воспитывать себя, то может пасть до состояния ниже животных. До прихода Ислама люди живьем закапывали в землю своих дочерей, считая что в будущем они, вместо того чтобы прославить семью на полях сражений, как сыновья, могли только опозорить ее, не сумев сохранить свою честь. Из-за страха перед бедностью, эти люди, лишенные милосердия и человечности своими руками убивали дочерей, но при этом держали у себя собак, которые охраняли их дома, пасли скот и помогали на охоте. То есть, для них собственные дети не имели такой ценности, какую имели собаки.



Хоть я и собака, но мне стыдно за них.

Но чем современные люди, которые изобрели множество различных способов и средств, чтобы не иметь детей, отличаются от людей дикой эпохи, закапывающих своих дочерей? В настоящее время по всему миру – в Америке, Европе, Японии и других странах стало модным заводить собак вместо детей. Создана целая индустрия изготовления кормов, игрушек, мебели, косметики, одежды для животных. Больших и агрессивных собак, внушающих страх окружающим, чаще заводят, чтобы таким образом самоутвердиться в обществе и удов-



летворить свою скрытую агрессию. Другие держат нас для украшения и носят в качестве аксессуара. И то, и другое очень унизительно для животного!

А мы желали бы к себе такого отношения, которое проявлял к нашим собратьям шейх Бахауддин Шах Накшибанд. Он кормил псов, которых все с брезгливостью обходили стороной. Лечил раненых и больных собак. Сам ухаживал за ними. Разве вы не задумаетесь о том, как этот великий праведник относился к творениям Аллаха? Благодаря нашим характерным особенностям, которыми нас наделил Всевышний Господь, мы приспособлены к обитанию под открытым небом. Люди, держа нас в своих квартирах, считают, что тем самым проявляют свое доброе отношение к нам. Но при этом они не понимают, что лишают нас нормальной жизни в соответствии с нашей природой.

Проявление истинного милосердия к одной собаке, по рассказу нашего Пророка (мир ему и благословение), может стать причиной попадания человека в Рай. Один грешный человек спустился в колодец и, зачерпнув ботинком воду, напоил собаку, мучающуюся от жажды. За его доброту Всевышний Господь простил его грехи и ввел в Рай. Это прекрасный пример того, как истинное милосердие и сострадание, проявленное к творениям Аллаха, может послужить обретению самой великой Его награды.

## Эттәр беҙҙең менән ни ҡәҙәр гүзәл һөйләшә...



Таныш булайыҡ, мин – Батыр ҡушаматлы эт, мин үҙемдең оямда йәшәйем һәм яратҡан хужамдың йортон, ҙур баҡсаһын, мал һарайын һаҡлайым. Мин, өрөп, насар уйлы кешеләрҙең яҡынлашыуы хаҡында иҫкәртәм һәм бурҙарҙы үҙ биләмәмә үткәрмәйем.

Ерҙә йәшәгән йөҙҙәрсә мең йыл дәүерендә кеше бик күп ҡырағай хайуандарҙы һәм ҡоштарҙы ҡулға эйәләштергән. Ҡырағай, йыртҡыс хайуандан үҙ хужаһы өсөн үлергә лә әҙер



булған ышаныслы һәм тоғро дуҫҡа әйләнгән эт кешенең дүрт аяҡлы һәм ҡанатлы дуҫтары араһында айырым урын биләй. Кеше һәм эттең дуҫлығы быуаттар төпкөлөнән килгән тоғролоҡ менән көслө. Эттәр хужаһын һүҙһеҙ ҙә аңлап тора, хужаһын аңлау өсөн, уға беленер-беленмәҫ ым йәки ҡараш та етә. Ерҙә кешене хәлифә итеп яралтҡан Хаҡ Тәғәләбеҙ был тоғролоҡто һәм фиҙаҡәрлекте беҙҙең асылыбыҙға һалған. Раббыбыҙ кешеләрҙе барлыҡҡа килтермәһә, ерҙә бер хайуан да булмаҫ ине.

**«...Раббың фәрештәләргә әйтте: «Мин ер йөҙөнә (Әҙәмде) хәлифә (башлыҡ, хужа) итеп яралтасаҡмын...»** (Баҡара, 30).

Ите-һөтө менән туҡланһын өсөн, иң яҡшы ижад емешенә Ул һыйыр, кәҙә, һарыҡтарҙы, егеп йөрөр һәм ауыр йөктәр ташыр өсөн аттарҙы, дөйәләрҙе бар ҡылған. Йәннәт баҡсаларын хәтергә төшөрһөн өсөн, Ул һыуҙарҙа йөҙгән ғәжәйеп балыҡтарҙы, күктә гүзәл ҡауырһынлы, тауышы менән әсир итеүсе ҡоштарҙы бар ҡылған.

Арыҫлан, юлбарыҫ, бүре ише ҡурҡыу тыуҙырған йыртҡыс хайуандар ҙа бар. Улар Аллаһтың асыуы хаҡында киҫәтә. Аллаһтың асыуына тарымаҫ өсөн, кеше, нығыраҡ тырышлыҡ һалып, Аллаһ әмерҙәрен һәм тыйыуҙарын үтәй башлай.

Эттәр – кешеләрҙең тоғро һәм яҡын юлдаштары. Аҡыллы, һиҙгер, көслө һәм түҙемле эттәр көтөү көтөшә, һунар табышын эҙәрлекләй, йортто, хужаларын һаҡлай. Тора-бара кешеләр эттәрҙең төрлө тоҡомдарына төрлө сифаттар хас булыуын күреп ҡала, шулай итеп ҡарауыл, һунар, екке һәм башҡа байтаҡ һөнәрҙәрҙе үҙләштергән

Эттәр – кешеләрҙең тоғро һәм яҡын юлдаштары. Аҡыллы, һиҙгер, көслө һәм түҙемле эттәр көтөү көтөшә, һунар табышын эҙәрлекләй, йортто, хужаларын һаҡлай.



эттәр барлыҡҡа килә. Аллаһ бүләк итеп биргән һәләттәре арҡаһында, уларҙың һәр береһе үҙенә йөкмәтелгән эште еренә еткереп үтәй.

Хужамдың йортон һәм уның тирә-яғын һаҡлау – минең вазифа, шуға күрә миңә аҡыл да, һаҡ ҡолаҡ та, иғтибарлылыҡ та бик кәрәк. Мин талымһыҙ, сыҙамлы, теләһә ниндәй климат шарттарына ла яраҡлаша алам. Һаулығым яҡшы, тыныс холоҡломон, һиҙгермен, тауышым көслө. Минең ике туғаным бар. Береһе – Йылғыр – һунар эте. Уғата һиҙгер, етеҙ, көслө булыуы арҡаһында, ул һунар табышын эҙәрлекләп, йәһәт кенә тотоп ала. Икенсеһе – Зирәк – ҙур һыйыр көтөүен көтә. Малды көтөүлеккә алып барыу һәм алып ҡайтыу, йыртҡыстарҙан һаҡлау уның өҫтөндә. Уға малдар артынан күп сабырға тура килә, шуға күрә ул көслө лә, етеҙ ҙә, түҙемле лә. Ҡалын, тығыҙ йөнө уны ямғырҙан да, 40 градусҡа еткән эҫеләрҙән дә, йыртҡыстар тешенән дә һаҡлай. Һәр беребеҙҙең үҙ хеҙмәте, үҙ шөғөлө бар, был турала пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) былай тигән:

***«Эттәрҙе өс маҡсат өсөн тоторға мөмкин: һунар өсөн, малды ҡарап йөрөтөү һәм сәсеүлектәрҙе һаҡлау өсөн»*** (Мохтасар, Мөслим, 121). Фекерләп ҡарағыҙ: беҙ, хайуан итеп бар ҡылынған эттәр, хужабыҙға шул ҡәҙәр тоғробоҙ икән, һеҙ, кешеләр, Хаҡ Тәғәләбеҙгә



тоғролоҡ хаҡында нисек онота алаһығыҙ?!

Күп кенә халыҡтарҙа шундай әйтем бар: *«Тоғролоҡҡа эттәрҙән өйрәнергә кәрәк»*.

Әгәр хужаһы ниндәйҙер сәбәп менән юҡҡа сыҡһа, эте түҙемле рәүештә уны көтәсәк. АҠШ-тың Миссури йылғаһы буйында Шеп ҡушаматлы овчарҡаға һәйкәл тора. 1937 йылда, вафат булған хужаһын поездан пароходҡа күсергәс пәйҙә була бында Шеп. Алты йыл буйы көн һайын тоғро эт, мөғжизә көтөп, поездарҙы ҡаршы ала. Эт – кешегә иң ныҡ тоғро хайуан, ул һуңғы көнөнә ҡәҙәр хужаһына арымай-талмай хеҙмәт итә.

Енәйәттәрҙе асҡанда, енәйәтселәрҙе эҙәрлекләгәндә, харабалар аҫтында ҡалған кешеләрҙе ҡотҡарғанда, эттәрҙең тоғро хеҙмәте баһалап бөткөһөҙ. Ҡарауыл һәм эҙәрлек эттәре дәүләт сиктәре һағында, енәйәтселәр, ҡоралдар, наркотиктар, шартлатҡыс матдәләр һәм ҡорамалдар эҙләгәндә файҙаланыла.

Екке эттәрҙән торған егем - Алыҫ Төньяҡта йәшәүселәрҙең транспорт сараһы (һәр эткә 40-50 кг йөк тура килә, егемдең тиҙлеге сәғәтенә 15 километр). Геологик эҙләнеүҙәр экспедицияһы составындағы эттәр файҙалы ҡаҙылмалар эҙләү менән шөғөлләнә.

Әгәр эттәр, махсус әҙерлек үткәндән һуң, шундай мөһим һәм кәрәкле эштәр аткара ала икән, Хаҡ Тәғәләбеҙҙең иң күркәм ижад емеше булған, аҡыл һәм һәләттәр менән бүләкләнгән һәм рухи тәрбиә алған кеше иҫ киткес гүзәл ғәмәлдәр ҡыла ала түгелме ни?! Нәфсе ауҙарынан ҡотолоп, зирәк зиһен, күркәм холоҡ, тулы иманға эйә әҙәм һәр

аҙымы менән Раббыһына яҡынлаша!

Әгәр әҙәм үҙен тәрбиәләмәһә, хайуан кимәленән дә түбән тәгәрәүе ихтимал. Исламға ҡәҙәр кешеләр, ҡыҙҙар егеттәр һымаҡ яу яланында дан ҡаҙанмаясаҡ, намыҫын һаҡлай алмайынса, ғаиләне хурлыҡҡа төшөрөүе генә мөмкин тип, яңы тыуған ҡыз балаларын тереләй ергә күмгән. Миһырбанлыҡтан, кешелеклелектән мәхрүм был әҙәмдәр, хәйерселеккә төшөүҙән ҡурҡып, ҡыҙ балаларын үлтергән, шул уҡ ваҡытта йорттарын һаҡлар, көтөү көтөр һәм һунарға йөрөр өсөн эттәр тотҡан. Уларҙың үҙ балалары эттән дә кәм баһаланған. Эт булһам да, миңә улар өсөн ояҭ.

Бала тапмаҫ өсөн төрлө саралар уйлап тапҡан хәҙерге заман кешеләре ҡыҙ балаларын тереләй күмгән ул кешеләрҙән ҡайһы яғы менән артыҡ? Әлеге мәлдә Америкала, Европала, Японияла һәм башҡа илдәрҙә балалар табып тәрбиәләү урынына эттәр аҫрау модаға инеп китте. Хайуандар өсөн аҙыҡ-түлек, уйынсыҡтар, йорт йыһаздары, биҙәнеү әйберҙәре, кейем-һалым эшләп сығарыу буйынса тотош индустрия



барлыҡҡа килде. Тирә-йүндәгеләрҙең ҡотон алған ҙур һәм усал эттәрҙе йәмғиәттә үҙҙәренең баһаһын арттырыу, эстәренә йыйылған усаллыҡты ҡәнәғәтләндереү өсөн тоталар. Ҡайһы берҙәре беҙҙе үҙенә күрә бер биҙәүес итеп аҫрай һәм аксессуар рәүешендә йөрөтә. Икеһе лә хайуандарҙы кәмһетеү булып тора!

Ә беҙ үҙебеҙгә ҡарата шәйех Баһаутдин Нәҡшибанд мөнәсәбәтен теләр инек – ул башҡалар ерәнеп ситкә тибәргән эттәрҙе ашата, яралы һәм ауырыу эттәрҙе дауалай торған булған. Бөйөк әүлиәнең Аллаһ мәхлүктәренә мөнәсәбәте



хаҡында уйланғанығыҙ булманымы? Хаҡ Тәғәләбеҙ бүләк итеп биргән үҙенсәлектәребеҙ арҡаһында, беҙ асыҡ күк аҫтында ла йәшәй алабыҙ. Беҙҙе фатирҙарында тотҡан кешеләр изгелек эшләйбеҙ тип уйлай, әммә улар бер нимәне аңламай: улар беҙҙе тәбиғәтебеҙгә ярашлы нормаль тормоштан айыра.

Бер эткә ҡарата ғына булған шәфҡәтлелек, Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һүҙҙәре буйынса, кешене Йәннәткә алып инеүе ихтимал. Гонаһлы бер әҙәм, ҡойоға төшөп, ботинкаһы менән һыу һирпеп алып, сарсауҙан йонсоған этте эсергән. Игелеге өсөн, Аллаһ, уны ярлыҡап, Йәннәткә индергән. Күреүебеҙсә, Аллаһ мәхлүктәренә ҡарата ихлас миһырбанлылыҡ, шәфҡәтлелек иҫ киткес бүләк алыуға юл асыуы ла ихтимал.

## Как прекрасно разговаривают с нами подземные обитатели…



А вот и я! Ну куда же вы смотрите? Я – червячок и говорю с вами из-под земли, на которой вы стоите.

Хоть вы и не можете это видеть, но почва очень густо заселена самыми разными живыми существами. Вся наша жизнь проходит под землей, здесь мы живем, трудимся и отдыхаем. Здесь – наш родной дом. Земля оберегает нас от холода во время долгой студеной зимы и дает нам прохладу в летний зной. В сезон непрерывных осенних дождей земля размокает, местами скрываясь под слоем воды. А зимой она словно толстым одеялом, укрыта снегом. В такие периоды вы не уви-



дите ни червяков, ни жучков, ни муравьев, потому что все мы по подземным ходам спускаемся в более глубокие камеры и полости, куда не проникает дождевая вода, а зимой поддерживается более стабильная температура. Ведь известно, что за счет плохой теплопроводности земли тепло долго сохраняется в ее толще, что делает наш подземный дом безопасным и комфортным в любых условиях.

Поистине, наш Господь заботится даже о Своих скрытых в глубинах земли неисчислимых маленьких творениях. Ведь Он – ар-Рахман (Милостивый) и аль-Мухаймин (Попечитель). Нам, как всем живым организмам, необходимы воздух, вода и пища. Наш Господь ведает обо всех наших нуждах и прекрасно удовлетворяет их. Для того чтобы жить в такой непростой среде, как почва, ее обитатели должны обладать рядом специфических свойств. Ведь по физическим характеристикам эта среда твердая, плотная, бедная кислородом и влагой. Кроме того – это царство абсолютной тьмы, куда не проникает даже отблеск света. Поэтому, как проявление божественной мудрости и искусства, наш Господь даровал подземным обитателям удивительные особенности. А именно: чрезвычайно малые размеры, чтобы заполнять крошечные пространства между частицами почвы и комфортно себя там чувствовать (как бактерии, простейшие, микроорганизмы, коловратки, рачки); гибкое тело и очень крепкую мускулатуру, дающие преимущества для передвижения в почве (как у кольчатых и круглых червей); способность усваивать кислород, растворенный в воде или дышать всей поверхностью тела (как бактерии, нематоды); жизненный цикл, состоящий из личиночной стадии, во время которой не требуется ни света,

ни влаги, ни питания (как у жуков). Более крупные животные имеют приспособления в виде мощных роющих конечностей с крепкими когтями, позволяющих легко прорывать длинные и извилистые ходы (как кроты, землеройки); у млекопитающих хорошо развито обоняние, но практически отсутствует зрение (как у кротов, цокор, слепышей, спепушонков); их тело обтекаемой формы – плотное, сжатое, с коротким, жестким, плотно прилегающим мехом. Все эти приспособления создают им настолько комфортные условия, что подземные животные ощущают себя нисколько не хуже тех, которые живут на земной поверхности, а, возможно, – даже лучше.

Как и у всех живых существ, у нас есть свои естественные враги. Люди боятся встречи со львами, тиграми, волками, ядовитыми змеями, но для нас, червячков, они не представляют опасности. Мы боимся птиц, лягушек, кротов, ежей, землероек, барсуков, которым мы служим пищей, однако все они не опасны для людей. Этот мир живых существ, созданный Всевышним Творцом, живет по такому закону, установленному



Им, – каждому созданию предопределен свойственный ему вид пропитания. Одни существа, завершая свой жизненный цикл, становятся пищей для других. Таким образом, поддерживается баланс и равновесие в природе.

Конечно, каждый из вас хорошо знает, как выглядит дождевой червь. После сильных дождей мы выползаем на поверхность, потому что почва насыщается влагой, и воздуха в ней становится недостаточно. Отсюда – и наше название. В остальное время мы обитаем в земле. Вместе с насекомыми, личинками, червячками, живущими в почве, мы принимаем участие в ее рыхлении, пере-



работке растительных остатков, улучшении ее свойств.

Мы любим жить на участках земли, где не применяются химические удобрения и вспашка, образуя огромные колонии. За сутки каждый из нас пропускает через себя столько же почвы, сколько сам весит. Да, вес дождевого червя невелик – около полграмма, но на каждых 100 м$^2$ земли может жить до 10 тысяч червей, и все вместе мы вырабатываем до 5 кг плодородной почвы в день.

Вот так. Господь Бог сотворил бесчисленное количество живых существ для выполнения самых разных функций. Каждый их вид имеет свое место обитания и форму жизни. У нас всех разные жилища, разная пища, разные обязанности. Вы не увидите, чтобы кто-нибудь из нас бездельничал. Мы можем делать то, что для вас невозможно. Мы заглатываем органические остатки вперемешку с землей. Пропуская их через свою пищеварительную систему, перевариваем их, извлекаем полезные для себя компоненты, а остальное выводим наружу. Всевышний Господь сделал нас настоящими земледельцами и санитарами почвы. Мы не только делаем почву плодородной, но еще и обезвреживаем населяющую ее болезнетворную флору, такую как грибы, бактерии, их споры. В основном благодаря дождевым червям, органические отходы перерабатываются в гранулы с приятным земляным запахом, составляющим в массе гумус, необходимый для питания и роста растений, созревания вкусных и сочных плодов.

Теперь подумайте: как мы, такие маленькие существа, не имеющие ни рук, ни ног, ни глаз, ни ушей, по замыслу творения нашего Господа выполняем нашу службу? Как мы, червячки, прокладываем ходы в толще земли своими мягкими,

подобно макаронам, тельцами? Как находим дорогу в кромешной тьме, не имея зрения? Как можем жить и под землей, и на ее поверхности? Если бы вы, подобно нам, хотя бы десять минут пробыли под землей, что стало бы с вами? Смогли бы вы пошевелиться? Смогли бы вы дышать? Нет, вы не смогли бы это выдержать, и это положение представляло бы угрозу для вашей жизни.

Живой мир, скрытый под землей, является чудом Аллаха, самым прекрасным образом сотворившего все сущее и наделившего каждое существо присущими только ему особенными свойствами. Если Он пожелает, то может дать таким маленьким существам, как мы, такие возможности, которое не по силу людям. Послушайте, что повелевает наш Господь в священном Коране:

**«Ему принадлежит все, что на небесах и на земле. Те, которые около Него, не гордятся и не устают поклоняться Ему. Они восхваляют Его ночью и днем…»** (сура Пророки, 19-20).

Всемогущий Господь сотворил нас для служения вам, людям. Постоянно исполняя наше служение, мы без уста-



ли трудимся в глубине земли, под самыми вашими ногами. Но при этом мы не забываем восхвалять и благодарить нашего Создателя, который сотворил нас и содержит на этой земле. Наши тельца всегда находятся в таком положении, словно мы совершаем непрерывный земной поклон – сажда. Как вы во время намаза и зикра, так и мы постоянно поминаем Его.

Не считайте нас ничтожными, так как и нас, и вас сотворил Господь Бог. В дождливую погоду, когда мы выбираемся на поверхность земли, пожалуйста, будьте внимательны, смотрите под ноги и не раздавите нас!

## Ер аҫтын төйәк итеүселәр беҙҙең менән ни ҡәҙәр гүзәл һөйләшә…



Бына ул мин! Һуң ҡайҙа ҡарайһығыҙ? Мин – селәүсен, һеҙ баҫып торған ер аҫтынан һөйләйем хәбәремде. Һеҙ күрмәһәгеҙ ҙә, тупраҡ төрлө йән эйәләре менән шығырым тулы. Тормошобоҙ шау ер аҫтында үтә: бында беҙ йәшәбеҙ, эшләйбеҙ, ял итәбеҙ. Бында – беҙҙең тыуған төйәгебеҙ. Ер ҡышҡы ыҙғыр һыуыҡтарҙа беҙҙе йылыта, йәйге селлә эҫеһендә һалҡынлыҡ бирә. Оҙайлы көҙгө ямғырҙарҙа ер бүртә, урыны-урыны менән һыу аҫтында ҡала. Ә ҡышын ул ҡалын юрған ише

ҡар менән ҡаплана. Ул заманда һеҙ селәүсендәрҙе лә, бөжәктәрҙе лә, ҡырмыҫҡаларҙы ла күрмәйһегеҙ, сөнки беҙ ер аҫты юлдары буйлап ямғыр һыуҙары үтмәгән, ҡышын тотороҡло температура булған йорттарыбыҙға төшәбеҙ. Ер йылыны насар үткәрә, шуға күрә уның ҡуйынында йылы оҙаҡ һаҡлана һәм беҙ төрлө шарттарҙа ла ер аҫтындағы йортобоҙҙа имен, рәхәт йәшәйбеҙ.

Хаҡтыр, Раббыбыҙ ер ҡуйынын төйәк иткән, күҙгә күренеп бармаған Үҙенең бихисап кескәй йән эйәләре хаҡында ла хәстәрлек күрә. Ул бит – әр-Рахмән (Шәфҡәтле) һәм әл-Мүһәймин (Һаҡлаусы). Беҙ, бөтә тере йән эйәләре һымаҡ, һауа, һыу, ризыҡҡа мохтажбыҙ. Раббыбыҙ беҙҙең нимәгә мохтаж икәнлегебеҙҙе белә һәм беҙгә уны бирә. Тупраҡ мөхитендә йәшәүселәрҙең үҙҙәренә генә хас үҙенсәлектәре бар. Үҙенең физик сифаттары буйынса беҙ йәшәгән мөхит ҡаты, тығыҙ, кислород һәм дымға ярлы. Бында ҡараңғылыҡ хөкөм һөрә, осоҡ ҡына яҡтылыҡ та үтеп инә алмай. Үҙ хикмәте менән Хаҡ Тәғәләбеҙ ер аҫтын төйәк итеүселәргә ғәжәйеп үҙен-



сәлектәр бүләк иткән: тупраҡ араһындағы кескәй генә ерҙә уңайлы итеп урынлаша алыу өсөн, кәүҙәләребеҙ ғәҙәттән тыш бәләкәй, һығылмалы; тупраҡ араһында йөрөй алыр өсөн, мускулдарыбыҙ ныҡ; ҡайһыларыбыҙ һыуҙағы кислородты еңел генә үҙләштерә, ҡайһыларыбыҙ бөтә тәне менән тын ала. Ә ҡуңыҙҙар, мәҫәлән, ҡарышлауыҡ хәлендә саҡта, яҡтылыҡҡа ла, дымға ла, ризыҡҡа ла мохтаж түгел.

Һуҡыр сысҡан ише ҙурыраҡ хайуандарҙың ерҙе йырып барыу өсөн ҡаты тырнаҡлы аяҡтары бар, шулар ярҙамында улар боролмалы оҙон юлдар яра.



Һөтимәрҙәрҙә еҫ һиҙеү ағзалары яҡшы үҫешкән, әммә улар бер нәмә лә күрмәй. Тәндәре шыма, тығыҙ, йөндәре ҡаты һәм ҡыҫҡа. Бөтә был үҙенсәлектәре уларға ер аҫтында бик уңайлы тормош көтөргә мөмкинлек бирә.

Һәр бер йән эйәләренеке һымаҡ, беҙҙең дә дошмандарыбыҙ бар. Кешеләр арыҫлан, юлбарыҫ, бүре, ағыулы йыландарҙан ҡурҡа, ә беҙгә, селәүсендәргә, улар ҡурҡыныс түгел. Беҙ ҡоштарҙан, тәлмәрйендәрҙән, һуҡыр сысҡандарҙан, терпеләрҙән, бурһыҡтарҙан шөрләйбеҙ, сөнки беҙ уларҙың ризығы. Кешеләр иһә уларҙан ҡурҡмай.

Хаҡ Тәғәләбеҙ бар ҡылған һәр йән эйәһенең үҙенә тейешле ризығы бар. Бер йән эйәһенең икенсе берәүҙең ризығы рәүешендә ғүмере өҙөлөүе лә ихтимал – тәбиғәттәге баланс һәм тигеҙлек шулай һаҡлана.

Әлбиттә, ямғыр селәүсене ниндәй икәнлеген һәммәгеҙ беләһегеҙ. Көслө ямғырҙарҙан һуң, беҙ ер өҫтөнә сығабыҙ, сөнки һыулы тупраҡта беҙгә һауа етмәй. Исемде лә беҙгә шунан сығып ҡушҡандар. Башҡа ваҡытта беҙ тупраҡ эсендә көн күрәбеҙ. Ерҙә йәшәгән бихисап йән эйәләре менән бергә беҙ тупраҡты йомшартабыҙ, үҫемлек ҡалдыҡтарын эшкәртәбеҙ, ерҙең сифатын яҡшыртабыҙ.

Беҙ һөрөлмәгән, химик ашламалар ҡулланылмаған ерҙә күпләп көн итәбеҙ. Тәүлек эсендә ауырлығыбыҙға тиң тупраҡты үҙебеҙ аша үткәрәбеҙ. Әлбиттә, ауырлығыбыҙ ярты грамм ғына, әммә бер сутый ерҙә 10 меңгә ҡәҙәр селәүсен ғүмер һөрөүе мөмкин, бергәләп беҙ көн

һайын 5 килограмм уңдырышлы тупраҡ эшләп сығарабыҙ.

Беҙҙең тормош шундай. Рабббыбыҙ барлыҡҡа килтергән һәр йән эйәһенең үҙ вазифаһы бар. Һәр йән эйәһенең үҙ төйәге, йәшәү формаһы, ризығы, бурыстары бар. Беҙҙең арала бушты бушҡа ауҙарып йөрөгән берәүҙе лә күрмәҫһегеҙ. Беҙ һеҙ булдыра алмағанды атҡарып сыға алабыҙ: органик ҡалдыҡтарҙы ер менән ҡуша йотабыҙ, аш һеңдереү системаһы аша үткәрәбеҙ, эшкәртәбеҙ, үҙебеҙгә кәрәктәрен айырып алабыҙ, ҡалғанын кире сығарабыҙ. Аллаһ беҙҙе ысын ер эшкәртеүселәр һәм санитарҙар итеп бар ҡылған, ерҙе уңдырышлы итеү менән бергә беҙ ауырыу таратыусы бәшмәк, бактерия һәм уларҙың спораларын зарарһыҙландырабыҙ. Ямғыр селәүсендәре арҡаһында, органик ҡалдыҡтар тәмле ер еҫе килеп торған, үҫемлектәр үҫеше, еләк-емештәрҙең һутлы булып өлгөрөүе өсөн уғата кәрәк булған гранулаларға әүерелә.

Уйлап ҡарағыҙ инде: Раббыбыҙҙың хикмәте менән, беҙ, ҡулдары ла, аяҡтары ла, күҙҙәре лә, ҡолаҡтары ла булмаған остоҡ ҡына йән эйәләре, нисек хеҙмәт итәбеҙ? Беҙ, селәүсен-



дәр, бешкән макарон ише тәндәребеҙ менән ҡаты ерҙә нисек юлдар ярабыҙ? Күҙҙәребеҙ булмай тороп, дөм ҡараңғыла нисек юл табабыҙ? Нисек беҙ ер өҫтөндә лә, ер аҫтында ла йәшәй алабыҙ? Әгәр беҙҙең һымаҡ ун ғына минут ер аҫтында торһағыҙ, һеҙҙең менән нимә булыр ине? Ҡуҙғалырға, тын алырға хәлегеҙҙән килер инеме? Юҡ, һеҙ быны булдыра алмаҫ инегеҙ, ғүмерегеҙ ҡыл өҫтөндә ҡалыр ине.

Ер аҫтындағы тере донъя – гүзәл рәүештә яралтып, һәр йән эйәһенә үҙенә генә хас сифаттар, тормош биреүсе Аллаһ мөғжизәһе. Әгәр Ул теләһә, беҙҙең



ише кескәй генә йән эйәләренә кешеләрҙең көсө етәгән мөмкинлектәр бирә ала. Тыңлағыҙ әле, Изге Ҡөрьәндә Раббыбыҙ бына ниндәй әмер бирә:

**«Күктәрҙәге, Ерҙәге һәммә-барсаһы Уныҡы. Уның янындағылар (фәрештәләр) тәкәбберләнмәй. Уға ғибәҙәт ҡылыуҙан арымай. Улар арымай-талмай кисен-көндөҙөн тәсбих (Аллаһҡа маҡтау) әйтә"** (Әнбийә (Пәйғәмбәрҙәр), 19-20).

Хаҡ Тәғәләбеҙ беҙҙе һеҙгә, кешеләргә, хеҙмәт итеү өсөн барлыҡҡа килтергән. Вазифабыҙҙы даимән иҫтә тотоп, беҙ һеҙҙең аяҡ аҫтында, ер ҡуйынында арымай-талмай хеҙмәт итәбеҙ. Шул уҡ ваҡытта беҙҙе бар ҡылған, ер ҡуйынында йәшәткән Раббыбыҙға рәхмәтебеҙҙе белдерергә, Уны данларға ла онотмайбыҙ. Беҙҙең тәндәребеҙ, әйтерһең, гел сәждәлә. Һеҙ Уға ғибәҙәт ҡылған кеүек, беҙ ҙә Уға ғибәҙәт ҡылабыҙ. Әһәмиәтһеҙ йән эйәләре тип уйламағыҙ беҙҙе, беҙҙе лә Аллаһ бар ҡылған. Ямғырлы көндә, беҙ ер өҫтөнә сыҡҡанда, зинһар, иғтибарлы булығыҙ, аяҡ аҫтарығыҙға ҡарап йөрөгөҙ, беҙҙе һытып ҡуймағыҙ!

# Как прекрасно разговаривает с нами человек (1)

## Происхождение человека



Наверное, ты задумывался о том, где ты был до своего рождения, зачем появился на этот свет, куда потом уйдешь? Как появился самый первый человек на земле? Во все времена вопрос о происхождении человека не переставал волновать людей. Сегодня на этот счет существуют различные взгляды, но какой из них верный? Давайте с вами отправимся на поиски ответа на этот извечный вопрос человечества.

